✓ *Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, гүзәл холоҡлолар һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шунлыҡ өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ.*

*РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

25 АПРЕЛЬ - 1 МАЙ (АЛАҒАРАЙ-ҺАБАНАЙ)

2009 ЙЫЛ

№17 (331)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һаңғырауланған федераль үҙәк...**

ишетерме милләттәр тауышын?



2

**Гел беренсе беренселәр,**

йәғни бындағы уҡыусылар гимназия-интернатты камил дәүләт итеп баһалай



4-5

**Тәртипкә бойһоноу...**

нәҫелдән килә



8-9

**Көнөлдө күккә сөйөргә**

бер һүҙең етә...



11

**ТВ программа**

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Сәйәси көрәш ысулы булараҡ, митингтарҙың әһәмиәтен низә күрәһегеҙ?*

***Румиль АҘНАБАЕВ, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:***

-Митинг, беренсенән, халыҡты туплауҙын, ижтимағи аңын уятыуҙың иң йоғонтоло формаһы һанала. Икенсенән, ҡайһы бер көстәр һунғы ваҡытта төрлө мәғлүмәт саралары аша йәки былай ғына республикабыҙ етәкселеге эшмәкәрлегенә бәйле ялған, дөрәслөккә тап килмәгән һүҙ таратып, халыҡтың башын бутарға тырыша. Әле үткән шәмбелә булған митингта беҙ был хаҡта ла халыҡҡа тура-нан-тура белдереп сығыш яһаныҡ. Митингтың, күҙмәкүҙ һөйләгәс, кешене ышандырыу тәьҫире көслө. Беҙ был митингҡа баш ҡалабыҙға яҡын урынлашҡан район вәкилдәрен йәлеп иттек. Баймаҡтар һәм Сибай ҡалаһы вәкилдәре саҡырмаһаҡ та килеп еткән.

***Риф ИСӘНОВ, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе:***

-Федераль органдар, бигерәк тә Дәүләт Думаһы Рәсәй Федерацияһы составындағы республикаларҙы, үҙ ерендә йәшәгән йөҙҙән ашыу милләт вәкилдәрен күрмәҫкә, танымаҫҡа, хоҡуҡтарына күҙ йомоп ҡарарға тырыша. Бындай саҡта митинг үҙебеҙҙең донъяла барлығыбыҙҙы, милләт булараҡ тулы хоҡуҡлы йәшәйешкә лайыҡлы икәнебеҙҙе раҫлар һәм рәсми органдарға барып ишетелә. Сәйәси көрәштең митинг формаһын беҙгә киләсәктә лә йышыраҡ ҡулланырға тура киләсәк әле.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

*(Теманың дауамын 2-се биттә уҡығыҙ).*

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ ҠЫҘҘАР...

## донъя модель бизнесын яулай



**Башҡорт ҡыҙҙарының һылыулығы, зифа буйы Рәсәй, сит илдә лә юғары баһаланыуы бөгөн бер кемгә лә сер түгел. Улар әленән-әле гүзәллек бәйгеләрендә үҙенсәлекле матурлыҡ сифаттары менән Башҡортостанды лайыҡлы таныта килә. Ә Өфө һылыуы Эльвира Хисаева донъя модель бизнесы даирәләрен дә яулауға өлгәште. Өсөнсө йыл инде топ-модель Нью-Йорк, Париж, Милан, Лондондың билдәле агентлыҡтары, дизайнерҙары менән хеҙмәттәшлек итә. Уҡыу йортонда имтихандар бирергә тип, Өфөгә ҡайтҡан Эльвираны, мәленән файҙаланып, әңгәмәгә саҡырҙыҡ. Ваҡыты ни тиклем генә тығыҙ булыуына ҡарамаҫтан, ул мода донъяһы, матурлыҡ хаҡында үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашырға форсат тапты:**

**- Модель булыу һинең күптәнге хыял инеме, әллә ул бары тик осраҡлыҡмы?**

- Ун биш йәшемә тиклем мин модель булыу, етмәһә, донъя кимәлендәгеһе тураһында хыялланыу түгел, башыма ла инеп сыҡҡаны булманы. Мәктәптә тамамлармын да, иҡтисадсыға йәки финансистка уҡырмын, тип уйлай торғайным. Көтмәгәндә яҙмышым икенсе юл алды ла ҡуйҙы. Бик яҡшы фотограф дуҫым минең фотоларымды интернет аша Мәскәү модель агентлығына ебәргән, ә был турала минә әйтмәгәйне. Бер ваҡыт әсәйем менән өйҙә ултырһаҡ, беҙгә шылтыраталар. Телефонды алһам: "Һаумыһығыҙ, беҙ "Президент" агентлығынан", - тиҙәр. Мин көтөлмәгән хәбәрҙән ҡаушап ҡалдым. Ә артабан саҡырыу буйынса юлға сығыу теләге менән яндым, тик әсәйем генә тәүҙә ҡаршы торҙо. Кем ун биш йәшлек кенә ҡыҙын сит ҡалаға бер үҙен генә сығарып ебәрһен инде? Шулай ҙа барыһы ла яҡшы буласаҡ, тип ныҡлы ышандырғас, ул ризалашты. Бына шулай барыһы ла осраҡлы килеп сыҡты. Мәскәүгә килгәс, тәүге фотографиялар эшләнде, мин агентлыҡ етәкселәренә бик оҡшаным. Фотоһүрәттәремде интернетка ҡуйыуҙары булды, төрлө билдәле агентлыҡтар үҙҙәренә эшкә саҡыра башланы. Мине тиҙ арала сит ил паспорты эшләргә ҡушып, Өфөгә ҡайтарып ебәрҙеләр. Был ваҡытта Өфө авиация колледжында беренсе курста уҡып йөрөй инем, артабан уҡыуымды ситтән тороп дауам иттем, быйыл тамамлайым.

Модель бизнесындағы тәүге юлым Таиландтан башланды. Унан һуң Токиоға барҙым, аҙаҡ инде күберәк Европала эшләй башланым. Артабан - Нью-Йорк, Париж, Милан, Лондон. Ә 2008 йылдан алып Америкаға ла сыға башланым.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ИШАРА

**Үҙгәртеп ҡороу, сәйәси һәм иҡтисади түңкәрелеш йылдарында төрлө сәйәси һәм ижтимағи ойошмалар уҙғарған митингылар ғәҙәти бер хәлгә тиң ине. Хәҙер митингылар бик етди, хатта ғәҙәттән тыш ваҡиғалар айҡанлы ғына ойошторола, унда ла халыҡтың күпләп ҡатнашыуы икеле. Ә бына уҙған шәмбелә Өфөлә республикабыҙҙың милли-мәҙәни йәмәғәт ойошмалары уҙғарған митингыға халыҡ күп килгәйне. Тағы ла шуныһы иғтибарға лайыҡ: бында иң күбе башҡорттар булһа ла, митингыла татар, сыуаш, мари, рус, украин һәм башҡа милләт вәкилдәре лә бик әүҙем ҡатнашты. Төрлө милләт кешеләренә бына шулай тупланып сығыш яһау өсөн нәмә сәбәп булды һуң?**

# ҺАҢҒЫРАУЛАНҒАН ФЕДЕРАЛЬ ҮҘӘК...

## ишетерме милләттәр тауышын?

Билдәле булыуынса, 2007 йыл аҙағында - 2008 йыл башында уҙғарылған парламент һәм ил президентын һайлауҙар мәлендәге ығы-зығынан файҙаланып, Рәсәйҙең сәйәси етәкселеге аҫтыртын рәүештә хәҙер инде яманаты сыҡҡан 309-сы һанлы "Рәсәй Федерацияһының айырым закон акттарына белем биреүҙең дәүләт стандарты төшөнсәһен һәм структураһын үҙгәртеү буйынса үҙгәрештәр индереү тураһында" исемле Федераль закон ҡабул итте. Тәү ҡарамаҡҡа законда Рәсәйҙең милли мәғарифын төптән үҙгәртеү (ысынбарлығында, юҡҡа сығарыу) маҡсаты ҡуйылғанлығы беленмәй ҙә тиерлек. Юридик төшөнсәләрҙең йә былай, йә тегеләй үҙгәртелеүенә беҙ күптән күнегеп бөткәнбеҙ, шуғамы икән, тәүҙәрәк эш тап хәйләкәр сәйәсмәндәр ҡорған план буйынса барҙы. Баҡһаң, закон бик мәкерле булып сыҡты: бер ниндәй етди сәбәпһеҙ, төбәк власть органдары, милли йәмәғәтселек менән кәңәшләшеп тә тормайынса, федераль стандарт төшөнсәһенән белем биреүҙең милли-төбәк компоненты алып ташланды. Шул законды ҡабул иткәндә Башҡортостандан һайланған Дәүләт Думаһы депутаттары ҡайҙа булды икән, тип аптырап та ҡуяһың ҡай саҡта. Законды өс уҡыуҙа ҡабул иткәнсе байтаҡ ҡына ваҡыт үтә, тап шул мәлдә үҙебеҙҙең депутаттар оран һалып сыҡмағас, уларҙың бахыр вәкәләтлеге ҡороһон... Ә әлеге закон бары бер нәмәне генә аңлата: артабан мәктәптә ниндәй предметтар уҡытыласағын бынан ары тик Үҙәк кенә хәл итәсәк. Әлбиттә, ниндәй ҙә булһа милләт вәкилдәренең үҙ телендә һөйләшеүендә лә сепаратизм күрергә маташҡан Үҙәк өсөн милли телдәр, милли мәҙәниәт бар ни ҙә, юҡ ни.



*Үҙ милләттәренең киләсәгенә ниндәй хәүеф янауын иң элгәре Башҡортостан һәм Татарстан зыялылары һиҙеп алып, Үҙәк сәйәсәтенә ҡырҡа ҡаршылыҡ күрһәтә башланы. Әлбиттә, бындай ҡаршы тороу закон рөхсәт иткән юлдар менән башҡарыла. Төбәк ваҡытлы матбуғатында килеп тыуған хәл айышына аңлатма биргән мәҡәләләр, милли интеллигенцияның, халыҡтың әлеге закон талаптары менән риза булмаясағы хаҡында сығыштар баҫылып сыҡты, пикеттар ойошторолдо, Рәсәйҙең юғары власть органдарына йөҙәрләгән хаттар, йәмәғәт ойошмалары ҡабул иткән резолюциялар ебәрелде.*

Үҙ милләттәренең киләсәгенә ниндәй хәүеф янауын иң элгәре Башҡортостан һәм Татарстан зыялылары һиҙеп алып, Үҙәк сәйәсәтенә ҡырҡа ҡаршылыҡ күрһәтә башланы. Әлбиттә, бындай ҡаршы тороу закон рөхсәт иткән юлдар менән башҡарыла. Төбәк ваҡытлы матбуғатында килеп тыуған хәл айышына аңлатма биргән мәҡәләләр, милли интеллигенцияның, халыҡтың әлеге закон талаптары менән риза булмаясағы хаҡында сығыштар баҫылып сыҡты, пикеттар ойошторолдо, Рәсәйҙең юғары власть органдарына йөҙәрләгән хаттар, йәмәғәт ойошмалары ҡабул иткән резолюциялар ебәрелде. Башҡортостан һәм Татарстан Президенттары М. Ғ. Рәхимов, М. Ш. Шәймиев та үҙ позицияларын баштан уҡ белдерә килеп, ошо мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙе талап итте.

Тик шуныһы: тәү мәлдәрҙә төбәктәрҙә ошо законға ҡарата кире мөнәсәбәт барлығын ишетмәмеш-күрмәмешкә һалышҡан Үҙәк законды ҡайтанан үҙгәртмәйенсә генә төрлө кимәлдә вәғәҙәләр биреү менән сикләнеп ҡалыу тактикаһын һайланы. Йәнәһе, ҡайҙа барһын ул аборигендар, шаулар-шаулар ҙа, барыбер буйһонорға мәжбүр булыр. Закон ҡабул ителгән бит, кем законға ҡаршы - шул экстремист! Яйлап-майлап дүндерә алмаһаҡ быларҙы, ҡурҡытып алдырырбыҙ, тип уйлай халыҡты телһеҙ төркөм итеп күрергә өйрәнгән федераль түрәләр. Әммә Рәсәй төбәктәрендә быуаттар буйына үҙ мәҙәниәте, тарихи традициялары, үҙ йөҙө булған тиҫтәләгән халыҡтарҙың барыһына ла сепаратист йәиһә экстремист ярлығы тағып булмаясаҡ.

Килеп тыуған ситуацияла милли төбәктәр Үҙәк властарға үҙ тауышын талапсаныраҡ, ҡеүәтлерәк рәүештә еткерә алырға тейеш. "Ятып ҡалғансы, атып ҡал" тигәндәй, ваҡытында үҙ талаптарыбыҙҙың ҡабул ителеүенә өлгәшмәһәк, яңынан маңҡорт хәленә ҡалыуыбыҙ бар бит. Тап бына шуның өсөн Башҡортостан Республикаһының күп һанлы милли-мәҙәни йәмәғәт ойошмалары башланғысы менән белем биреү өлкәһендә милли-төбәк компонентын һаҡлап ҡалыу маҡсатында республика митингыһы уҙғарылды ла инде. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге, Башҡорт йәштәре иттифағы, Сыуаш мәҙәниәте йәмғиәте, "Кобзарь" украин милли-мәҙәни автономияһы, Р. Ғамзатов исемендәге Дағстан милли-мәҙәни үҙәге, "Рамазан" төрки милли мәғрифәт үҙәге, "Ала-Тоо" ҡырғыҙ мәҙәниәте үҙәге етәкселәре һәм башҡа йәмәғәт эшмәкәрҙәре бер тауыштан сығыш яһап, Федераль үҙәктең белем биреү өлкәһендә алып барылған унитаристик сәйәсәте менән риза булмауын белдерҙе.

Әлегә тиклем ғәмәлдә булған законға ярашлы мәктәптәрҙә милли телдәрҙе уҡытыу, балаларҙы тыуған яҡ тарихы һәм мәҙәниәте менән таныштырыу һис бер ҡаршылыҡһыҙ алып барылып, халыҡтарыбыҙҙың бер ҡорҙа һыйышып, тыныс һәм татыу йәшәй алыуына булышлыҡ итеүе тураһында һөйләне сығыш яһаусылар. Һыналған һәм файҙалы ғәмәлдән ваз кисеп, мәктәпте милли мәҙәниәттәр өсөн күрәләтә зыянлы юлға баҫтырырға теләүсе унитаристарҙың йәшертен маҡсаттары фашланды ошо сәйәси сарала. Сыуаш мәҙәниәте ойошмаһы рәйесе Юрий Михайлов БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай тарафынан Рәсәй Конституция Судына "Мәғариф тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерелеүҙең илдең төп законына ярашлы булыу-булмауы хаҡында һорау ебәрелергә тейеш, тигән тәҡдим индерҙе. Митингыла ҡатнашыусылар Рәсәй Федерацияһы етәкселегенән илдең федератив демократик хоҡуҡи дәүләтселеген ҡаҡшатмауҙы, төбәктәр менән бюджет-һалым сәйәсәтен ҡайтанан ҡарауҙы, белем биреү өлкәһендә федерализм принциптарынан тайпылмауҙы, ебәрелгән хаталарҙы кисекмәҫтән төҙәтеүҙе талап иткән резолюция ҡабул итте.

Әйе, республикабыҙҙа йәшәгән күп милләтле халыҡ вәкилдәре ошолай берҙәм сығыш яһап, үҙ талаптарын Үҙәккә ҡәтғи рәүештә еткерә алған хәлдә генә Мәскәү сәйәсмәндәре төбәктәр менән булған мөнәсәбәтендә "һаңғыраулыҡ" сиренән азат буласаҡ. Белем биреүҙең дәүләт стандарты төшөнсәһе законда ла "федераль" стандарт, тип нарыҡлана бит: тимәк, ошо стандарттың мотлаҡ милли төбәктәр билдәләй торған өлөшө булырға тейеш. Үҙәктең үҙе яҙғанды үҙе аңламаҫҡа тырышыуынан һис бер фәтеүә сыҡмаҫ. Әгәр ул үҙе теләге менән йоҡторған сәйәси сирен дауаларға теләмәй икән, Башҡортостан йәмәғәт ойошмаларының Татарстан һәм башҡа милли төбәктәрҙәге фекерҙәштәре менән берҙәм ҡаршы тороу акцияларын башлап ебәреүе лә бар бит. Шаңдауы сит илдәрҙә лә яңғыраясаҡ бындай хәлде булдырмау хәҙер Мәскәү власть даирәләренең килеп тыуған мәсьәләне тиҙ арала демократик юл менән сисә алыуы менән генә бәйле.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 4291 ҡыҙ-ҡатын "Әсәлек даны" миҙалына эйә. Был арала был иҫәп тағы ла артты: БР Президенты Мортаза Рәхимов тантаналы шарттарҙа 48 әсәгә тапшырҙы был наградаmaking.

✓18-27 апрелдә, РФ һәм БР Ҡыҙыл китаптарына индерелгән төрҙәрҙән тыш, ата һуйыр һәм ҡорҙарға, ҡурпысыҡтарға, ҡыр ҡаҙҙарына, ҡыр өйрәктәренә яҙғы һунар миҙгеле асыла. БР Хөкүмәте бойороғо менән республиканың һунар ерҙәре биләмәләрендә ҡошҡорт атыу сроктары һәм лимиттары билдәләнде. Шулай уҡ БР Хөкүмәте бойороғо менән 15 апрелдән 15 июнгә тиклем бөтә төрҙәге һыу сығанаҡтарында сәнәғәт балыҡсылығы, 1 майҙан 10 июнгә тиклем һәүәҫкәр һәм спорт балыҡсылығы тыйыла.

✓РФ Дәүләт Йыйылышы хәрәкәт ваҡытында йәйәүлеләргә өҫтөнлөк бирмәгән өсөн автомобиль йөрөтөүселәргә штрафты арттырыу тураһында закон проектын икенсе уҡыуҙа ҡабул итте. Әле бының өсөн 100 һум штраф ҡарала ине, бынан һуң йәйәүлеләрҙе һанға һуҡмаған водитель 800 һумдан бер мең һумға тиклем штраф түләйәсәк. Ә бына йәйәүле үҙе юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙһа, иҫкәртелә йә 200 һум штраф түләй.

✓БР Президенты М. Рәхимов эш сәфәре менән Бишбүләк, Миәкә, Стәрлебаш һәм Стәрлетамаҡ райондарында булды. Республика башлығы һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү мәсьәләләрен һәм Республика Советының һаулыҡ һаҡлау буйынса күсмә ултырышына әҙерлек барышын иғтибар үҙәгенә алды.

✓БР Хөкүмәт йортонда 2010 йылда Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса БР Хөкүмәте ҡарамағындағы комиссияның тәүге ултырышы уҙҙы. Ултырышты БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев алып барҙы.

✓"Салауат Юлаев" хоккей командаһының 6 уйынсыһы - Алексей Терещенко, Александр Пережогин, Александр Радулов, Виталий Прошкин, Александр Еременко һәм Олег Твердовский Рәсәй йыйылма командаһы составында Швейцарияның Берн ҡалаһында донъя чемпионатында ҡатнашасаҡ.

***✓ Рәсәй Премьер-министры Владимир Путиндың эш хаҡы Фонд директорыныҡынан (йәғни, икенсе төрләрәк әйткәндә, илдең баш сантехнигыныҡынан) 4 тапҡырға аҙыраҡ була бит. Вәт заманалар!***



АҘНА ШАҢДАУЫ

# РӘСӘЙҘӘ ЙӘШӘҮ КЕМГӘ ЯҠШЫРАҠ:

## йырсығамы, прокурорғамы, әллә сантехниккамы?

**Үткән аҙнала ҡырҡҡа ярылырҙай булдым. Ваҡиғалар шул тиклем күп. Һәр береһе ҡыҙыҡлы. Ҡайҙа ташланырға ла белеп булмай. Йә буш, йә ҡуш, тигән кеүек була инде. Беренсе урында, әлбиттә, Алла Борисовна Пугачеваның данлыҡлы юбилейы. Күренекле йырсыға - алтмыш! Советтар Союзының, ә һуңынан - яңы Рәсәйҙең һандуғасы. Алтмыш тип әйтерлек тә түгел. Сәскә кеүек. Брежнев, Андропов, Черненко, Горбачев, Ельцин, Путин һәм Медведев кеүек эреле-ваҡлы сәйәси эшмәкәрҙәр осоронда йәшәгән һәм ижад иткән данлыҡлы йырсы, тип ысҡындырған имеш бер тарихсы уның хаҡында.**

Әйе, Пугачева "Аҙна шаңдауы"нда телгә алырлыҡ шәхес. Һуңғы ике аҙна дауамында Рәсәй телевидениеһының һәр бер каналында тиерлек һайраны ла һайраны бит ул. Йырсы кимәленән күптән сыҡҡан инде Алла Борисовна. Хәҙер ул һоҡланырлыҡ һәм көнләшеп ҡарарлыҡ шәхес. Нишләп, тип уйлайһығыҙмы? Баҡтиһәң, ҡатын-ҡыҙҙар уға һоҡланып ҡарай, сөнки Пугачева бер иргә генә йәбешеп ятмай, ә уларҙы бирсәткә урынына алмаштыра, имеш. Ә ир-егеттәргә, йәнәһе, уның бушаҡлығы оҡшай. Бер нисә тапҡыр иргә сығып, композиторҙар, музыканттар һәм йырсылар менән тормош көтөп ҡараған Алла Борисовна һуңғы йылдарҙа ҡыҙы Кристина йәшендәге һәм хатта уларҙан йәшерәктәр менән шаяра башланы. Һәйбәт йәшәй Алла Борисовна. Филипп Киркоров менән Максим Галкиныҡыҙ арыраҡ торһон. Уның хаҡында хатта әле генә фани донъя менән хушлашҡан Буранбай (Бүребай) мәрхүм дә хыялланған булған икән. Юғиһә, "Алла тиһәң, мулла ҡыҙын бирә, Алла тиһәң, Пугачева иҫкә килә. Пугачева мулла ҡыҙы булһа икән..." тип яҙып сыҡмаҫ ине бит. Тимәк, Алла уның да уҙегенә үтеп ингән булған? Буранбай бейеклегенә күтәрелеп булмаҫ. Юҡ, яҙмайым Алла Пугачева хаҡында.

Үткән аҙнала ғына түгел, һуңғы ай-ай ярым дауамында барған бер юлы ике енәйәти ваҡиға хаҡында ла бәйән итергә булыр ине. Уйламай ғына француҙға кейәүгә сығып, шунан бала табып, һуңынан айырылып, балаһын иренән урлап тиерлек алып киткән Рәсәй гражданкаһы Ирина Беленькая тураһында, мәҫәлән. Рәсәй халҡы бар эшен онотоп, Иринаның, уның балаһы Лизаның һәм күҙе-башы күгәргән ире Жан-Мишель Андреның мажараһын көн һайын тиерлек зәңгәр экрандарҙан тура эфирҙа күҙәтә. Әйтергә кәрәк, был ваҡиғаны киң яҡтыртыу Рәсәй йәмғиәтендә бер юлы бер нисә проблема хәл итергә ярҙам итә. Көрсөк осоронда халыҡҡа (һәм, әлбиттә, ваҡытлы матбуғат сараларына) ошондайыраҡ әҙер сериал кәрәк ул. Беренсенән, кешене башҡа көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында баш ватыуҙан азат итә. Икенсенән, бер ғәйепһеҙ ыҙа сиккән Рәсәй гражданкаһын йәлләү тойғоһо беҙҙең халыҡта патриотизм тәрбиәләргә булышлыҡ итә (Бахыр ҡыҙыҡай. Ире яуыз, балаһын тартып алған. Беҙ бында һәйбәт йәшәйбеҙ әле). Өсөнсөнән, был ваҡиға сит илдәргә ҡарата нәфрәт тойғоһо уятырға ярҙам итә (У-у-у, дошмандар, тәүҙә беҙгә көрсөк ебәрҙеләр, ҡыҙҙарыбыҙға өйләнәләр, хәҙер балаларыбыҙҙы тартып ала башланылар). Дүртенсенән, Беленькая хаҡындағы хәбәр икенсе бер хөкөм эше хаҡында һүҙ йөрөтөргә ирек бирмәй (Бер юлы ике енәйәт эшен экрандан күрһәтеү урынһыҙ, тип фараз итәләр беҙҙә дөрөҫ һәм ваҡытлы мәғлүмәт менән тәьмин итеүселәр). Ул Михаил Ходорковский һәм Платон Лебедев өҫтөнән алып барылған хөкөм эше. Улар күптән инде Чита өлкәһендә колонияла срок һуҙалар түгелме, тиһегеҙме? Юҡ икән. Был ике олигархты (дөрөҫөрәге, элекке олигархты) Мәскәүгә килтергәндәр. Уларҙың ғәйептәре бөтмәҫ-төкәнмәҫ, имеш. Уларҙың һаман түләп бөтөлмәгән һалымдары, дәүләттән йәшереп басырылған аҡсалары бар, имеш. Уйлап ҡараһаң, Ходорковскийҙың банкыларҙағы иҫәптәренән бер нисә миллиард һум аҡсаны килтереп сығарып, Рәсәй ҡаҙнаһына индерһәләр, бөгөн бөтә мир менән килеп төртөлгән көрсөктән сығып китеүе лә күпкә еңелерәк булыр ине, тим. Һәйбәтерәк йәшәр инек бөтәбеҙ ҙә, тимәксемен. Бәлки, бөгөн прокурорҙар, судьялар шуға тырышалыр, әй.

Дөрөҫөн генә әйткәндә олигархтарҙың эше шул бит инде. Улар урлайҙар, тотолалар, ултыралар. Һәм ултырасаҡтар ҙа. Владимир Владимирович менән Дмитрий Анатольевич иҫән-һау һәм власта саҡта Ходорковский менән Лебедевтарҙың баштары төрмәнән сыҡмаясаҡ. Быға иманым камил, тиҙәрме әле? Әммә бөгөн улар хаҡында ла яҙырға уйламайым.

Владимир Путин менән Дмитрий Медведевтың сираттағы инициативалары хаҡында ла яҙырға булыр ине. Ишеттегеҙме икән, юҡ микән, Рәсәй Президенты ипотека кредиттары буйынса банк проценттарын төшөрөргә вәғәҙә иткәйне, Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Үҙәк банкының рефинанслау ставкаларын 0,5 процентҡа кәметеп тә ҡуйҙы. Тормош яҡшыра башланы түгелме? Хәҙер етәкселәребеҙ икеүләшеп тороп инфляцияны ауыҙлыҡлаһалар һәм эш хаҡтарын саҡ ҡына булһа ла арттырһалар...

Хыялланыуҙан әле бераү ҙә тыймаған. Бөгөн һүҙем бөтөнләй башҡа нәмәләр хаҡында. Хәйер, һүҙ барыбер аҡса тирәләй уралаҫаҡ. Заманаһы шулай бит.

Үткән аҙнала Рәсәй Федерацияһының Генераль прокуратураһы федераль структураларҙа һәм дәүләт корпорацияларында дәүләт аҡсаларын иҫәпһеҙ-һанһыҙ туҙҙырыу факттарын асыҡлауы тураһында хәбәр итте. Аяҙ көндә йәшен кеүек яңғыраны был хәбәр. Уйлап ҡарағыҙ әле, урамда көрсөк, Президенттан алып ябай эшсегә тиклем һәр бер кеше хәленән килгәнсә экономияларға, аҡсаны әҙерәк тотонорға, тыйнағыраҡ йәшәргә, бер һүҙ менән әйткәндә, билбауҙы нығыраҡ ҡыҫырға тырыша. Президент, мәҫәлән, аҙым һайын тиерлек чиновниктарҙы, банкирҙарҙы, хатта олигархтарҙы иҫкәртеп-киҫәтеп кенә тора, йәнәһе, юрғаныгыҙға ҡарап аяғығыҙҙы һуҙығыҙ. Самаһыҙ ҡыланмағыҙ. Куршевелдәрҙә ял итмәгеҙ. Сит ил машиналарынан үҙебеҙҙекеләргә күсеп ултырығыҙ. Президент хакимиәтендә, Хөкүмәттә, төбәк етәксе органдарында ҡыҫҡартыуҙар (йәки икенсе төрләрәк әйткәндә, оптималләштереүҙәр) бара. Томск өлкәһе губернаторы, мәҫәлән, үҙенең һәм урынбаҫарҙарының эш хаҡын утыҙ процентҡа ҡыҫҡартҡан. Бына нисек йәшәргә кәрәк, йәмәғәт! Халыҡ нисек - беҙ ҙә шулай, тигән девиз өҫтөнлөк итергә тейеш был көндәрҙә. Ана, Премьер-министрыбыҙҙың торлаҡ шарттары ябай халыҡтыҡынан бер нәмәһе менән дә тиерлек айырылмай ("Киске Өфө"нөң быға тиклемге "Аҙна шаңдауы"зарының береһен ҡарағыҙ). Шул уҡ ваҡытта илебеҙҙә аҡсаны рәхәтләнеп тотоноп шашынғандар ҙа юҡ түгел икән. Үҙҙәре эшләп алған аҡса булһа, бер эш. Дәүләт биргәнде туҙҙыралар бит! Йәғни, халыҡ аҡсаһын әрәм-шәрәм итәләр. Кемдәр улар, исемдәрен атағыҙ, халыҡ елкәһендәге "әре ҡорттар"ҙы һәр кем белергә тейеш, тиһегеҙме? Рәхим итегеҙ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡын реформалауға булышлыҡ итеү фонды, Дәүләт тәбиғәт надзоры, Рәсәй ҡулланыу надзоры агентлығы, Рәсәй ауыл хужалығы надзоры агентлығы, Күсемһеҙ милек агентлығы һәм башҡа ҡайһы бер ойошмалар. Был хаҡта үткән шаршамбыла Мәскәүҙә кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ буйынса Бөтә Рәсәй форумында сығыш яһағанда Генераль прокурорҙың беренсе урынбаҫары Александр Буксман белдергән, имеш. Әйтәйек, Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға булышлыҡ итеү фонды. Уны махсус рәүештә торлаҡ йорттарҙы кеше рәтенә килтереү, йәғни капиталь ремонт үткәреү өсөн булдырғандар. Йыл һайын дәүләт ҡаҙнаһынан был Фондтың эшен ойоштороу өсөн миллиардлаған аҡса күсерелә. Ә улар? Тикшереү ваҡытында асыҡланыуынса, Фонд хеҙмәткәрҙәре дәүләт аҡсаһын ил буйлап ҡыйбатлы купеларҙа йөрөү, комфортлы фатирҙарҙа йәшәү, аэропорттарҙа махсус залдарҙа ял итеү өсөн файҙаланған. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡоторонған.

Фонд етәксеһе Константин Цициндың эш хаҡы, мәҫәлән, үткән йылда 16,5 миллион һум тәшкил иткән. Айына 1 миллион 400 мең тирәһе килеп сыға түгелме? Рәсәй Премьер-министры Владимир Путиндың эш хаҡы Фонд директорыныҡынан (йәғни, икенсе төрләрәк әйткәндә, илдең баш сантехнигыныҡынан) 4 тапҡырға аҙыраҡ була бит. Вәт заманалар! 97 хеҙмәткәрҙән торған дәүләт корпорацияһының эшен ойоштороу өсөн 2008 йылда 340 миллион һумдан ашыуыраҡ сумма тотонолған.

Шул иҫәптән, хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына (һәм телһә нindәй премияларға, матди ярҙамға һ.б.) 235 миллион һум тирәһе. 2009 йылда торлаҡ коммуналь фондының эшен ойоштороуға йүнәлтелгән аҡса тағы ла 100 миллион һумға арттырылған.

Әйткәндәй, Фондтың үҙендә ошондай сығымдарҙы, юғары эш хаҡтарын нисек аңлаталар һуң? Баҡтиһәң, улар артыҡ борсолмай. Күпме эшләнек, шул тиклем алдыҡ һәм аласаҡбыҙ, тип яуап ҡайтарғандар, имеш. Дәүләт ҡаҙнаһынан килгән аҡсаны бүлеп, төбәктәргә йүнәлтеп ултырған ойошма тағылыш ҡайҙан ала икән? Яп-ябай ғына. Ҡаҙнанан килгән аҡса бер нисә айға банкыларға махсус иҫәптәргә һалына. Йәнәһе, ул билдәле эш өсөн тәғәйенләнгән маҡсатлы сумма һәм уны башҡа эшкә йүнәлтергә ярамай. Бер нисә ай эсендә миллиардлаған һумдан ярайһы уҡ процент "тама". Үткән йылда, мәҫәлән, был килем 11 миллиард һум тәшкил иткән. Һәйбәт йәшәйҙәр бит сантехниктар.

Коммунистик ҡараштан сығып ҡарайыҡ, булмаһа. Өҫтә әйтеп үтелгән Цицин һәм компания - дошмандармы? Һис шикһеҙ! Халыҡ аҡсаһын туҙҙыралар, шашалар һәм ҡотороналар. Уларҙы кәмендә эштән алыу, экспроприация һәм конфискация кәрәк.

Ә капиталист күҙлегенән иһә, улар - маладис! Юғалып ҡалмағандар. Аҡсаны эшкә ҡуша белгәндәр. Ундайҙарға һәйкәл уҡ ҡуймаһалар ҙа, эш тәжрибәһен уртаҡлашып, гәзиттәргә яҙырға кәрәк. Ғөмүмән, барлыҡ дәүләт органдарын корпорацияларға әүерелдерергә ваҡыт. Юғиһә, Генераль прокуратура хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы Фондтыҡы менән сағыштырғанда сүп кенә. Ошо мәғлүмәтте еткергән Александр Буксман, мәҫәлән, үткән йылда ни бары 2 миллион 194 һум эш хаҡы алған. Ә Генпрокурор Юрий Чайка ни бары 2 миллион 79 мең һум ғына.

Һығымта: Прокурорҙарға йәшәү ҡыйыныраҡ.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? К А Й Ҙ А ? К А С А Н ?

✓"Интерфакс" белдереүенсә, Дәүләт Йыйылышы балалар өсөн "комендант" сәғәте булдырыу тураһында закон ҡабул иткән. Законда билдәләнеүенсә, РФ субъекттарында хәҙер 18 йәшкә тиклемгеләргә, өлкәндәр оҙатыуында булмаһа, киске 10-дан иртәнге 6-ға тиклем урамда һәм йәмәғәт урындарында булыуҙы тыйыу хоҡуғы бирелә. 18 йәше тулмағандарға хатта енси характерҙағы тауарҙар, алкоголле эсемлектәр, һыра һатылған урындарға, ғөмүмән, уның һаулығына зыян килтерә торған башҡа учреждениеларға инеү тыйыла. Липецк өлкәһендә тәжрибә рәүешендә "комендант" сәғәте былтыр уҡ индерелгән булған. Һөҙөмтәлә, бәлиғ булмағандар тарафынан ҡылынған енәйәттәр байтаҡҡа кәмегән.

✓Башҡортостанда криминоген хәлдең торороҡланыуы күҙәтелә. Был хаҡта БР буйынса Эске эштәр министрлығының оператив кәңәшмәһе ваҡытында министр Игорь Алешин белдерҙе. Быйылғы өс ай эсендә талау ниәте менән һөжүм итеүҙәр 15,6 процентҡа,талауҙар - 16,5, урлауҙар 21,8 процентҡа кәмегән. Мутлыҡ һәм хулиғанлыҡ осраҡтары ла аҙыраҡ. Енәйәттәрҙе асыу күрһәткесе яҡшырған. Быйыл өс ай эсендә13 мендән ашыу енәйәт асылған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 8,7 процентҡа күберәк.

✓Өлкән синыф уҡыусылары, башланғыс, урта профессиональ учреждение уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары организмында наркотиктар булыу-булмауын тикшереү өсөн мотлаҡ медицина тикшереүе индереләйне. Өфөнөң 141 дөйөм белем биреү мәктәбендә 9-11 класс уҡыусыларынан 16000 бала тикшереү үткән, уларҙың 46-һының наркотик ҡулланыуы асыҡланған. Республикала бөгөн 5156 кеше "наркоман" диагнозы менән диспансер иҫәбендә тора. Уларҙың 36-һы 14-19 йәштә. Бынан тыш, тағы ла 2164 кеше наркотик матдәләрҙе ҡулланыусы булараҡ теркәлгән. Судмедэксперттар мәғлүмәттәре буйынса, былтыр наркотик матдәләрҙән 308 кеше ағыуланып үлгән.

✓РФ Хеҙмәт кодексына ярашлы, 1 Май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы, 9 Май - Еңеү көнө. Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһында биш көнлөк эш аҙнаһына байрам көндәре лә тап килеү менән бәйле 1, 2, 3, 4 һәм 9, 10, 11 май ял көндәре булып тора.

***✓ Бында бөтә республиканан йыйылған һәләтле балалар уҡый. Бер маҡсат менән йәшәгәс, дуҫтар ҙа күбәйә, ә дуҫтар һәм таяныр кешеләрең күберәк булған һайын, йәшәүе лә еңелерәк.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯРҘАМҒА МОХТАЖДАР...

## иҫәпкә алына

**Башҡортостан етәкселеге ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләргә ярҙам күрһәтмәксе. Ошо маҡсатта республикала БР Хөкүмәте эргәһендә ғаилә менән эшләү буйынса ведомство - ара совет төҙөү планлаштырыла. Бынан тыш, ғаиләләрҙең социаль паспорты булдырыласаҡ, уның нигеҙендә белгестәр ғаиләләрҙе көрсөктән сығарыу буйынса комплекслы саралар эшләйәсәк. БР Хөкүмәте ултырышында ошо тәңгәлдә ниндәй аныҡ саралар күреләсәге хаҡында һүҙ барҙы.**

Социаль йәһәттән хәүефле хәлдә булған 5 меңдән ашыу ғаиләлә 10328 бала тәрбиәләнеүе республика етәкселеген айырыуса борсоуға һала. Шуға күрә лә бөтә эш өлкәндәргә ярҙам итеүгә ҡарағанда, үҫеп килеүсе йәш быуынды бәләнән аралауға йүнәлтелә. Был ниҙән ғибәрәт һуң?

БР Премьер-министры урынбаҫары, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Фидус Ямалтдинов һүҙҙәренә ҡарағанда, ғаиләләрҙең социаль паспорты булдырыла һәм социаль-реабилитация ярҙамы күрһәтеүҙең һәр осраҡҡа ярашлы комплекслы планы эшләнә.

- Был ата-әсәләрҙе эшкә урынлаштырыуға, пособие һәм компенсация билдәләнгән тәртиптә матди ярҙам түләүгә, балаларҙы дауалау һәм һауыҡтырыу эшенә, юридик ярҙам күрһәтеүгә һәм башҡа мәсьәләләргә булышлыҡ итеүгә ҡайтып ҡала, - ти Фидус Әғләм улы.

Эште ниҙән башларға һуң? Вице-премьер билдәләүенсә, иң тәүҙә ярҙамға мохтаж ғаиләләрҙе асыҡлау һәм иҫәпкә алыу һәм ошо мәсьәлә мәнфәғәтен күҙәткән хеҙмәттәрҙең бер-береһе менән ваҡытында фекер һәм мәғлүмәт алышыуы.

Паспортлаштырыуға ниндәй ғаиләләр эләгәсәк? Әйткәндәй, ауыр тормош хәле төшөнсәһе граждандарҙың тормош эшмәкәрлеген боҙоусы һәм үҙ аллы рәүештә уны йырып сығыу мөмкин булмаған хәлде аңлата. Шуға күрә был йәһәттән әхләҡи яҡтан имен булмаған һәм ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләрҙе тигеҙләп ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Ауыр хәлдәге ғаиләләргә аҙ тәьмин ителгән, тулы булмаған йә күп балалы ғаиләләр, аҡыл һәм физик мөмкинлектәре сикләнгән балалары булған ғаиләләр, шулай уҡ ҡасҡындар һәм мәжбүри күсенеүсе ғаиләләрҙе индерергә була.

Ә инде әхләҡи именлек булмаған ғаиләләр төрөнә социаль хәүефкә дусар ителгән - ҡараусыһыҙ, берәҙәк, хоҡуҡ тәртибен боҙоусы һәм социаль-реабилитация үҙәктәрендә йәшәүсе балалары булған йәки балалар тәрбиәләү буйынса үҙ бурысын үтәмәгән, балаларға насар йоғонто яһаған йәки улар менән аяуһыҙ мөғәмәлә иткән ата-әсәле ғаиләләр инә. Ошондай айырманы асыҡлағандан һуң белгестәр ярҙамға мохтаж ғаиләләр һанын билдәләү өсөн берҙәм республика мәғлүмәт банкы булдырырға ниәтләй. Бөтә был пландар әле әҙерлек этабында, был эште ойоштороуҙа ашығыу кәрәкмәй, ти улар. БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев билдәләүенсә, иҡтисадтың тотороҡһоҙлоғо ҡайһы бер муниципалитеттарҙа халыҡтың социаль статусына кире йоғонто яһай: эшһеҙлек арта, имен булмаған ғаиләләр барлыҡҡа килә.

- Шуға күрә лә республика Хөкүмәтенең һәм урындарҙағы власть органдарының бурысы - халыҡтың тормош кимәле насарланыуға юл ҡуймау һәм йәмғиәттәге тиҫкәре хәлдәргә ҡарата ваҡытында һәм тейешле саралар күреү. Башҡортостан Президенты шулай талап итә, - ти Раил Салих улы.

**"БАШИНФОРМ"дан.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ГЕЛ БЕРЕНСЕ БЕРЕНСЕЛӘР,

## йәғни бындағы уҡыусылар гимназия-интернатты камил дәүләт итеп баһалай

**Уҡыу йылы тамамланыуға ла күп ҡалманы. Оло тормошҡа бына-бына аяҡ баҫырға торған сығарылыш уҡыусылары ниндәй хыялдар, маҡсаттар менән йәшәй икән? Берҙәм дәүләт имтихандары, хыялдарҙы тормошҡа ашырырға ҡамасаулаған кәртәләр һәм башҡалар тураһында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының XI синыф уҡыусылары Илназ Мәжитов, Флорида Миһранова, Тәлғәт Манатов, Фаягөл Шәрәфетдинова, Гүзәл Ғәлләмова менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**✸ Һөйләшеүҙе республикала ғына түгел, унан ситтә лә яҡшы таныш 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты тураһындағы һүҙҙән башлайыҡ. Һеҙҙең өсөн гимназия-интернат нимә ул?**

**Флорида МИҺРАНОВА:** Гимназия-интернат минең өсөн, беренсенән, тормошҡа ашҡан хыялым булһа, икенсенән, ул тормош майҙанына сығара торған йорт. Гимназия миңә бөтә нәмәне бирҙе. Беҙ ҡалала торһаҡ та, ҡала кешеләре түгелбеҙ, улар кеүек әллә нимәләр артынан сапмайбыҙ, үҙебеҙ бер татыу ғаилә булып, бер төрлө тәртип, бер төрлө мөнәсәбәттәр менән йәшәп тик ятабыҙ. Бында бер кем бер кемгә ауыр һүҙ әйтмәй. Үҙенә күрә йылы йорт, камил дәүләт - бының шулай икәнен бында йәшәп ҡараған, эшләгән кешеләр генә аңлайҙыр ул.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Бында бөтә республиканан йыйылған һәләтле балалар уҡый, улар етәкләшеп белем тауының иң юғарыһына үрләй. Бер маҡсат менән йәшәгәс, дуҫтар ҙа күбәйә, ә дуҫтар һәм таяныр кешеләрең күберәк булған һайын, йәшәүе лә еңелерәк.

**Фаягөл ШӘРӘФЕТДИНОВА:** Гимназия-интернат миңә үҙүҙемде, һәләттәремде асырға ярҙам итте. "Интернатташ" тигән тойғо ул туғанлыҡ тойғоһо кеүек үк, бик көслө, хатта ял итергә ҡайтып киткәндә лә бер-беребеҙҙе һағынышып киләбеҙ. Олимпиада, конференцияларҙа ҡатнашыу мөмкинлеге лә бында күберәк. Төрлө йүнәлештәр буйынса уҡытыу ҙа юғары уҡыу йортона уҡырға инеүҙе еңелләштерә. Үҙем гуманитар йүнәлешле синыфта уҡыйым, уҡытыусыларыбыҙ кәңәштәре менән һәр саҡ ярҙам итә.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Ысынлап та, бында килгән һәр баланың йәшерен таланттары асыла. Бына мин, мәҫәлән, IX синыфтан һуң килгәйнем, лидерлыҡ һәләттәремде астым һәм XI синыфта гимназияның президенты булдым. Икенсенән, ике йыл буйына төрлө олимпиадаларҙа ҡатнашып, "Рәми Ғарипов уҡыуҙары"нда Гран-при яуланым.

Ҡайҙа ғына барма, был уҡыу йортонда ҡасандыр белем алған бер генә кешене булһа ла осратырға мөмкин. Гимназистар берберене яҡын күреп, үҙ итеп, тартып тора.

**Илназ МӘЖИТОВ:** Ятаҡта йәшәү үҙ аллылыҡҡа өйрәтә. Ятаҡ тәрбиәһе кешелә яңы шәхес үҫтерә, тип әйткәндә лә була, сөнки үҙ тиҫтерҙәрең менән уртаҡ тел табыу, улар менән бергә йәшәү үҙе бер оҫталыҡ, күңел изгелеге талап итә. Бында уҡыуым менән ғорурланам, беҙ һәр ерҙә лә - беренсе!

**Тәлғәт МАНАТОВ:** Мин бында уҡырға килгән йылды "Сәсәндәр бәйге"һендә сығыш яһаным, башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаларында алдынғылыҡты бирмәй инем, шиғырҙар ҙа яҙам. Тик филология йүнәлеше буйынса китмәнем, физика-математика йүнәлешен һайланым, сөнки бөгөнгө заман талаптарына яуап бирер өсөн ир-егет техник һөнәргә эйә булырға тейеш, тип уйлайым.

**✸ Гимназияла ныҡлы һәм төплө белем алаһығыҙ, ә ниндәй аңға, ниндәй маҡсат-хыялдарға эйә булдығыҙ? Үҙегеҙҙең алдығыҙға ниндәй маҡсаттар ҡуйып йәшәйһегеҙ?**

**Фаягөл ШӘРӘФЕТДИНОВА:** Ауылда уҡығанда маҡсаттар ҙа бәләкәйерәк, тарыраҡ булған икән. Унда һәр кем йә уҡытыусы, йә табип булырға хыяллана, икенсе һөнәрҙәр барлығын уйлап та бирмәй. Ә бында килгәс, юғарыраҡ күтәрелергә, республика, ил кимәлендә кәрәкле шәхес булырға ынтыла башлайһың.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Минең төп хыялым - үҙ тыуған еремдә кәрәкле кеше булып, халҡым өсөн файҙалы эштәр башҡарыу. Шуға өлгәшермен тип уйлайым.

**Илназ МӘЖИТОВ:** Гимназия-интернат тәрбиәһе миңә лә, башҡа гимназистарға ла яңы юлдар, яңы маҡсаттар билдәләргә ярҙам итә. Кеше үҙгәрә, ул үҙгәргәс, уның ҡарашы ла, хыялдары ла үҙгәрә. Гимназияла тәртип көслө, һәр минутыбыҙ тәғәйен эшкә бүленгән, шуға ла ваҡыттың ҡәҙерен беләбеҙ. Һәм кем үҙ алдына асыҡ маҡсат ҡуйырға өйрәнә.

**✸ Шулай ҙа бөгөнгө көндә һеҙҙең иң төп маҡсатығыҙ - юғары уҡыу йортона уҡырға инеүҙер, шулай бит? Бының өсөн барығыҙ ҙа Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырырға тейешһегеҙ. БДИ уҡыусының белемен дөрөҫ баһалай аламы, һеҙ уның ниндәй ыңғай һәм кире яҡтары менән осраштығыҙ?**

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** БДИ - ул ҙур һынау. Әлбиттә, миҙалдың ике яғы булған кеүек, БДИ-ның да ыңғай һәм кире яҡтары бар. Әммә уҡыусы уға ныҡлы әҙерлек алып барһа, имтихандарҙың бындай төрөнөң бер ҡурҡынысы ла юҡ. Шулай ҙа ауыл мәктәптәре уҡыусылары өсөн уның ҡыйынлығы ла барҙыр.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө ҡала округы Советы Башҡортостан Республикаһы Президенты Мөрәжәғәтнамәһе буйынса йәмәғәтселек тыңлауҙары үткәрҙе. Унда ҡала округы Советы депутаттары, баш ҡала округы хакимиәте һәм район хакимиәттәре вәкилдәре, муниципаль предприятие һәм йәмәғәт ойошмалары етәкселәре ҡатнашты. Мөһим программа документы бындай форматта тәүге тапҡыр тикшерелә.

✓ Өфөлә "Башҡортостан " телерадиокомпанияһының "Тамыр" балалар студияһы ҡатнашлығында балалар йырҙарын башҡарыусыларҙың "Евровидение - 2009 " милли һайлап алыу конкурсының беренсе төбәк этабы булып үтте. Унда17 йәш йырсы ҡатнашты. Һөҙөмтәләр буйынса финалға биш бала сыҡты. Улар: Ағиҙел ҡалаһынан Розалина Байбулатова, Эльмира Шәрипова, Мәләүездән Лаура Иҙиәтуллина, Бөрөнән Эльза Исхаҡова, Өфөнән Ксения Куляшова. Оҙаҡламай уларҙың видеоматериалдары икенсе һайлап алыу турында ҡатнашыу өсөн Мәскәүгә ебәреләсәк. Икенсе этапты үткән ҡатнашыусылар милли һайлап алыу туры финалистары буласаҡ.

✓ 30 апрелдә Өфөлә Дуҫлыҡ монументы янында Өфө ҡала округы хакимиәте һәм "Вечерняя Уфа" гәзите призына XXVI еңел атлетика ярыммарафоны үтәсәк.

✓ Баш ҡаланың Октябрь районындағы хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау идаралығы хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлекте йомшартыу һәм граждандарҙың хеҙмәткә хоҡуғын тәьмин итеү маҡсатында хеҙмәт закондары мәсьәләләре буйынса консультация пункты ойошторҙо. Адресы: Өфө ҡалаһы, Рихард Зорге урамы, 33, 101-се кабинет. Телефон: 223-25-65.

✓ Теләге булғандар 21 апрелдән Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшыра ала. Мәғариф министрлығынан әйтеүҙәренсә, Өфөнән, Ҡариҙел һәм Дүртөйлө райондарынан 10 бала ошо турала үҙ теләген белдергән дә инде. Уларҙың бишәүһе - Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашырға китеүсе спортсылар, ҡалғандары һаулыҡ торошо буйынса БДИ-ны алдараҡ бирергә ҡарар иткән.

**Флорида МИҺРАНОВА:** Һуңғы тиҫтә йыл эсендә вузға уҡырға инеү бер проблемаға әйләнеп киткәйне, аҡса, танышлыҡ һинең аҙмышыңды хәл итә ине. Ә БДИ уҡыусыға үҙ көсө менән юғары уҡыу йортона инергә ҙур мөмкинлек бирә.

**Тәлғәт МАНАТОВ:** Минең уйымса, БДИ уҡыусыға күберәк мөмкинлектәр бирә. БДИ тапшырғандан һуң өйҙә генә ултырып, почта аша ғына вуздарға документтар ебәрергә була, йыбанма ғына. Ошо яғы бик оҡшай. Тик ауыл мәктәптәрендә физика, математика кеүек теүәл фәндәр уҡытыусылары етешмәй. Ҡала һәм ауыл уҡыусыларының белем кимәле тигеҙ түгел - бына шул яғы ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, әлбиттә.

**Илназ МӘЖИТОВ:** БДИ тураһындағы тәүге хәбәрҙе оҡшатмай ғына ҡабул иттем. Үҙем уға ныҡлы әҙерлек алып барғас, ҡарашым үҙгәрҙе һәм уның тик яҡшы яҡтарын ғына күрәм. Шулай ҙа БДИ-ны уңышлы тапшырыу өсөн иң мөһиме - базалы белем кәрәк.

**Фаягөл ШӘРӘФЕТДИНОВА:** Мин дә БДИ уҡырға инеү өсөн бик уңайлы, тип уйлайым. Яҡшылап әҙерләнһәң, бер ауырлығы ла юҡ. БДИ белемде баһалай ала, ләкин ул бер системаға һалынған имтихан төрө булараҡ, ниндәйҙер бер стандарт буйынса ғына баһалай. Мәҫәлән, элек 6-шар бит күләмле иншалар яҙған ваҡытта уҡыусының телмәрен ныҡыраҡ асыҡларға мөмкинселек булған, был яҡтан ҡарағанда, БДИ-ның кире яҡтары бар.

**Илназ МӘЖИТОВ:** Рус теленән БДИ-ның бер өлөшөндә - инша яҙғанда ниндәйҙер сиктәр бар, уларға һыйып булмай. Шуға ла сиктәрҙән сығып китмәҫ өсөн, тырышырға тура килә.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Шулай уҡ рус теленән бер вариантта рецензия яҙабыҙ. Тикшергән кеше критерийҙар буйынса баһа ҡуя, шуға күрә үҙеңдең фекерҙәреңде әллә ни әйтергә лә кәрәкмәй.

**Тәлғәт МАНАТОВ:** Инша яҙғанда теманы һәм проблемаһын белһәң, артығы кәрәкмәй, ҡалғаны автоматик рәүештә ниндәйҙер ҡалып буйынса яҙыла. Үҙеңдең фекереңде әйтеп булмай, шуныһы оҡшап етмәй.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Фекереңде яҙһаң да уның артыҡ кәрәге юҡ һәм тикшергәндә уға артыҡ иғтибар итмәйҙәр. Ә бит уҡыусының үҙ аллы фекерләй белеүе оло әһәмиәткә эйә.

**Фаягөл ШӘРӘФЕТДИНОВА:** Шуға ла бар иншалар ҙа бер төрлө - ҡалып буйынса килеп сыға, тип әйтергә лә була.

❃ **Һеҙҙең әлегә тормош тәжрибәгеҙ юҡ, башлыса белемде - китаптарҙан, мәғлүмәтте - матбуғат сараларынан алаһығыҙ, улар һеҙҙе тәрбиәләй. Һеҙҙең өсөн иң ҡиммәтле китап һәм матбуғат сараһы ниндәй?**

**Флорида МИҺРАНОВА:** Башҡорт һәм рус классиктары оҡшай. Рәми Ғарипов менән яратҡан шағирым. Һуңғы осорҙа уҡыған китаптарҙан Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" романы онотолмаҫлыҡ тәьҫир ҡалдырҙы.

**Тәлғәт МАНАТОВ:** Рухи аҙыҡ бирә алмаһа ла, бөгөнгө көндә интернет белем күп балалар өсөн мәғлүмәт сығанағы булып тора. Интернет үҙенең тиҙлеге менән алдыра.

**Флорида МИҺРАНОВА:** Филология йүнәлешле синыфта уҡығас, бар матбуғат баҫмаларын да күҙәтеп барырға тырышабыҙ. Ә интернат тормошо "Интернатым - пар ҡанатым" гәзитендә сағыла.

**Гүзәл ҒӘЛЛӘМОВА:** Шолоховтың әҫәрҙәре, бигерәк тә "Кеше яҙмышы" әҫәре оҡшай. Ғөмүмән, батырлыҡ, намыҫ бөгөнгө көндә лә кешене биҙәй торған иң төп сифаттар һәм ошондай сифатарға эйә геройҙар менән осрашырға яратам китаптар аша. Башҡорт әҙәбиәтендә яратҡан әҫәрҙәрем бигерәк күп, ҡайһынығындыр айырыуы ла ауыр.

**Фаягөл ШӘРӘФЕТДИНОВА:** Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһын ҡабат-ҡабат ҡайтып уҡыйым.

**Илназ МӘЖИТОВ:** Миңә Рәми Ғариповтың шиғырҙары оҡшай, уның ижады менән электән ҡыҙыҡһынам, әле лә ваҡыт булһа, уларҙы уҡыштырып алам. Уның шиғырҙарында йәшәүҙең матурлығын да, ҡара яҡтарын да күрергә була, уларҙа ниндәйҙер серле фәлсәфә бар - шул бигерәк тә ылыҡтыра мине. Үҙем дә шиғырҙар яҙам.

**Тәлғәт МАНАТОВ:** Һуңғы осорҙа үҙебеҙҙең тарихыбыҙға, динебеҙгә, йолаларыбыҙға иғтибар арта, төрлө шәхестәребеҙ тураһында мәғлүмәттәр күренә башланы, шундайҙарҙың береһе - Мөжәүир хәҙрәт тураһындағы китап бик оҡшаны. Гимназия күп гәзит-журналдар алдыра, уларҙың байһын да уҡып барырға тырышам.

Һуңғы осорҙа уйланып йөрөйөм дә, барыбер ҙә был донъяла күп нәмә үҙеңдән тора. Янырақ "Никогда не сдавайся" тигән фильм ҡарағайным, ныҡ ҡыйын саҡта ошо һүҙҙәрҙе иҫемә төшөрәм дә, тағы ла сәмләнеп, эшкә тотонам.

**Флорида МИҺРАНОВА:** Мода тигән нәмә күпмелер ваҡыттан һуң әйләнә лә кире ҡайта. Шуның һымаҡ, халҡыбыҙға элекке көслө рух та яңынан әйләнеп ҡайтһын ине, тип уйлайым. Иман көслө саҡта халҡыбыҙ теләһә ниндәй бәләләргә лә ҡаршы тора алған, ә бөгөнгө һынауҙар алдында баҙап ҡалыуыбыҙ ана шул иман юҡлыҡтан бит...

**Шулай итеп...**

**Тормоштоң ауырлығынан да, ҡаршылыҡ-кәртәләренән дә, БДИ-нан да ҡурҡмай "беренселәр", алдағы көнгә оло маҡсаттар ҡуйып йәшәй, үҙ халҡына хеҙмәт итергә хыяллана. Халҡыбыҙҙың һәләтле улдары һәм ҡыҙҙарының хыялдарына ҡанат ҡуйыусы, уларҙа рух тәрбиәләүсе 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алған уҡыусылар башҡаса булырға ла тейеш түгел, гел шулай беренсе булығыҙ, "беренселәр"!**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**



## ҺОРАУ - ЯУАП

# ЭШҠЫУАРЛЫҠҠА БУШЛАЙ ЯРҘАМ

**Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә ниәтләнәм, тик эште башлап ебәреү өсөн бер аҙ аҡса етмәй. Был йәһәттән дәүләт ярҙамына өмөт итә аламмы?**

Мәғлүм булыуынса, республикала бәләкәй һәм урта бизнесҡа ярҙам программаһы әҙерләнде. Дәүләт эшҡыуарҙарға 400 мең һумға тиклем бушлай ярҙам күрһәтә ала. Ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүселәрҙән документтар ҡабул итеү башланы ла инде. Дәүләттән бушлай ярҙам алырға теләүселәр тиҙ арала документтер туплап, БР Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү фондына (Өфө ҡалаһы, Гоголь урамы, 57) килтерә ала.

Субсидия дәүләт ярҙамына иҫәп тотҡан сумманың дүрттән бер өлөшө күләмендәге үҙ аҡсаһын бизнесына һалған, үҙ эшен яңы башлап ебәргән эшҡыуарҙарға бирелә. Йәғни дәүләттән 100 мең һум ярҙам һораған хәлдә эшҡыуар үҙ бизнесы өсөн 25 мең һум аҡсаһын тотонған булырға тейеш.

Эшләп йөрөүсе эшҡыуарҙарға банктан алған кредит буйынса проценттарҙы һәм страховка взностарын түләргә ярҙам күрһәтеләсәк.

Дәүләт ярҙамы алыу өсөн түбәндәге документтар талап ителә:

- эшмәкәрлек төрөн, хеҙмәткәрҙәр һанын, уртаса төшөм һәм активтар хаҡын күрһәтеп яҙылған ғариза;
- юридик берәмектәрҙең (йәки шәхси эшҡыуарҙарҙың) берҙәм дәүләт реестрынан күсермә (төп нөсхәһе йәки раҫланған копия);
- эшҡыуарҙың гражданлығын раҫлаған документ күсермәһе;
- бюджетҡа бурысығыҙ булмауын раҫлаусы документтар;
- баланстар күсермәһе, төшөм һәм сығымдар (зыян) хаҡында бынан алдағы йыл отчетының күсермәһе;
- теркәлгән документтар исемлеге;
- яңы эш башлаған эшҡыуарҙар өсөн бизнесҡа тотонолған 25 процент күләмендәге сумманы раҫлаусы документтар.

Ошо мәсьәлә буйынса һорауҙар булған хәлдә түбәндәге телефондарға шылтыратып, белешмә алырға мөмкин: (347) 251-67-52; 257-67-59, 251-67-36.

# ЕР УЧАСТКАНДА - ЯТҠЫЛЫҠ

**Милкемдә 40 гектар ер бар. Ер ҡаҙғанда эзбиз ятҡылығына тап булдым. Уны һатыу өсөн ҡаҙырға мөмкинме?**

- Үкенескә ҡаршы, хатығыҙҙа был ерҙең ниндәй төр категорияға ҡарауын күрһәтмәгәнһегеҙ, шуға күрә аныҡ ҡына яуап биреүе ҡыйын. Шулай ҙа законда әйтелеүенсә, әгәр ер мөнәсәбәттәре ергә хоҡуҡ нормалары менән көйләнмәгән булһа, ул башҡа тармаҡ хоҡуҡтары ярҙамында яйға һалына. Һеҙҙең осраҡта "Ер аҫты ятҡылыҡтары тураһында" закон ҡулланылыуы ихтимал. Унда билдәләнеүенсә, милексәләр һәм ер участкаларын арендалаусылар ошо ер сиктәрендә һәм үҙ ҡарамаҡтары буйынса

- дәүләт балансында иҫәпләнмәгән һәм киң таралыу тапҡан файҙалы ҡаҙылмаларҙы шартлатыу эштәре ҡулланмайынса ҡаҙып сығарыу;
- 5 метр тәрәнлеккә тиклем үҙенә кәрәкле ер аҫты ҡоролмалары төҙөү;
- РФ башҡарма власть органдары билдәләгән тәртиптә үҙәкләштерелгән һыу тәьминәте сығанағы булмаған тәүге һыу ҡатламына тиклем көнкүреш ҡоҙоғо ҡаҙыу һәм скважина үткәреү мөмкинлегенә эйә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

# Ҡара контингент шарлауыҡтары



Төньяҡ Америка, Австралия сүлдәрен һәм боҙло Антарктиданы иҫәпләмәгәндә, бөтөнләй тиерлек йылғалары, тимәк, шарлауыҡтары ла булмаған район һанала.

Бөйөк Нилдың үрендә бер нисә шарлауыҡ табырға була. Уларҙың береһе - Тис-Аббай, Эфиопиялағы Зәңгәр Нилдә урынлашҡан. Ул ҙурлығы буйынса Виктория, Каландула һәм Кала һунынан Африкала дүртенсе шарлауыҡ. Һыуҙың ҡолау бейеклеге 50 метр, киңлеге 300 метр, тышҡы күренеше менән ул Ниагараны хәтерләтә.

Икенсеһе, Кабарега Угандела Виктория-Нил йылғаһында урынлашҡан. Ул, Игуасу кеүек үк, донъяның бер мөғжизәһе һанала. Нилдең һыуы киңлеге 5-6 метр булған йырыҡтан 120 метр тәрәнлектәге упҡынға ағып төшә. Шарлауыҡ өҫтөндә гел йәйғор балҡый, ә шарлап аҡҡан һыу ҡояш нурында мең төҫкә инеп балҡый.

Заир йылғаһында ла шарлауыҡтар осратырға була. Был йылғаны ғәҙәттә Конго тип йөрөтәләр. Уларҙың киң билдәләләре - Киншаса ҡалаһынан йыраҡ түгел урынлашҡан Ливингстон һәм Вание-Лукула ауылы эргәһендәге Стенли шарлауығы. Заирҙың Луалаба ҡушылдығында Миоба шарлауығы бар. ул көнсығыш пагодаларына (Будда динен тотоусыларҙың ғибәҙәт йорто) оҡшаған, уның һыу ағымы бына шулай ҡыҙыҡ урынлашҡан.

Африкала бейеклеге буйынса Тугела шарлауығынан һуң икенсе урында Зимбабвалағы Матарази-Фолс (бейеклеге 610 метр) шарлауығы. Ул донъяла был күрһәткес буйынса дүртенсе (Көньяҡ Америкалағы Кукекан шарлауығы менән бергә) урында.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

# ШАЙТАНДАН ҺАҠЛАН,

## ул эргәңдә генә…

**Уяу булырға ҡушылһа ла кеше күп осраҡта үҙенең мөлкәте, балалары, хатта йөрәге, тәне һәм йәне менән кемдер идара итеүенә күҙ йомоп ҡарай. Ул ҡайны ваҡытта быны һиҙмәй ҙә һәм бөтә был мәкерле тоҙаҡтар шайтандан икәнен уйлап та бирмәй. Үҙен һәм ғаиләһен вәсвәсәнән һаҡламайынса, уның эҙенән атлап, үҙен хәүеф аҫтына ҡуя.**

Ҡөрьән инанғандарҙы Иблистең яуыз уйҙарынан һаҡланырға саҡыра. Аллаһы Тәғәлә уны кешеләрҙең юлына сығыусы һәм уларҙы ғибәҙәттән айырыусы "дошман" тип атай. Аллаһ янында Шайтандың үҙен тейешһеҙ тотоуы юҡҡа ғына түгелдер. Йәннәт баҡсаһынан ҡыуылғандан һуң ул Аллаһы Тәғәләнән кешеләрҙе һынарға рөхсәт ала, "Иблис: "Һин мине аҙғынлыҡҡа дусар иттең, шуға күрә мин дә уларҙы аҙҙырыр өсөн һинең тура юлың өҫтөндә ултырасаҡмын", - тип әйтте (Әғрәф сүрәһе, 7/17). "Һин уларҙың күбеһе шөкөрһөҙ икәнен күрерһең", тип әйтеп, иманлыларға тәьҫир итеү көсө буйынса Аллаһ менән ярыша башланы".

Шулай итеп, Аллаһы Тәғәлә Шайтанды барлыҡҡа килтергәндән алып, ул кешеләр менән дошманлашырға тырыша. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәләгә табынып, уның лайыҡлы ҡоло булырға теләүсегә Иблистең ҡотортоуҙарына иғтибарлы булырға кәрәк. Ул кешенең рухи үсешенә ҡамасаулай, иманлыларҙың Аллаһы Тәғәләгә тоғролоғон ауырлаштыра.

Ҡөрьәндә Шайтан кешеләргә яуызлыҡ эшләүсе асыҡтан-асыҡ дошман тип әйтелә. Ул аллйот түгел. Ул кешене юлдан тайпылдырыр өсөн төрлө тоҙаҡтар ҡора. Өҫтәүенә, уның ҡолдары - башҡа шайтандар ҙа кешеләргә дөрөҫ йәшәргә ҡамасаулай. Бөтә был шайтандар кеше менән бергә йәшәй, кеше кеүек тә, ен кеүек тә күренергә мөмкин, әммә улар үҙҙәренең ғәмәлдәре өсөн кеше кеүек үк Ҡиәмәт көнөндә яуап бирәсәк. Шайтандың эшләргә икәнен уның этәргән ҡылыҡтарынан белергә мөмкин. Был турала Ҡөрьәндә күп аяттарында әйтеп үтелә. "Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын", ти шайтан һәм кешене бөтә нәмә лә хәләл тип ышандыра. Ул кәрәкмәгән нәмәне кешенең теләктәренә яуап бирерлек итеп күрһәтә белә. Мәҫәлән, ярлылыҡ тураһында уй индереп, ҡатындарҙы яралғы сағында уҡ балаһынан ҡотолорға ҡоторта. Шайтан кешеләрҙең күңелен аңдып ҡына тора һәм һәр кешегә юл таба белә.

Шулай уҡ Аллаһы Тәғәлә беҙгә Иблистең кешене тура юлдан яҙҙырыуы өсөн бөтә тырышыуҙары уңышлы бөтмәүе тураһында ла хәбәр итә. Шайтандың һүҙҙәренә ҡаршы Ул:"Шуныһы хаҡтыр, минең ихлас кешеләремә һин баш була алмаҫһың. Уларҙы һаҡлап ҡалыр өсөн бер Аллаһ етер", - тип яуап бирә ("Әл-Исра", 17/65).

Дошманға бирешмәҫ өсөн иманлыларға нимә эшләргә кәрәк һуң? Шайтандың кешене күралмағанын төшөнөргә һәм уның тәҡдимдәрен кире ҡаға белергә кәрәк. Шулай итеп, беҙ шайтанға үҙебеҙ менән дә, балаларыбыҙ менән дә, малыбыҙ менән дә контроль итергә юл ҡуймай, тиҙерәк Аллаһы Тәғәләгә алып барған юлға баҫайыҡ, сөнки Иблистең ҡотортоуҙарына иң яҡшы ҡорал - Аллаһы Тәғәләгә ихлас ғибәҙәт ҡылыуҙыр.

"Шайтан һине ҡоторта башлаһа, Аллаһҡа һыйын. Ул ишетеп-күреп тора. Тәҡүәлеккә ирешкәндәргә Шайтан ҡотортоуы ҡағыла башлаһа, Аллаһты иҫкә төшөрөп зикр ит һәм тура юлды бик тиҙ табырһың. Шайтандар иһә дуҫтарын (наҙандарҙы, боҙоҡлоҡҡа тартылғандарҙы) аҙғынлыҡҡа һөйрәй, унан һуң инде улар "тоҙаҡҡа эләккәндәрҙе тиҙ генә" ысҡындырмай" ("Әғрәф", 7/200-202).

Һәр ваҡыт "Әғүҙу билләһи минәшшайтанир-ражим" (Таштар атып ҡыуылған шайтан вәсвәсәһенән, уның мәкерле ҡотҡоһонан Аллаһы Тәғәлә ярҙамына, уның яҡлауына һыйынам) тип әйтеп йөрөгөҙ - һәм Аллаһ һеҙгә ярҙам итер!

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ

## донъя модель



(Башы 1-се биттә).

● **"Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул" тиҙәр. Һин сит ерҙәрҙә үҙеңде нисек тойҙоң, сит мөхиткә өйрәнеп китеүе ауыр булманымы?**

- Мин сит ил климатына ла, кешеләренә лә тиҙ үк өйрәндем. Әсәйем минә бәләкәйҙән бөтә ерҙә лә бер үк кешеләр йәшәй, уларҙан ҡурҡырға ярамай, тип өйрәтте. Шуға ла ниндәй генә осраҡта ла кешеләр ярҙамына өмөт итергә мөмкин. Иң мөһиме, кешегә яҡшы, ихлас мөнәсәбәттә булырға кәрәк, был һәр ваҡыт уртаҡ тел табырға ярҙам итә.

● **Сит ил халҡына үҙеңде башҡорт ҡыҙы булараҡ таныталһыңмы? Улар беҙҙең ҡыҙҙарҙы нисек баһалай?**

- Ғөмүмән алғанда, Рәсәй моделдәренең тырышлығы һәр ваҡыт юғары баһалана. Эшкә һәләтле, ныҡышмал, яуаплы булғандары өсөн уларҙы модель бизнесында ихтирам итәләр.

Ә башҡорт ҡыҙҙарына килгәндә, улар донъя мода даирәләрендә үҙ урынын яулай алыр ине, тип уйлайым, сөнки беҙҙең ҡыҙҙәребеҙҙе, йөҙ һыҙаттарыбыҙ уникаль тип баһалайҙар. Ҡыҙҙарыбыҙға булмышына тоғро ҡалып, үҙ-үҙенә ышанырға һәм бер аҙ ҡыйыюраҡ булырға кәрәк. Сит ил халҡы Рәсәй ҡыҙынҙағы аңлайышһыҙ азиат һыҙаттарын күреп, аптырауға ҡала һәм "Ҡайҙан һуң һин шундай?" тип һорау яуҙырырға тотона. "Мин Рәсәйҙән, Башҡортостандан!" тиғән яуабым да уларға бер ни аңлатмай. Башҡортостандың ҡайҙалығын, ни өсөн унда азиат йөҙлө халыҡ йәшәүен оҙаҡ ҡына аңлатып торорға тура килә. Әйткәндәй, сит ил халҡы географияны бик насар белә. Рәсәйҙә мосолмандар барлығын да һөйләп үтәм, юғиһә, улар беҙҙә тик христиандар ғына йәшәй, тип иҫәпләй. Ә йөҙ үҙенсәлегебеҙҙе Азия менән Европаның ҡап уртаһында ятҡан Уралда йәшәүебеҙ менән аңлатам. Өфөбеҙ хаҡында фотоһүрәттәр күрһәтәм, уның саф һауала йәшеллек ҡалаһы булыуын һөйләп бирәм. Даны бөтә донъяға таралған башҡорт балын да телгә алырға онотмайым. Ысынлап та, беҙҙең балды тәмләп ҡарау менән: "Быны, исмаһам, ысын бал, бындай балды беҙ бер ҡасан да ауыҙ иткәнебеҙ юҡ ине әле. Беҙ Башҡортостан тураһында өйрәнәсәкбеҙ", - тип һоҡланыуҙарын йәшермәйҙәр. Уларҙың беҙҙең балды иҫтәре китеп маҡтауҙарынан күңелгә шул тиклем рәхәт булып китә, халҡым өсөн ғорурлыҡ тойғоһо арта. Сит илдәрҙә йөрөгәнемдә бергә эшләгән хеҙмәттәштәремдә башҡорт ашһыуы менән һыйлайым. Әсәйемдән өйрәнгән сәксәк, ваҡ бәлештәр бешерәм.

Әйткәндәй, үҙенсәлекле йөҙ һыҙаттарым һәм сит телде тиҙ үк өйрәнеүемә ҡарап, мине "сит планета ҡыҙы", тип йөрөтәләр. Ысынлап та, бығаса инглиз телен белмәһәм дә, кешеләр менән аралаша торғас, өйрәндем дә киттем, хәҙер был телдә иркен һөйләшәм.

● **Бында ла һиңә тырышлығың ярҙам иткәндер?**

- Әлбиттә. Тырышлыҡ ул һәр өлкәлә, һәр һөнәрҙә лә кәрәкле сифат һәм шуның аша ғына уңышҡа өлгәшеп булалыр.

● **Сит илдә бармы ул башҡорт донъяһы, милләттәштәрҙе осратҡаның булманымы?**

- Бер нисә тапҡыр осраттым. Францияла бер ҡыҙ менән танышҡайным, ул минең әсәйем менән бер ауылдан булып сыҡты. Беҙ уның менән аралашып торабыҙ, күпселек тыуған яғыбыҙ хаҡында һөйләшәбеҙ. Ул француз мәктәбендә инглиз теленән уҡытыусы булып эшләй.

● **Тыуған яҡтар һағындыралыр, Өфөгә йыш ҡайтаһыңмы?**

- Йылына ике-өс тапҡыр ҡайтып әйләнергә тырышам. Әсәйем менән көн һайын телефон аша һөйләшәбеҙ. Мин уға хәлдәремде түкмәй-сәсмәй һөйләп торам, ул минең көндәлек эшемде, тырышлыҡтарымды, ҡаҙаныштарымды баһалай, аҡыллы кәңәштәре менән ярҙам итә, шатлығымды уртаҡлаша, кәйефемде күтәрә, ҡайһы саҡта шелтәләп тә ала. Ул минең өсөн донъялағы иң изге кеше.

● **Эйе, әсәйҙәр беҙҙең өсөн идеал булып тора. Һин үҙең унан ниндәй холоҡ сифаттарын үҙләштерҙең?**

- Унан миңә кешеләрҙе ғәфү итә белеү кеүек матур сифат күскән. Ул кешеләрҙең йөҙөндә бәхетле йылмайыу күрергә ярата. Мин дә кешеләргә бүләк эшләүҙән, уларҙы ҡыуандырыуҙан сикһеҙ кинәнес табам. Уның кешеләр менән еңел аралаша белеүе лә, артислыҡ сифаттары ла модель булараҡ төрлө-төрлө образдар тыуҙырғанда миңә бик ныҡ ярҙам итә. Әсәйем үҙ балаһы өсөн йәнен бирергә әҙер кеше. Ул миңә ныҡ ышана, минең ҡыҙыҡһыныуҙарымды ихтирам итә. Мин дә тап уның кеүек әсәй булырмын, тим.

● **Модель өлкәһендә таҡы ла күпме эшләргә уйың бар?**

- Быны алдан әйтеп булмай, әммә 20 йәштән һуң кейәүгә сығыу, ғаилә ҡороу тураһында уйлана башларымын, тим, ул саҡта модель бизнесы икенсе планға күсәсәк инде. Әле был өлкәлә эшләүемә өс йыл була, топ-модель өсөн был ҙур срок.

● **Топ-моделдең ғәҙәти көнө нисек үтә?**

- Һәр моделдең ҡулына кистән йәки иртәнсәк көн тәртибе тапшырыла. Уны шәхси агент төҙөй. Унда кастингтар, фотосессиялар, әгәр инде мода күрһәтеү булһа, кейем кейеп ҡарау ваҡыты яҙыла. Артабан билдәле фотографтар, стилистар менән метинг-осрашыуҙар үтә. Ғәҙәттә, сәғәт етелә эш көнө тамамлана. Әммә көн тәртибе гел ошолай ғына тип әйтеп булмай, ул һәр илдә төрлөсә. Мәҫәлән, Нью-Йоркта мин тренажер залына йөрөнөм. Унда шөғөлләнеү, кәүҙәмде формала тотоу бик оҡшай. Дуҫтарым күп, улар менән күберәк кис көнө осрашам, сөнки көндөҙ ваҡыт булмай. Ғөмүмән, буш ваҡыттар бик һирәк була. Һуңғы ике-өс айҙа ҡасан буш көнөм булғанын хәтерләмәйем дә. Ҡайны саҡта иртәгә ял итергә була, тип әйтһәләр ҙә, иртән саҡыртып алыуҙары ихтимал. Шундай осраҡтар ҙа була: бөгөн бындаһың, иртәгәһенә икенсе илгә осорға тура килә. Мода аҙналыҡтарында тап шулай килеп сыға ла инде. Дүрт мода аҙналығы бар: ул Нью-Йоркта башлана һәм Лондон, Миланда дауам итеп, Парижда тамамлана. Ул йылына ике тапҡыр сентябрь-октябрь һәм февраль-март айҙарында уҙа. Бер ҡалалан ял да итмәйенсә икенсеһенә осоу, төрлө климат шарттарына яраҡлашыу, әлбиттә, ауыр, әммә беҙ, моделдәр, барыһына ла күнегергә, сыҙам булырға тейешбеҙ.

Модель бизнесы алдан әйтеп булмай торған билдәһеҙ өлкә ул. Минең агентым әйтмешләй, модель булыу шахтер эшенән дә ҡатмарлыраҡ һөнәр. Уның өсөн ял көндәре юҡ һәм ул тәүлегенә 24 сәғәт һәм аҙнаһына ете көн буйы эшкә әҙер булырға тейеш.

● **Модель кешегә йөҙ ҡиәфәте мөһим. Арығанлыҡ йөҙҙә сағылмаймы һуң?**

- Ә быныһын инде һин күрһәтмәҫкә тейешһең. Әсәйем әйтмешләй, ялға ваҡыт таба белергә, үҙеңде тынысландырырға өйрәнергә кәрәк. Мин иртәнсәктән юғары кәйеф менән торорға һәм көнө буйы шуны һаҡларға тырышам. Кастингтарға бо-

# ҠЫҘҘАР...

## бизнесын яулай

лоҡһоу йөҙ, төшөнкө кәйеф менән килһәң, әлбиттә, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ, эшең дә алға бармай. Шуға ла йылмайып-балҡып йөрөргә, кешеләргә нур өләшеп йөрөргә кәрәк. Бөтә нәмәлә лә ыңғай һәм кире яҡтар була, ә һин ана шул яҡшыһын ғына күрә белергә тейешһең. Насар кәйеф бер кемгә лә файҙа килтермәй. Кире энергияны мин күнекмә залдарына йөрөп сығарам. Ҡайһы саҡта фотосессияларҙа шул тиклем төрлө эмоциялар сығарырға тура килә, хатта аҙаҡ бер ниндәй ҙә хистойғо ҡалмай. Бындай мәлдәрҙән мине тыуған яҡтарым ҡотҡара. Беҙҙең тәбиғәт шул тиклем матур, һауабыҙ саф. Күпме генә илдәрҙә йөрөһәм дә, бары тик Өфөлә генә онотолоп, күңелем менән рәхәтләнеп ял итәм, көс-дәрт туплайым. Үҙем нык әүҙем кеше булғас, Өфөгә сессияға ҡайтҡан арала туғандарымды күреп ҡалырға, дуҫтарым менән осрашырға тырышам. Әсәйем менән туйғансы ултырып һөйләшәбеҙ. Был тәьсораттар, хис-тойғолар төп эшемдә образдар тыуҙырғанда нык ярҙам итә. Тормошомдоң төрләнөүгә лә минең булмышымды һәр яҡлап байыта ғына: бер көн мин жюри ағзаһы, иртәгәһенә мин өйҙә әсәйемә ярҙам итәм, өсөнсө көн мин ябай студент, башҡа ваҡытта мин эшлекле контрактҡа ҡул ҡуйыусы топ-модель.

Әле уҡып йөрөүемә ҡыуанып бөтә алмайым, был минә студент тормошона сумып, башымды эшләтеп алырға, хәтеремде яҡшыртырға, ғилемемде арттырырға ярҙам итә. Артабан уҡыуымды Мәскәүҙәге берәй юғары уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә дауам итергә уйлайым. Минә ҡалһа, бөгөн мәғлүмәтле, белемле, уҡымышлы кеше булып йәшәү кәрәк кенә түгел, күңелле лә. Шуға ла мин Интернетҡа инеп, яңылыҡтар менән танышып сығам, сәфәргә сыҡҡанда үҙем менән китап уҡырға алам.

**● Европа стандартына тап килгән модель ниндәй ул?**

- Донъя модель бизнесында эшләүсе моделдең буй үлсәмдәре 172-174 сантиметрҙан алып 180 сантиметрға тиклем булырға тейеш. Унан да оҙонораҡ буйлы ҡыҙҙар йәмһеҙ күренәсәк. Моделдәрҙең төрлө параметрҙары була. Бил һәм янбаш үлсәмдәре шулай уҡ 60 һәм 90 сантиметр ҡалһа, түш үлсәмдәре хәҙер бер аҙ кәмене: 86-87 сантиметр. Нью-Йорк мода аҙналығы өсөн параметрҙар кәмегәндән-кәмей бара. Унда ҡатнашыусы моделдәрҙең янбаш үлсәмдәре хәҙер 86-87 сантиметрға тиклем булырға тейеш. Бөтә топ-моделдәр ҙә ошо параметрҙарға яраҡлашырға тырыша, ә был еңел түгел. Бының өсөн ҡыҙҙар нык ябығырға тейеш. Тап шуға ла Нью-Йорк, Париж модаһына бөтә яҡтан тап килгән иң яҡшы моделдәр генә үтеп китә ала. Бөгөнгө иҡтисади көрсөк кисереү сәбәпле, күп ҡыҙҙар Азияла эшләргә тырыша. Унда талаптар ҙа улай уҡ юғары түгел, аҡса эшләүе лә еңелерәк. Тик кеше күп булғас, унда ла һайлау аша үтергә тура килә.

Модель өсөн сәстәрҙең оҙон булыуы һәйбәт, сөнки мода күрһәткән ваҡытта төрлө прическалар эшләргә тура килә. Мин сәстәремде ҡыҫҡа итеп ҡырҡтырғаным да, бер ваҡытта ла буяғаным да булманы, тәбиғи төҫөндә йөрөтәм.

**● Ниндәй агентлыҡтар менән хеҙмәттәшлек итәһең?**

- Мин бик күп дизайнерҙар менән эшләнем. Әлеге көндә билдәле "Max-Mara" Италия фирмаһы сығарған спорт кейемдәренең рәсми йөҙө булып торам. Улар менән контракт төҙөгәнмен, хәҙер улар минең йөҙөмдө үҙҙәренең кейемдәрендә ҡуллана.

Тағы ла шул: мин үҙемдең башҡорт һәм мосолман ҡыҙы булыуымды бер ваҡытта ла онотмайым һәм был хаҡта башҡаларҙы ла иҫкәртеп ҡуйғанмын: минең әхлағыма тап килмәгән, мәсәлән, асыҡ һәм үтә күренмәле кейемдәрҙә кейеүҙән баш тартам. Әсәйем дә мине бала саҡтан әҙәпкә өйрәтте.

**● "Һылыуҡай" студияһы һәм "Һылыуҡай" конкурсы хаҡында ниндәй фекерҙәһең, уларҙың эшмәкәрлеген нисек баһалайһың?**

- Ҡасандыр мин үҙем дә был студияға өс ай тирәһе йөрөп алғайным. Әсәйем мине унда матур итеп атларға, үҙемде ҡарарға, биҙәнеү серҙәренә төшөнөргә өйрәнер өсөн биргәйне. "Һылыуҡай" студияһы ҡыҙҙарҙы матурлыҡ донъяһына алып инеүсе республикабыҙҙағы тәүге студия һәм ул, ысынлап та, ҡыҙҙарға ниндәйҙер башланғыс бирә. Унда кеше алдында үҙеңде тота белергә, актер оҫталығына, башҡорт бейеүҙәренә, хореографияға өйрәтәләр, шейпинг менән шөғөлләнергә мөмкин. Шуға ла был студияға йөрөү бер ҡыҙға ла ҡамасаламаҫ ине. Ә инде "Һылыуҡай" гүзәллек бәйгеһендә күпселек ошо студияла шөғөлләнгән ҡыҙҙар ҡатнашыуы ла аңлашыла: улар матурлыҡ, мода һәм башҡорт стиле тураһындағы ҡағиҙәләрҙе башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ үҙләштерә. Был конкурсҡа ҡатнашырға хыялланған ҡыҙҙар өсөн универсаль әҙерлек алып барған студия ул. Мин конкурсты жюри ағзаһы түгел, ә тамашасы булараҡ та ҡараным һәм ул минә бик оҡшаны. Ул матур итеп ҡуйылғайны, режиссура яғынан да оҫталыҡ күренеп тора. Ҡыҙҙар үҙҙәрен лайыҡлы итеп күрһәтә алды, һәр береһе үҙенсәлекле матурлыҡ һыҙаттары менән айырылып торҙо. Был конкурстың уҙғарылыу маҡсаты ла халыҡҡа башҡорт ҡыҙҙарының гүзәллеген, һылыулығын күрһәтеүгә ҡайтып ҡалалыр. Башта әйтеп үткәнемсә, башҡорт һылыуҡайҙарының бүтән милләттәкенә оҡшамаған йөҙ уникаллеге бар, уларҙың шул тиклем күҙҙәре матур, унда мосолман ҡыҙҙарына хас ниндәйҙер серлелек ята.

**● Гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрең бар?**

- Теләгем шундай: минең туралағы был материалды уҡығандан һуң, үҙ көстәренә ышанып, хыялдарына табан ҡыйыу аҙымдар менән донъя модель бизнесына килеп ингән башҡорт ҡыҙҙарын Европа подиумында осратырға насип булһын. Был минең өсөн ҙур шатлыҡ булыр ине.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА әңгәмәләште.**



УӘТ, ШУЛАЙ!

# БӘХЕТЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?

## Бул әйҙә! Бәхет үҙ ҡулыңда

**Яңыраҡ бер танышым үҙенең был донъяла шул тиклем бәхетһеҙ йән булыуына зарланды. Һуңғы осорҙа ниңәлер осрашҡан-һөйләшкән һайын шул һүҙҙәрҙе ҡабатларға, аҙмышына үпкәләргә ғәҙәтләнгәйне. Ике улын уҡытып, ныҡлы аяҡҡа баҫтырған, тормош иптәшенең, туғандарының, хеҙмәттәштәренең хөрмәтендә йәшәгән был ханымды быға тиклем һүҙһеҙ генә тыңлай инем. Был юлы түҙмәнем, туранан-тура:**

- Бәхетле булырға нимә ҡамасаулай һуң һиңә? Бәхетле булыу өсөн нимә кәрәк? - тип һорарға мәжбүр булдым. Күҙендә элекке шаян осҡондарҙы, иренендә йылмайыу күрмәгәс, уны, ысынлап та, нимәләр борсой кеүек күренде.

Һорауу уны баҙатты, ҡапыл ғына яуап бирә алмай торҙо. Бер аҙҙан: "Бәхетле булыу өсөн бына һинең кеүек булырға кәрәк!" - тине. Яуап мине ҡаушатты. Рәхмәт белдерҙем дә: "Шулай ҙа мин ниндәй һуң?" - тинем. Һорау яуапһыҙ ҡалды.

Яңы йыл алдынан парикмахерскийға күрҙем мин уны. Теге һөйләшеүҙән һуң унайһыҙландымы, нисектер, һүҙ берекмәйерәк тора ине, әмәлгә ҡалғандай, сиратта ултырған ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе бәхет тураһында һүҙ башланы. Бер аҙҙан оҫталар һәм клиенттар араһында ҡатын-ҡыҙ бәхете тураһында ҡыҙыу дискуссия башланды. Кемдәр иренең сүп һауытын түкмәүен, икенсеһе ейәнсәрҙәренең ойоҡтарын төрлө урынға ырғытыуын, өсөнсөһө йоҡлағанда хырылдауын, тағы кемелер хәләленең саманан тыш күп ашауын, бишенсеһе, киреһенсә, аҙ ашауын, һайланыуын, йәнә балаһын тәрбиәләшмәүен бәхетле булырға ҡамасаулаусы сәбәптәр исемлегенә индерҙе. Кемдәр шаяртыу ҡатыш, кемдәр ысынлап әйтте үҙ дәғүәләрен. Әүҙем позицияһы, ваҡиғалар уртаһында булырға яратҡан танышым да бәхәскә ихлас ҡушылды.

Тәбиғәтем-холҡом буйынса күҙәтеүсән, һығымта яһаусан мин. Фекер алышыуҙы ҡыҙыҡһынып тыңланым. Һыу буйы сират та бүтән ваҡыттағы һымаҡ әллә ни көйөндөрмәне. Минең янда ултырған ҡатын да башҡаларҙы өндәшмәй генә диҡҡәт менән тынлай. Бер аҙҙан тыйнаҡ ҡына көлөп өбөрҙе: "Абау, мин был ҡатындар араһында иң бәхетһеҙе икән дә! Алты йылға яҡын йәшәйбеҙ. Бер тапҡыр ҙа сүп һауытын түккәне юҡ. Иртә һайын ойоғон мин эҙләп бирәм. Төнө буйы хырылдай, бала йоҡлағанда эшкә китә, йоҡлағанда ҡайта", - тине ул. Ә үҙенең күҙенән бәхетле осҡон һибелә, йылылыҡ, наҙ бөркөлә. Янында ултырыусы рәхәт хатта...

Эйе, ҡатын-ҡыҙ бәхете ирҙән шул. Бының менән бөтә гүзәл зат та килешә, әммә ирендең сүп түкмәүен, ойоғон йыумауын, көн дә иркә һүҙ, комплимент әйтмәүен, ҡиммәтле тун алып бирмәүен генә бәхетһеҙлек тип уйлаһаҡ, шуға ышанһаҡ...

Уйҙарыбыҙҙың, фекерҙәребеҙҙең ниндәй әһәмиәткә эйә икәнлеген аңлап бөтөрмәйбеҙ йыш ҡына. Уй бит ул ҙур көскә эйә. Әлбиттә, уны үҙгәртеү еңел түгел. Һының өсөн, иң беренсе, ваҡиғаға, хәл-торошҡа ҡарашты үҙгәртеү мөһим. "Бәхетле булғың килһә, тәү сиратта, һине уңышһыҙ, бәхетһеҙ итә, тип һанаған ситуацияға ҡарашыңды үҙгәрт. Шул мәлдә проблемаңдың үҙенән-үҙе хәл ителеүенә шаһит булырһың", - ти психологтар ҙа.

**Шулай итеп...**

**Күптән түгел "Киске Өфө" гәзите битәрендә бәхетле булыу серҙәрен өйрәткән бик матур һүҙҙәргә юлыҡтым. Бына нимә тиелгәйне унда: "Бәхетле булыу - ул ҡаршылыҡтарһыҙ, борсолоуҙарһыҙ йәшәү генә түгел әле. Илау ҙа бәхетһеҙлекте аңлатмай. Хатта түшәктә ятырға дусар ителһән дә әүҙем тормош менән йәшәй алаһың, сөнки һин хыялланыуҙан туктамайһың. Яңғыҙ булғанда ла үҙ-үҙең менән аралашып бәхетле була алаһың.**

**Бәхетле булыу - ул сал сәстәргә ҡарамай, йәш була бел... Бәхетле булыу - ул ваҡытың булмаһа ла балаларға әкиәт һөйләй алыу... Улар һине аңламаһа ла, ата-әсәне яратыу... Бөтә эшең тигеҙ генә бармаһа ла изгелекле булып ҡалыу... Хаталарыңдан тормош һабаҡтарын табыу... Былар бөтәһе лә бәхет!" Шулай икән шул.**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

***✓ Балаға тәрбиәне "Һин шулай ит, һин былай ит!" тип кенә биреп булмай. Тәрбиәсенең үҙе өлгө булыуы мотлаҡ, бигерәк тә атай кеше үҙ малайҙарына күркәм өлгө бирергә тейешле.***

# ТӘРТИПКӘ нәҫелебеҙҙән

**Ғафури районының Сәйетбаба ауылында йәшәгән Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы һәм Ғиндулла Ширияздан улы Шәйәхмәтовтар ғүмерҙәрен халыҡ мәғарифына арнаған, был өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшкән, күптән инде хаҡлы ялда булһалар ҙа, халыҡ араһында иман таратыуҙа оло әүҙемлек күрһәтеүсе ветерандар. Улар яҡташтары алдында оло ихтирам һәм ышаныс яулаған. Ғиндулла Шәйәхмәтовты оҙайлы йылдар йәмәғәтселек эштәре алып барыусы тынғыһыҙ эҙәрмән, "Почет билдәһе" орденына, "РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән исемгә лайыҡ алдынғы ҡарашлы педагог итеп беләбеҙ. Ғөмүмән, ошондай ихтирам һәм ышаныс нисек яулана? Улар үҙ-ара мөнәсәбәтендә алтын урталыҡты нисек тапҡан? Ғаилә татыулығының, матур йәшәүҙең серҙәре нимәлә? ШӘЙӘХМӘТОВТАР менән әңгәмә барышында ошо һорауҙарға яуап табырға тырыштыҡ.**

**▶ Икегеҙҙең дә тыныс холҡоғоҙға, ғүмер буйына бер-берегеҙгә ҡарата күркәм мөнәсәбәттә, иғтибарлы, ихтирамлы булыуығыҙға һоҡланмаған кеше юҡ. Һеҙ ауылыбыҙ халҡына тырышлыҡ, бөхтәлек өлгөһө күрһәтәһегеҙ, бигерәк тә динебеҙҙе аяҡҡа баҫтырыуҙа әүҙем эшләйһегеҙ. Бындай егәрлектең, тырыш хеҙмәттең ниндәйҙер сығанағы барҙыр инде?**

**Ғиндулла Ширияздан улы:** Тәртипкә буйһоноу икебеҙҙең дә нәҫелебеҙҙән, борондан киләләр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, минең әсәйем Зәйнәп 41 йәшендә генә, алты балаһын етем ҡалдырып, үлеп китте. Ул вафат булғанда иң өлкәнебеҙ Хөснуллаға - 16, Нәсихаға - 13, Сәлихаға - 9, миңә - 7, Фәрихаға - 5, иң бәләкәйебеҙ Хәтмуллаға ни бары ике йәш ярым ғына ине. Беҙгә үгәй инәй ҡулында тәрбиәләнергә насип булды. Атайыбыҙ ҡаты холоҡло булмаһа ла, ғәҙел һәм талапсан кеше ине, ул үгәй инәйбеҙҙән ғәҙеллек талап итте. Тик ул эш кешеһе, һәр саҡ беҙҙең менән була алманы, шуға күрә беҙ үгәй инәй ғазабын нык татып үҫтек, ләкин атайға ошаҡ йөрөтмәнек. Әммә үгәй инәйебеҙ Заһиҙәгә, урыны йәннәттә булһын, барыбер рәхмәтлебеҙ, ул беҙҙе эшкә өйрәтте.

Атайыбыҙ эшкә бик егәрле кеше ине. Ул балта оҫтаһы, колхозда эшенән тыш, арбасана, ҡамыт-дуға яһаны, ауылдаштарына өй бурарға, тәҙрә-ишектәр яһарға ярҙамлашты. Ул колхоз тормошоноң уртаһында ҡайнауына ҡарамаҫтан, динебеҙгә тоғро ине. Биш ваҡыт намаҙҙы ҡалдырманы, ураҙа тотто.

**Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы:** Беҙ ниндәй сифаттарға эйәбеҙ, барыһы ла үҙебеҙ үҫкән ғаиләлә алған тәрбиәнән килә. Тәрбиә, тәртип мосолман ғаиләһендә дингә мөнәсәбәттән башлана. Олатайым Мөхәмәтвәғиз хәҙерге Дәүләкән районының Суйынсы ауылынан сыҡҡан. Рәсәйҙең һуңғы батшаһы Николай II-нең министр-реформаторы Столыпин эшмәкәрлегенә ярашлы, ул ерһеҙ интеккән бер төркөм ауылдаштары менән хәҙерге Күгәрсен районына күсеп килгән, улар Дәүләтҡол ауылына нигеҙ һалған. Артабан олатайым Ырымбур Ҡарғалыһы мәҙрәсәһен тамамлай, Йылайыр мәсетенең имам-хатибы булып китә. Улар өләсәйем Мәфтүхә менән дүрт бала тәрбиәләгән. Атайым Әхмәтфәйез уларҙың ғаиләһендә өсөнсө бала булған.

Ҡарғалы мәҙрәсәһендә атайым да бер аҙ белем алырға өлгөрә. Совет власы йылдарында ауыл, район кимәлендәге етәксе урындарҙа эшләһә лә, ул дингә тоғролоғон йәшермәне. Ә инде 1961 йылда хаҡлы ялға сыҡҡас, бөтөнләйе менән дингә хеҙмәт итеүгә күсте. 1971 йылда беҙ Салауат ҡалаһына күстек, ә 1977 йылда атайым Ишембай ҡалаһы мәхәлләһенең имам-хатибы итеп тәғәйенләнде.

Атайым менән әсәйем ғаилә ныҡлығының тәүге шартын диндә күрһә, икенсеһен ғаиләлә балаларҙың күмәк булыуына бәйләй ине. "Ғаиләлә бер-ике генә бала күп осраҡта холоҡһоҙ, мыжыҡ булып үҫә, балаларығыҙ ишле булһын, күмәк үҫкән балалар тәртипле лә, эшсән дә була", тип әйтә торғайны атайым. Атайым беҙгә айырым-айырым, һәр беребеҙҙең холоҡ-фиғелебеҙгә ярашлы, васыятнамәләр яҙып ҡалдырҙы. Беҙ уларҙы ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ, бик йыш алып уҡыйбыҙ. Үҙ балаларыбыҙға ла уҡытабыҙ. Ул саҡта үҙебеҙҙе тере атайыбыҙ менән һөйләшкәндәй хис итәбеҙ. Атайыбыҙ беҙгә, үҙебеҙ олатай-өләсәй булып бөткән кешеләргә, мәрхүм көйөнә лә, һаман тәрбиә биреүҙән туҡтамай.

**▶ Тормош юлығыҙ нисек башланды? Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа һәм ҡасан осраштырҙы? Тормошта, хеҙмәттә уңышҡа өлгәшеү өсөн ир-егеттәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

**Ғиндулла Ширияздан улы:** Урта мәктәпте 1948 йылда тамамланым. Бер йыл колхозда эшләгәс, 1949 йылдың йәйендә Стәрлетамаҡ педучилищеһына ситтән тороп уҡырға инеп, ауылыбыҙҙан өс саҡрымда ятҡан Әлдәшле (Ҡолҡан) ауылына башланғыс синыф уҡтыусыһы итеп эшкә саҡырылдым. Юғары белемгә эйә булыу теләге мине бер генә минутҡа ла ташлап китмәне. 1951 йылда Стәрлетамаҡ пединститутына уҡырға индем, 1953 йылда уны "Отличник" дипломы менән тамамланым һәм мине мәғариф министрлығы Ҡурған өлкәһенә эшкә ебәрҙе. Унда Әлмән районының Искәндәр ете йыллыҡ мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнеләр. Ошо мәктәпкә минең менән бер осорҙа Мораҡ педучилищеһын тамамлаған Мәрйәм дә килгәйне. Мөләйем, тәртипле, тыйнаҡ һәм эшсән ҡыҙ тәүге күреүҙә уҡ иғтибарымды йәлеп итте. Иғтибар тора-бара ҡайнар тойғоларға әүерелде. Беҙ 1954 йылда өйләнештек. Тәүге көндәрҙән үк бер-беребеҙҙе аңланыҡ. Берәй ҡытыршылыҡ килеп сыҡһа, тауыш сығармай ғына мәсьәләне ыңғай хәл иттек. Бындай мөнәсәбәт әле лә дауам итә.

Балаға тәрбиәне "Һин шулай ит, һин былай ит!" тип кенә биреп булмай. Тәрбиәсенең үҙе өлгө булыуы мотлаҡ, бигерәк тә атай кеше үҙ малайҙарына күркәм өлгө бирергә тейешле. Атай менән ул араһы ышанысҡа һәм дөрөҫлөккә ҡоролһа, ысын дуҫлыҡ мөнәсәбәте урынлаша. Беҙ атайым менән дуҫтар инек. Уның һүҙҙәре әле лә ҡолаҡ төбөндә. "Улым, эштең ҙуры, бәләкәйе булмай. Был бәләкәй эш, тип, башланғанды ташлап ҡуйырға ярамай. Сөнки, беренсенән, уның ҙурырағын башҡарыу өсөн тәүҙә вағыраҡтарын үтәп өйрәнергә кәрәк, икенсенән, күп осраҡта кесерәк күләмле хеҙмәт олорағын башҡарып сығырға ярҙам итә..."

**Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы:** Әлмән районына Башҡортостандан килгән йәш уҡытыусылар байтаҡ ине. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙе сит ерҙә итеп һиҙмәнек. Искәндәр башҡорт ауылы булғас, үҙебеҙҙе башҡорт мөхитендә итеп хис иттек. Ғиндулланың миңә төбәлгән серле ҡараштарын һиҙгәйнем инде. Күркәм һынлы, тулҡынланып торған сөм ҡара сәсле директорыбыҙға үҙемдең дә битараф түгеллегемде аңланым. Бер-беребеҙҙе яратыуыбыҙ хаҡында һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Өйләнештек. Лена, Әминә ҡыҙҙарыбыҙ Искәндәр ауылында тыуҙы.

Ғаиләлә ир кеше барыбер баш булырға тейеш. Был Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән ҡағиҙә. Дөрөҫ, һирәкләп донъяла был ҡағиҙә боҙолғолаған, йәғни ил менән батшабикәләр идара иткеләгән. Был да ғәжәп түгел, тимәк, гүзәл заттарҙан да көслө шәхестәр сыға. Әммә аҡыллы ҡатын лидерлыҡты иренә үҙе тапшырырға тейеш.

***Тәрбиәгә килгәндә, беренсе нәүбәттә тәрбиәсе үҙе тәрбиәле булырға тейешлеге күптән билдәле. Хәҙерге заман кешеһен байраҡ тотторо ҡына эшләтеп тә булмай. Хатта совет власы хөкөм һөргән йылдарҙа ла эште үҙең башлап эшләп күрһәтеү хәйерлерәк була торғайны. Мәктәптә лә, ғаилә лә уҡытыусы, ата-әсәләр балалар менән бергә эшләргә тейеш. Әммә һәр нәмәлә сама белергә кәрәк, эшләп күрһәтеү эшләп бөтөрөүгә әүерелергә тейеш түгел. Сөнки балалар был осраҡта башҡаларға һалынып өйрәнеүе бар. Тәрбиәне үтә ябайлаштырға ла ярамай, баланың елкәңә менеп ултырыуын һиҙмәй ҙә ҡаласаҡһың. Йомшаҡлыҡ та күрһәтергә, үтә ҡаты булып, бала күңелен һындырырға ла ярамай.***

**▶ Педагог һәм үҙ балаларығыҙҙың ата-әсәһе булараҡ, тәрбиә үҙенсәлектәре хаҡында ла һөйләшеп алайыҡ...**

**Ғиндулла Ширияздан улы:** Тәрбиәгә килгәндә, беренсе нәүбәттә тәрбиәсе үҙе тәрбиәле булырға тейешлеге күптән билдәле. Хәҙерге заман кешеһен байраҡ тотторо ҡына эшләтеп тә булмай. Хатта совет власы хөкөм һөргән йылдарҙа ла эште үҙең башлап эшләп күрһәтеү хәйерлерәк була торғайны. Мәктәптә лә, ғаилә лә уҡытыусы, ата-әсәләр балалар менән бергә эшләргә тейеш. Әммә һәр нәмәлә сама белергә кәрәк, эшләп күрһәтеү эшләп бөтөрөүгә әүерелергә тейеш түгел. Сөнки балалар был осраҡта башҡаларға һалынып өйрәнеүе бар. Тәрбиәне үтә ябайлашырға ла ярамай, баланың елкәңә менеп ултырыуын һиҙмәй ҙә ҡаласаҡһың. Йомшаҡлыҡ та күрһәтергә, үтә ҡаты булып, бала күңелен һындырырға ла ярамай.

**Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы:** Ғиндулланы, үҙе эшһөйәр булғанғамы, яңынан-яңы яуаплыраҡ эштәр һағалап торған кеүек ине. 1957 йылда беҙ Ҡурғандан Башҡортостанға ҡайттыҡ. Ғиндулланы Ғафури районының Йөҙимән ете йыллыҡ мәктәбенә директор итеп ҡуйҙылар. Шул йылдың йәйендә ул Башҡорт дәүләт университетына ситтән тороп уҡырға инде. 1961 йылда БДУ-



✓ *Иртә йәки кис эңерҙә өйөңә килгән кешегә асыҡ сырайлы бул, йомошон йомошлай алмаһаң да түрҙән уҙырға тәҡдим ит, һыйың булһа, һыйла - Хызыр Ильяс булыуы бар. Үҙеңдән башҡаны фәрештә, тип бел.*



ны тамамлағас, уны Имәндәш һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә, 1963 йылда Сәйетбаба урта мәктәбенә директор итеп ҡуйҙылар. Тәүге осорҙа ауыр булды. Ғаиләбеҙгә тағы ике бала - игеҙәктәр Гөлдәр менән Илдар өҫтәлде. Хәҙер инде балаларыбыҙ үҙҙәре айырым тормош көтә. Ҡыҙҙарыбыҙ күптән әсәй булған. Лена Салауат ҡалаһында балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй, Әминә менән Гөлдәр ғаиләләре менән Красноусол ҡасабаһында йәшәй, элемтә өлкәһендә хеҙмәт итәләр. Улыбыҙ Илдар ғаиләһе менән Өфөлә йәшәй. Беҙ балаларыбыҙға иң мөһиме тыуған ғы менән 1997 йылда ауылыбыҙға таштан мәсет һалынды. Мәсет төҙөүҙе ойоштороу, документтар юллау, иғәнә йыйыу эштәрен арымай-талмай мәрхүм Нурый Вәлиәхмәт улы Ғилманов башҡарып сыҡты. Урыны йәннәттә булһын!

1993 йылдың апрель айында Ғиндулланы Сәйетбаба ауылы мәсетенең имам-хатибы итеп һайланылар. Үтеп киткән ошо ваҡыт эсендә халҡыбыҙҙың әкренләп булһа ла динебеҙгә ынтылыш яһағаны һиҙелә. Йәштәр никах уҡытырға, яңы тыуған сабыйҙарға исем ҡуштырырға мәсеткә килә. Йома, ғәйет намаҙҙарына ла йөрөй башланылар. Тик ир-аттар иман шарттарын тулыһынса үтәп барам. Әлегә көсөм етмәгәнлектән, хаж ҡылыу шартын ғына үтәмәгәнмен.

Барлыҡ хыялдарҙы тормошҡа ашырырға бер генә кешенең ғүмере етмәйҙер ул. Шулай ҙа, хыялдарымдың, теләктәремдең иң ҙуры - халҡыбыҙҙың тиҙерәк үҙ асылына ҡайтыуы. Бының өсөн милләтебеҙ бик әүҙем һәм дәррәү рәүештә дин юлына баҫырға тейеш. Халҡыбыҙ бит үҙенең тәбиғәтенә, теленә, көнкүрешенә ярашлы бынан 1100 йыл элек үк Ислам динен дөрөҫ һайлаған һәм уны ҡабул итә башлаған. Ошо динебеҙ генә халҡыбыҙҙы һәр төрлө хәүеф-

# БОЙҺОНОУ...

**КИЛӘ**

ерҙе, телде яратыу, патриотик рухты һеңдерә алдыҡ. Улар беҙҙе 7 ейән, 36 ейәнсәр менән һөйөндөрҙө.

▶ **Ғиндулла ағай, һеҙ тынғыһыҙ кеше, бар эште лә үҙегеҙ башҡарырға тырышаһығыҙ. Шул тиклем энергияны һеҙ ҡайҙан алаһығыҙ?**

**Ғиндулла Шириаздан улы:** Эште бит тәүәккәллек күрһәтеп, башлап ебәрергә генә кәрәк. Башлаусыһы булһа, эшләүсеһе табыла. Бер мәл башыма мәктәпкә йөк машинаһы алыу идеяһы килде. Беҙҙең округ буйынса РСФСР Юғары Советына депутат булып һайланған бронетанкылар ғәскәре маршалы П.П. Пустоваловҡа хат яҙып, мәктәпкә иҫке булһа ла машина алыуға өлгәштек. Был машинаны ремонтлап алғас, ул мәктәпкә генә түгел, ауыл халҡына ла бик оҙаҡ, 1995 йылға тиклем хеҙмәт итте. Был осраҡта бит минең башҡа идея ғына килде, ҡалғанын башҡалар эшләне.

**Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы:** Ғиндулла берәй киҫәк кенә эште башҡарыуға икенсеһе көтөп тора. Мәктәбебеҙҙең заманса бинаһын һалдырыу күптән өлгөргән мәсьәлә булһа ла, уны башлап алып китеүсе кәрәк ине. Ошо эште йырып сыҡты ул.

▶ **Һеҙҙең дин юлына баҫыуығыҙ нисегерәк башланып китте? Башҡалар быға нисек ҡараны?**

**Мәрйәм Әхмәтфәйез ҡыҙы:** Ауылыбыҙҙың мәҙәниәт йортонда үткән бер кисәлә минең йырлауымды һоранылар. Мин йырлай белмәүем, әммә йыр урынына Ҡөрьәндән аят уҡый алыуым хаҡында белдергәс, риза булдылар. Сәхнәгә сығып аят уҡыным. Халыҡ алҡышланы. Ошо ваҡиғанан һуң мәҙәниәт йортонда йома һәм ғәйет намаҙҙары уҡый башланыҡ. Йәмәғәтселек тырышлыһүлпәнлек күрһәтә, мәсеткә күберәк беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар йөрөйбеҙ.

**Ғиндулла Шириаздан улы:** Элек КПСС идеяларына хеҙмәт итеп, хәҙер дингә күсеүем өсөн гәйеп тағып, күҙгә ҡарап әйтеп китеүселәр булғыланы. Мәҫәлән, бер ваҡыт ҡыҙмаса булып алған пенсия йәшендәге берәү: "Ғиндулла ағай, совет заманында аллаһыҙлыҡҡа өндәһәң, хәҙер мулла булып тәрҙән һаҡлап килгән һәм киләсәктә лә һаҡлар.

Динебеҙҙең төп китабы - Ҡөрьән Кәрим бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғ.и.с. исеменә ғәрәп телендә ебәрелгән. Ғәрәп теленең бөтә өндәре лә тиерлек башҡорт теле өндәре менән тап килә. Тимәк, динебеҙгә ҡайтып, күберәк доғалар уҡыһаҡ, был беҙҙең телебеҙҙе нығытыр һәм үҫтерер. Телебеҙ һаҡланһа, еребеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа һаҡланыр.

Тағы бер хыялым - башҡорт йәштәренән дини уҡыу йорт-

***Динебеҙҙең төп китабы - Ҡөрьән Кәрим бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғ.и.с. исеменә ғәрәп телендә ебәрелгән. Ғәрәп теленең бөтә өндәре лә тиерлек башҡорт теле өндәре менән тап килә. Тимәк, динебеҙгә ҡайтып, күберәк доғалар уҡыһаҡ, был беҙҙең телебеҙҙе нығытыр һәм үҫтерер. Телебеҙ һаҡланһа, еребеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа һаҡланыр.***

***Тағы бер хыялым - башҡорт йәштәренән дини уҡыу йорттарында шәкерттәр һанын күбәйтеү. Әлегә тормошҡа ашмаған шәхси хыялым да бар. Хәҙер оло йәштәге кеше булғас, бер үҙемә Сәйетбаба һәм Ҡаран Йылға ауылдары мәсеттәренең имам-хатибы, Жәлил Кейекбаев йорт-музейы директоры вазифаларын үтәү ауырға тура килә. Алмашҡа кеше кәрәк ине.***

киттең, был юлдарыңдың ҡайһыһы дөрөҫ?" - тип бәйләнде. Әммә мин дә тешөп ҡалғандарҙан түгел, былай тип яуап бирҙем: "Кустым, мин әле һин әйткән юлдарҙың икеһен дә дөрөҫ тип иҫәпләйем. Сөнки коммунистар насарлыҡҡа өйрәтмәне. Шулай уҡ мин дә, коммунист булараҡ, халыҡты һүҙем менән дә, үҙ миҫалымда ла дөрөҫ йәшәү рәүешенә өйрәтергә тырыштым. Мине бер генә мәртәбә булһа ла урамда иҫерек килеш күргәнең булдымы?" - тинем. "Юҡ, булманы", - ти теге. Эйе, компартия теоретиктарының хаталары баштан уҡ күп булды, шуларҙың береһе - динһеҙлеккә өндәү... Кешелек донъяһының иң дөрөҫ юлы - Хоҙай Тәғәлә күрһәткән дин юлы. Ҡасандыр ошо юлға сыға алмай аҙашып йөрөгәнбеҙ. Аҙашыуҙарыбыҙ оҙаҡҡараҡ һуҙылһа ла, әлхәмдулилла, дөрөҫ юлыбыҙҙы таптыҡ. Үҙемдең аҙашыуҙарыма килгәндә, мин Аллаһы Тәғәләнән ярлыҡауын һорап, тарында шәкерттәр һанын күбәйтеү. Әлегә тормошҡа ашмаған шәхси хыялым да бар. Хәҙер оло йәштәге кеше булғас, бер үҙемә Сәйетбаба һәм Ҡаран Йылға ауылдары мәсеттәренең имам-хатибы, Жәлил Кейекбаев йорт-музейы директоры вазифаларын үтәү ауырға тура килә. Алмашҡа кеше кәрәк ине.

**Таһир ЛАТЫПОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**Шулай итеп...**
**"Ҡасандыр ошо юлға сыға алмай, аҙашып йөрөгәнбеҙ...", тип баһалай Ғиндулла Шириаздан улы үҙенең дингә килгәнгә тиклемге үткән юлын. Ә бит әле күптәребеҙ, йөҙәр меңләгән милләттәштәребеҙ ошо юлға сыға алмай аҙашып йөрөй. Шәйәхмәтовтарҙың ошо әңгәмәһен уҡыусы кеше шул хаҡта уйлап, дин юлына бер генә аҙым яһаһа ине. Иншалла, шулай булһын!**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ОШОНДАЙ АЛТЫН КӘҢӘШТӘР

## гел оҙата барһын юлығыҙҙа

**Бала тәрбиәләгәндә ололарҙың кәңәштәрен тыңлау, уларҙың тәжрибәһенә таяныу, халыҡ педагогикаһының алтын аҡылын иҫтә тотоу, ҡулланыу беҙгә, йәштәргә, бик ныҡ ярҙам итә, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай. Бала саҡта атай-әсәйҙәрҙән ишетеп үҫкән кинәйәле әйтемдәр, тыйыуҙар, өйрәтеүҙәрҙе тормошта һәр аҙымда ҡулланырға тырышабыҙ. Шөкөр, тамырҙар өҙөлмәгән, рухи күсәгилешлек бар, тип шатланам. Бына шул әсәй-өләсәйҙәрҙән ишеткән, үҙем ҡулланған ҡайһы бер аҡылды яҙып үтәйем әле.**

- Иртә таңдан көн башлана, һәр көн яңылыҡтар, шатлыҡтар килтерһен өсөн яҡшы кәйеф менән йоҡонан тор, Аллаға шөкөр ҡыл, ярҙам һорап мөрәжәғәт ит.
- Таң менән ғауғалашма, тауыш күтәрмә, фәрештәләрҙе өркөтөрһөң.
- Уң аяғың менән тор, һәр ваҡыт кейенгәндә, ашағанда уң ҡулың алдан йөрөһөн.
- Икмәккә үрелгәндә, ишектән сыҡҡанда, эш хаҡы алғанда бисмилла әйтеп йөрө.
- Иртә йәки кис эңерҙә өйөңә килгән кешегә асыҡ сырайлы бул, йомошон йомошлай алмаһаң да түрҙән уҙырға тәҡдим ит, һыйың булһа, һыйла - Хызыр Ильяс булыуы бар. Үҙеңдән башҡаны фәрештә, тип бел.
- Бөгөн барның, иртән юҡһың. Мәңге йәшәйем, тип донъя көт, иртән үләм тиеп, тәүбә ит.
- Бер кемдә лә рәнйетмә, кеше хаҡы, кешенең тир, күҙ йәше хаҡы һис кемдә лә ебәрмәй. Эш эшләтһәң, кешенең тире ҡатмаҫ борон хаҡын түлә.
- Өй эсендә ыҙғыш сыҡмаһын өсөн кисәгене соҡома. Иртәнсәк булған аңлашылмаусанлыҡты кис онот. Бөгөнгө уй иртәнгә бармай, кисә шулай тинең бит, тип, үҙ-ара ғауға сығарма.
- Өйҙәген тышҡа сығарма, урамдағын, эштәген өйгә алып ҡайтма, йәғни хәбәр йөрөтмә, ошаҡ ташыма, кешенең гәйебен соҡома, гәйбәт һөйләмә.
- Бармаҡтар тигеҙ булмаһа ла, ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта, балаларың араһында тигеҙ мөғәмәләлә бул. Береһен үҫендерեп, икенсеһен рәнйетеүгә юл ҡуймаа. Ул да кеше балаһы бит, ул да кеше, тип үҙ-ара татыулыҡҡа өйрәт.
- Сабыр төбө һары алтын, Алланан сабырлыҡ һора.
- Ил мосолман - итәге киң, һәр кемгә лә урын табыла. Төшөнкөлөккә бирелмә, һәр кем үҙ ризыҡын үҙ күрәсәк.
- Гел бер төрлө булып тормай донъя, гел бер төрлө булмай кешеләр. Кешегә үс һаҡлама, асыу тотма, осрашҡанда сәләм бир, асыуыңды онот.
- Бар яраштыра, юҡ талаштыра, һаран булма. Һаран ике түләй, шуны онотма. Булғанын бүлешеп тотон.
- "Ярар"ҙың башы ауыртмай, йомош ҡушҡанда, юҡ, тип ҡырҡа ҡаршылашып, баш тартма.
- Баҫалҡыға баҡа ла баш, үҙеңде баҫыуға юл ҡуйма.
- Ярым-йорто эшләгәндән, тик торғаның яҡшыраҡ, эшеңде урын-еренә еткереп башҡар.
- Тән һаулығы - рух ныҡлығында, һәр көн үҙ-үҙеңде камиллаштыр, китаптар уҡып, доғалар өйрән.
- Аҡтан ҡараны сүплә, йәғни күп уҡы, яҡшынан яманды айыра бел.
- Бер абынған урынға төкөрөп кит, йәғни урап үт, бер алдаған кешегә ҡабат ялынма, таянма.
- Иҫереккә һүҙ ҡушма, юлдаш булма, яманатың сығыр.
- Бишектәге бала бишкә төрләнә, бала саҡта шулай ине, тип кешене тикшермә.
- Телеңдә, фекереңдә яҡшы һүҙгә, алғыштарға, доғаларға өйрәт, күнектер, йәшлектәге тыйыуһыҙ тел, фекер, ҡартлыҡтағы мәғәнәһеҙ һүҙ яҡындарыңды рәнйетеп, үҙеңдән өркөтөп бөтөрөр.
- Алланан башҡа алла юҡ, Алланан башҡа табыныр зат юҡ. Кеше әсә ҡарынында яралғандан алып, ер-әсә ҡуйынына инеп ятҡансы һәр ғәмәле, һәр эше, һүҙе өсөн бер Алла ҡаршыһында үҙе генә яуап бирә. Һәр көнөңдә Аллаға мөрәжәғәт итеүҙән башла, кис ятҡанда ла, төндә уянғанда ла Алланы иҫеңә төшөр. Аллаға ышанған кеше өсөн был донъяла бер ҡурҡыныс юҡ.
- Ололарҙың һүҙен тыңла, китап һүҙенә ҡолаҡ һал. Бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләмә.

Шулай итеп, ата-әсә өлгөһө - алыштырғыһыҙ тәрбиә сыуы. Яҡшы ата-әсәнең балаһы үҙ ата-әсәһе хаҡында һәр ваҡыт яҡшы фекерҙә була. Ата-әсәһен хөрмәтләп иҫкә алмаған кешеләрҙән Алла һаҡлаһын.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА.**
**Баймаҡ районы Ғүмәр ауылы.**



**СӘҒИТ АГИШ исемендәге хикәйәләр конкурсы**



# ЙӨЙЛӘ ТОРМОШ

**(Хикәйә)**

Өҫтәл артында журнал тултырып ултырған оло йәштәге уҡытыусы эргәһендә ҡыйыр-ҡыймаҫ бишенсе синыф уҡыусыһы өйөрөлә. Өҫтәлдең әле бер яғына, әле икенсе башына сыҡты. Уҡытыусыһының иғтибарын нисек йәлеп итергә белмәй уйланып торҙо ла:

- Йәмилә Маратовна, өләсәйем һеҙҙе белә, - тине.

Уҡытыусы яҙып ултырған ерҙән башын күтәрҙе, ҡара бөҙрә сәсле, күмер күҙле был малайҙы үҙе лә сырамытҡандай булды.

-Һеҙ атайымды ла уҡытҡанһығыҙ...

-Кем улы булаһың һуң? - тип йылмайҙы уҡытыусы танышлыҡ эҙләп торған был йәтеш малайға ҡарап.

- Мин Айрат улы Айҙар. Өләсәйем Нәфисә. Тик ул был районда түгел, Һаҡмар буйында йәшәй.

Аңлашылды. Дүрт тиҫтә уҡытыу ғүмерендә ике генә мәктәптә эшләне Йәмилә: тәүгеһе - тыуған яғындағы Һаҡмар буйында, икенсеһе - килен булып төшкән Ҡыҙыл һыуы буйында.

- Бик һәйбәт, - тине уҡытыусы йылмайып. - Тимәк, Ғәзизовтар тоҡомонан. Өләсәйең килгәне бармы?

- Кисә генә килеп ҡайтып китте. Ул һеҙгә сәләм әйтергә ҡушты.

- Рәхмәт, балаҡай. Өләсәйең тағы килһә, миңә мотлаҡ ҡунаҡҡа килһен, - тип тағы йылмайҙы Йәмилә Маратовна был сос малайға ҡарап.

Эскерһеҙ баланың өләсәһенән сәләме Йәмиләнең күңел һандығындағы һыуынып бөткән хәтерҙе баҙлатҡандай итте, үҙе белгән генә сер йомғағын һүткәндәй тойолдо, тәүләп уҡытып йөрөгән йылдарына ҡайтарҙы.

Уҡытыусы яҙмышы үҙе уҡытҡан балаларҙың яҙмышына ҡайһы берҙә туранан-тура инеп китә, ҡушылып аға, бөгәлсәләр яһай, утрауҙар ҡалдыра. Йәмиләнең күңелендә Айҙарҙың өләсәһе Нәфисә еңгәнең яҙмышына бәйле әллә күпме сыуалсыҡ, яуап тапмаҫ һорауҙары менән үҙ утрауы ҡалған. Күңел төбөндә уҡыусыһы Айрат ана бөгөн дә класындағы иң артҡы парталарҙың береһендә ике ҡулы менән яңағына таянып, төпһөҙ моң баҫҡан күҙҙәре менән алыҫтан ғына уны күҙәтә кеүек.

Уҡытыусы үҙ йөрәге аша үткән уҡыусылары яҙмышына бер ҡасан да битараф түгел. Шуға ла бөгөн килеп Айҙарҙың үҙен танытыуынан һуң, был ваҡиғаға шаһит булған күптәрҙең гүр эйәһе булған ерҙә, онотолоп бөткәс тигәндәй, ҡалҡып сыҡты был уй йомғағы. Кәрәге бөткәс, бер кемде ҡыҙыҡһындырмағанда, әйтерһең, килешһеҙ йөй һымаҡ...

...Шәмбе көнө Йәмилә ҡаҙҙарын һуйып алырға булды. Шылтыратып, икенсе ауылдағы һеңлеһен саҡырҙы. Икеһенә ун ҡаҙ, моғайын, таҙартып өлгөрөрҙәр. Мәктәп завхозынан ҡаҙҙарын салдыртты. Һеңлеһе Сәлимә автобус менән килеп еткәнсе, салынған ҡаҙҙарҙың ҡултыҡ аҫтындағы харам йөндәрен йолҡоп, муйынындағы тиреләрен нескә генә еп менән тамсы ла ҡандары сыҡмаһын, өҫтөндө лә, йолҡҡан саҡта таҙа йөндәрҙе лә бысратмаһын өсөн бөтә нескәлеге менән ихласлап бәйләне.

Ул арала килеп еткән һеңлеһе тиҙ генә өҫтөн алыштырып, апаһына ярҙамға ашыҡты. Тик ҡаҙҙарҙың шырт йөндәрен бөгөн кем өтөп бирер икән? Мәрхүм ирен иҫкә төшөргәс, Йәмиләнең ҡулындағы ҡаҙы төшөп китә яҙҙы. "Ҡәҙерлекәйем минең! Анауындай донъяны төҙөп, балаларҙы үҫтерештең дә, йәлләмәй, бер үҙемде ҡалдырып, гүр эйәһе булдың да ҡуйҙың", - тип үпкәләгәндәй уйланды Йәмилә. Үҙе теләп китмәне лә һуң. Эш урынында кинәт йөрәге туҡтағас, үле кәүҙәһен генә тейәп алып ҡайттылар. Йәмилә ҡапыл арҡаһын турайтты, ғәйепле кешеләй, һеңлеһенә күҙ һирпте.

- Еҙнәмде иҫеңә төшөрҙөңмө, апай, - тине бер ҡараштан бөтәһен аңлап өйрәнгән һеңлеһе. - Еҙнәм иҫән булһа, бөксәндәп йөрөп тә ятмаҫ инең, бөйөрөңә таянып, ҡаҙан эргәһендә торор инең, аш-һыу яраштырып. Иҫләйһеңме, апай, иллеләп ҡаҙыңды туған-тыумаса менән бер көндә таҙалап-тәрбиәләп биреп китә инек. Еҙнәм барып ала, алып барып ҡуя, ихлас ҡунаҡ итә ине. Әле автобустың тәҙрәһенән ҡарап, шуларҙы иҫләп, күңелем тулып килде, - тип һөйләй генә башлағайны:

- Һаумыһығыҙ, - тип көләп-йылмайып берәү тауыш бирҙе. Күтәрелеп ҡараһалар - Нәфисә еңгә .

- Өмәгеҙ ҡотло булһын, - тип күреште ул .

- Бергә булһын, - тип йылмайҙы Йәмилә. - Ҡалай уңайһыҙ, Нәфисә еңгә, һеҙҙең килерҙе белмәй, беҙ эш башлағайныҡ...

- Уңайһыҙ була тиме, бигерәк мәслихәт, бергә эш тә эшләрбеҙ, рәхәтләнеп һөйләшербеҙ ҙә, - тип тилбер генә эшкә тотондо ла китте. Йәмилә өҫтөн алыштырырға кейем бирергә генә өлгөрҙө.

Ауырһынып ҡына башланған эш көтмәгәндә шулай еңел тамамланды. Нәфисә еңгәнең уңғанлығы иҫ киткес ине. Былар берәрҙе йолҡҡансы, ул икене йолҡоп:

- Уҡытыусылар шулай инде, һүҙ һөйләргә генә оҫта, еңгәгеҙҙән ҡалышаһығыҙ әле, - тип төрттөрөп тә алды.

Шул тиклем ихлас ярҙам итеп йөрөгән Нәфисә еңгәнең Йәмиләгә артыҡ туғанлығы ла юҡ. Ауыл ғәҙәте буйынса ғына, ире Солтан ағай шул ауылдыҡы булғас, ситтән килен булып төшкән апайҙарға еңгәй тиҙәр.

Былай ҙа форсатын табып, Йәмиләгә Сәлимә:

- Апай, һинең Нәфисә тигән еңгәң бар икәнен белмәй инем әле, - тип ғәжәпләнеүен һиҙҙермәй ҡалманы .

Тура ярып һөйләргә яратҡан һеңлеһе Сәлимәнең Нәфисә еңгәне сит күреп тормаһын тип уйлаған Йәмилә апайҙарса ҡәтғи генә :

- Беҙҙән өс өй аша ғына йәшәне ул, һин ситтә уҡытып йөрөгән кеше белмәүең дә ихтимал, оҙаҡ йәшәмәне ул өйҙә, әллә ни белмәгәнеңде һиҙҙермә, - тип тыйып ҡуйҙы.

Уларҙың ата-әсәһе Йәмилә - университет, Сәлимә унды тамамлаған йылы күрше ауылдан өй һатып алып, шунда күсеп китте. Сәлимә Һаҡмар түбәнендәге ауылдың береһенә уҡытырға китте, ситтән тороп университетҡа уҡырға инде, ауылға һирәк ҡайтты. Йәмиләгә Байгилделә эшләргә урын булып, ата-әсәһе менән бергә йәшәп, шунда уҡытты. Сәлимәнең бындағы кешеләрҙе яҡшы белмәүе ғәжәп түгел ине. Әммә һүҙгә сос, эшкә тилбер был еңгә уның да күңеленә тәмле һүҙе менән еңел инеп китте.

- Һеҙ күсеп килгән йылы бишенсе балама ауырлы инем. Сәлимәне ялға ҡайтып, Һаҡмар мәкеһенән һыу алып торғанында осраттым. Марат ағайҙың икенсе ҡыҙы бигерәк сибәр икән, - тип, хайран ҡалғайным шунда. - Балам тыуһа, төҫкә уның һымаҡ һылыу булһын инде, тип теләнем хатта, - тип көлә-көлә һөйләй Нәфисә еңгә. - Ҡыҙым тыуғас, Сәлимә тип һинең исемеңде ҡуштым, - тигән һүҙҙәре Йәмиләнең һеңлеһе йөрәгенә лә майҙай һыланды ла ҡуйҙы.

Эш тамамланғас, мунсала йыуынып, матур табын артына ултырҙылар.

- Еңгә, һин килеп инмәһәң, әле һуҙылып эшләп йөрөр инек, - тип ҡәнәғәтлеген белдерҙе Йәмилә. - Бөгөн миндә ҡунаһығыҙ, шылтыратып, ҡайтмаҫыңды иҫкәртеп әйтергә кәрәктер, еңгә.

- Кәрәкмәҫ, мин, көтмәҫһегеҙ, тип, аңғарта биреп киттем. Бигерәк тә өлкән ейәнем Айҙар ҡыуанып ҡалды бында киткәнгә, - тип һөйләшеүҙе дауам иткәнде көткәндәй һынап ҡараны Нәфисә еңгә.

- Ейәнең үҙеңә оҡшап, сос, шәп, - тип һүҙ ялғаны Йәмилә. - Бигерәк отҡор, ауыҙындан сыҡҡанды һауала уҡ тотоп ултыра. Зирәк малай. Айратың ул тиклем үткер булып иҫемдә ҡалмаған...

- Күңелемде һаҡлап әйтәһең инде, Йәмилә... - Шарҡылдап, хәбәрен сәсрәтеп торған күңелсәк еңгә ҡапыл ғына баҫалҡланып,Сәлимә яғына күҙ һирпте. - Һинең өйгә килгәнеңде, йәш кенә булыуыңа ҡарамаҫтан, аҡыллы ғына кәңәштәр биреп маташыуыңды ла иҫләйем мин. Икебеҙ ҙә эсә инек бит. Солтан ағайың да, мин дә... Балалаларҙы йыш табып, бишәү итеп ташлағайным, һыйыр һауыу эше былай-алаймы, ауыр. Эй, уға ғына бирешмәҫ инем әле. Атайҙан иртә етем ҡалғас, быуыным да ҡатмаған көйө әсәй менән тубыҡтан тиҙәк кисеп, фермала аҙ йөрөмәнем, уға ярҙамлаштым, кесе туғандарымды аяҡҡа баҫтырыштым. Эштән ғүмерҙә лә биҙмәнем мин, һау кешегә эш тә булдымы ауырлыҡ. Ағайынды ла шул һауынсылар слетында осраттым бит инде. Солтан ағайығыҙҙы иҫләйһегеҙҙер әле, бигерәк матур, бигерәк тә шәп ине лә ул...

Йәмилә һирпелеп кенә Нәфисә еңгәгә ҡараны. Йәтеш кенә кәүҙәһе ултырған ултырғысында орсоҡ кеүек әйләнә, йөҙөнән тулҡын-тулҡын нур тарала, күҙҙәрендә сабыр моңһоулыҡ. Яратҡан кеше генә ошолай йәйғор төҫөнә инә алалыр, һөйөлгән йөрәк кенә ошолай көлтә-көлтә йылылығын тараталыр...

Мазут кейемендәге күмер кеүек ҡара күҙле, ҡара сәсле Солтан ағай тракторы янында соҡоноп йөрөгән көйө иҫендә ҡалған Йәмиләнең. Ҡышын Урал төпкөлөндәге кәбәндәрен һөйрәп алып килгәндә атаһы мәрхүмдең арт ҡапҡаны асып йөрөгәндәре, мәрхүмә әсәһенең көтөп алынған бесәндең тәләфләнмәй килеүенә шатланып, Солтан ағайҙы ҡәҙерләп, түренә ултыртып һыйлағаны хәтерендә. Борон ауыл кешеләре ошо Солтан ағай кеүек егәрле, әрһеҙ, эшкә талымһыҙ кешеләр арҡаһында донъя көтә ине. Кеше бер-береһе өсөн ҡәҙерле ине элек.

- Ире менән ғорурланмаған, ирен хөрмәт итмәгән кеше ир менән йәшәй алмай. Уға минең яратыуым етә, башҡаларға ымһыныр, тип уйламай инем. Бергә эшләгән Сәйҙә, Һаҡмар аръяғына ҡайтыу алыҫ, иртәнге һауымға һеҙҙән йөрөү еңел, тип, көн дә кис килеп ҡуна башланы. Күңелем киң, өҫтәлемдә ризыҡ мул, Сәйҙә лә буш килмәй, ҡуйынына яртыһын ҡыҫтырып килә. Ашайбыҙ, эсәбеҙ, ятып йоҡлайбыҙ. Ир төпкө өйҙә, мин балалар менән алғы өйҙәге урындыҡта, әхирәтем урындыҡтың икенсе башында. Мәлһеҙ уянып, тышҡа сығып инәйем тиһәм, әхирәтемдең урыны буш. Ынтылып, ир ятҡан карауатҡа күҙ һалһам, ана яталар ҡушарлап. Быуынһыҙ булып урыныма барып яттым...

Нәфисә ҡапыл ытырғанып килеп үҙен ҡосаҡланы. Сәлимә керпектәрен аҫҡа төбәне. Ошондай кисерешендә кешегә нисек төбәлеп ултырһын. Йәмилә тынсыс тауыш менән өҙөлгән хәбәрҙе кире ялғап алып китте.

- Үткәрҙең, еңгә, барыһын да... Беҙ, йәш уҡытыусылар, ул осорҙа ферманан ҡайта белмәйбеҙ, агитатор ҙа, пропагандисбыҙ ҙа. Сәйҙә апай иң алдынғы һауынсы, "Йәшен" гәзите сығарып, маҡтап элеп китәбеҙ, иртәгәһенә барыуға гәзит йыртылып, мөйөштә ята...

- Әлеге мин, йәнәһе, бөтә үсемде шул гәзиттән алам инде. Үҙем иргә лә, Сәйҙәгә лә бер һүҙ ҙә әйтә алмайым. "Киләйемме?" - тип һораһа, "Күберәк араҡы алып кил", - тием. Күберәк эсәм дә, балаларҙы ҡосаҡлайым да йоҡлайым. Йәнәһе, күҙем күрмәһен, ҡолағым ишетмәһен.

- Илдең ауыҙын иләк менән ҡаплап булмай, - тип уйланып дауам итте Йәмилә. - Һеҙҙең ғаилә тураһында ғәйбәт таралды. Сәйҙә апайҙы күралмаҫ хәлгә әйләндем, һеҙҙе лә аңлай алмайым.Ғорурлығы юҡмы икән, ниңә түбәнһенә икән, тип уйлайым...

- Иремдән айырылғым килмәй. Сәйҙәне лә йәлләйем...

- Ниңә йәлләргә уны? - тип зәһәрләнеп һүҙгә ҡушыла Сәлимә.

- Сәйҙә апайҙың да үҙ тарихы бар ине шул, - тине иплән кенә Йәмилә. - Ут күрше Шағбан ағай менән Разифа апайҙы беләһең бит, Сәлимә.

- Эйе, беләм. Биш ҡыҙҙары бар ине. Разифа апай беҙгә килеп, оҙаҡ-оҙаҡ сәй эсеп ултырыр ине, йәнем көйә ине, - тип өҫтәне Сәлимә.

- Ул көн дә инә, әсәйем менән сәй эсә, ә атайым уның инеп йөрөгәнен яратманы. Атайым Разифаны хөрмәт итмәгәндер, тием. Әсәйем менән дә һүҙгә киләләр ине. "Күрше хаҡы - тәңре хаҡы" тип еңә ине әсәйем.

- Сәйҙә апайҙың ни ҡыҫылышы бар улар ғаиләһендә? - тип ғәжәпһенде Сәлимә.

- Туранан-тура, - тип һүҙҙе ялғап алып китте Нәфисә еңгә. - Сәйҙә ун һигеҙе тулыр-тулмаҫ Шағбанға кейәүгә сыҡҡан булған. Мин дә шул осорҙа Байгилдегә килен булып төштөм. Ауылға шәфҡәт туташы булып Разифа эшкә килде. Ҡайһы аралалыр Шағбандың башын әйләндереп, Сәйҙәне айырттырып, уға кейәүгә сыҡты. Сәйҙә иренән айырылғандың икенсе көнөнә үк малай тапты, Разифа ла күп йөрөмәй, ҡыҙ бала тыуҙырҙы. Бер мәлдәрәк тыуҙы балалар. Ун һигеҙ йәшенән ирһеҙ ултырҙы Сәйҙә, балаһын ҡарт әсәһе көттө, үҙе алдынғы һауынсыға әйләнде, - тип һүҙен дауам итте Нәфисә еңгә. - Иремде лә, әхирәтемде лә күрә алмайым, ә иң үкенеслеһе - үҙемде аңлай алмайым. Кешеләрҙең төрлөһө бар, ҡайһыһы йәлләй, Разифа кеүек йүнһеҙе этлеккә өйрәтә.

Йәмилә Нәфисә еңгәгә ҡарап, ул йылдарҙағы ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтырырға тырыша. Ысынлап та, аҡ дебет шәл ябынып, ыҡсым ғына фуфайка кейгән Нәфисә еңгәне йә һыу ташығанын, йә эшкә йүгергәнен күрә, тик мәктәпкә йыйылышҡа йөрөмәй. Балалары әллә ни эш боҙған балалар түгел, тик насар уҡыйҙар, етмәһә, күҙҙәрендә йәшәү йәме юҡ.

Мәктәп директоры көн дә бер уҡытыусыны улар ғаиләһенә ебәрергә тырыша. Бына шул ваҡытта уларҙа булғайны Йәмилә. Ир менән ҡатындың татыулығы булмаған, мөхәббәте ҡасҡан йорт нисек була, уларҙа ла шулай ине.

**✓ Хөкөм итергә хаҡы юҡ икәнен дә аңлай. Бәндәләрҙең үлеме йәшәүенә оҡшағанын, йәшәүенә ҡарап тәҡдире килгәнен күреп тороу уны тәҡәтһеҙ итә.**

Тәү ҡарағанда, бөтәһе лә урында һымаҡ, хатта балалар ҙа дәрес әҙерләгән кеше булып, өҫтәл артында ултыра. Әммә өйҙә йәнһеҙлек хөкөм һөрә, хатта балаларҙың да йәне ҡайҙалыр боҫҡан, ҡурҡҡан кеүек.

- Нинә көн һайын килеп бимазалайһығыҙ. Башҡа эшегеҙ юҡмы? Эшегеҙ аҙ тойолһа, ана, фермаға барып эшләшегеҙ. Ә мин ҡайтып, балаларымды ҡарармын... Тәүҙә үҙегеҙ кейәүгә сығып, бала табығыҙ, шунан өйрәтерһегеҙ, - тигән әсе һүҙҙәре ишеккә ҡыҫылып ҡалды.

Күнеле тулып ҡайтып инде Йәмилә. "Үҙе рәнйеүле кеше сит кешенең дә йөрәген аямай, рәнйеүендә үткәреп ебәрергә тырыш, балам", - тип йыуатты уны әсәһе.

Нәфисә еңгәнең ғаиләһендәге фажиғәне бөтә ауыл белә, яман шеш кеүек ҙурайғандан-ҙурая, әммә берәһе лә ҡотҡарыу юлын тапмай ине.

Ул арала Йәмилә күрше район үҙәгендә эшләп йөрөнә, үҙе менән бергә уҡыған егеткә кейәүгә сығып китте. Бер туған ҡайнағаһының биш бала менән яңғыҙ йәшәгәнен күреп (ҡатыны аҙғынлығы, эскелеге арҡаһында әсәлек хоҡуғынан мәхрүм иткәйнеләр), Сәйҙә апайҙы димләне. Ҡайнағаһы ауылға барып, ул ҡатынды күргәндән һуң, бик оҡшатып, өйләнергә булып, артынан әйәртте лә ҡайтты.

Сәйҙә апай биш баланы ауырһынмай күтәп, Йәмиләнең ҡайнағаһы менән арыу ғына йәшәне лә китте. Тик әсәһенән Йәмиләгә ошо сәләмде еткертте. "Балам, Сәйҙә инеп сыкты бер көндө, - тине әсәһе һаҡ ҡына. - Һинә үтенесе бар икән. Сәйҙә үҙенең үткәндәре өсөн борсола. Иренә лә, ҡайнағаңа ла бер нәмә лә һиҙҙермәүендә һорай". Йәмилә әсәһенең күҙҙәрендә шомло борсолоу әҙҙәрен күрҙе. Эйе, кеше яҙмышы менән шаярыу яҡшы нәмә түгел. Йәмиләгә лә был аҡыл әсә һөтө менән бирелгән ине. Ни тиклем ире менән татыу йәшәп, араларында бер осток та йәшерен һүҙҙәре булмаһа ла, Сәйҙәнең намыҫына тейгән серҙе һаҡлай белде. Апһындар булып, татыу йәшәнеләр. Йылдар үҙ ағышы менән үтте.

Бер ҡунаҡҡа килгәнендә әсәһе:

- Нәфисә киленде осраттым Темәс баҙарында, - тине.

- Нинә ул Байгилделә йәшәмәйме ни?

- Эй, улай булғас, һин белмәйһең икән. Нәфисә еңгәнден тормошонда ла үҙгәрештәр булып алды бит. Һин Сәйҙәне ҡайнағаңа димләп алып биргәндән һуң, Нәфисә лә Солтанды ташлап, балаларын тейәп, ҡайтты ла китте тыуған ауылына. Тәүҙә ферма өйөндә йәшәгән, тинеләр, һуңынан үҙенә йәтеш кенә өй әтмәләгән, туғандар ярҙам иткән, тинеләр. Эсеүен ташлаған, Талҡаҫ буйындағы ҡымыҙныйҙа бейә һауып, матур ғына йәшәп киткән. Балаларын да өйөрөп үҙе күтәп ултыра тигәйнеләр.

Солтаны ғына ауылда ике эттең береһе булып эсеп йөрөнө. Шулай инде. Ир башы менән бер түгел, ике ҡатындан көләп, ғаиләһен мыҫҡыл иткән кешегә ней һан булһын. Бөгөн килеп, инәлеп, Нәфисә еңгәнә, балалары эргәһенә барып һыйынған икән. Эсеүен ташлаған, ауырый, ауырыһа ла тракторҙа эшләп йөрөй, ти. Нәфисә еңгәң һинә шуны әйтергә ҡушты: "Йәмилә Сәйҙәне ҡайнағаһына димләп, мине көндәштән ҡотҡарҙы. Ғаиләмә ырыҫым, бәхетем әйләнеп ҡайтты. Ҡыҙығыҙҙың бик бәхетле икәнен ишетәм, шул бәхете ташламаһын, ике донъяның да рәхәтен татып, матур ғүмер итһен. Иткән изгелеге үҙенә әйләнеп ҡайтһын..."

Яҡшы һүҙ - йән аҙығы, ғәләмәт күнеле булды Йәмиләнең.

Ә бөгөн, күпме ғүмерҙән һуң, Нәфисә еңгәнең түренә ултыртып һыйлап ултыра, һыйлап тигәс тә, табынға араҡы ла, вино ла ултыртылманы.

- Эсмәйем, - тине Нәфисә еңгә. - Былай ҙа Байгилде ауылы кешеләрен күрһәм, оятымдан ер тишегенә инерҙәй булам. Ҡайһындай оятсылыҡ килтерҙем ауылға. Солтан ағайың менән кире йәшәп киткәс, ултырып-ултырып һөйләштек. Шул замандарҙы иҫкә алдыҡ.

- Нимә тип иҫкә алдығыҙ инде? - тип һорай ҡуйҙы Сәлимә. Нәфисә еңгә көтмәгәндә сыңғырҙатып көләп ебәрҙе .

- Икебеҙ ҙә ғәйепле, тип һөйләшкән булдыҡ. Мине еңел генә икенсе бисәгә бирҙең, минең өсөн көрәшмәнең, тигән була Солтан.

- Солтан ағайығыҙ ҡапыл үлеп киткәс, ҡыйын булды барыбер. Насармы, яҡшымы, ирем булған икән дә һуң. Хәйерен биреп, аятын уҡытып торам. Тик Сәлимә генә ғәфү итмәй атаһын. " Эй, шуны", - тип, телгә алып һөйләгәндә лә яратмай...

Төн ҡундырып, матур яулыҡ ябып, тәмле күстәнәстәр менән ҡапҡа тышына сығып оҙатып ҡалды Йәмилә. Йәтеш көҙәлә, теремек күҙле Нәфисә еңгә лә ихлас һаубуллашты.

Нәфисә еңгәне оҙатҡандан һуң, Йәмилә менән Сәлимә ҡаҙҙарҙың эсенә тоҙ һирпеп, туңдырғыс эсенә тултырырға тотондо. Эш менән мауығып, улар һөйләшмәй генә йөрөнө.

- Һине аңларға тырышып йөрөйөм, апай. Сәйҙә апай тураһындағы серҙе әҙнәмдән, ҡайнағаңдан йәшергән өсөн үҙеңде улар алдында гонаһлы һанамайһыңмы? - тине телгә килгән Сәлимә.

- Әллә... Төрлө сағым бар. Кешене хөкөм итеүе генә еңел. Әле бына Нәфисә еңгәнән Сәйҙә апай тураһында берәй насар һүҙ ишеттеңме?

Сәлимә үҙе бер, күлдәге менән ике ҡат булған әскерһеҙ Нәфисә еңгәне күҙ алдына баҫтырғас, йылмаймаҫ еренән йылмайҙы.

- Йөй белдермәй йәшәүенә һоҡланып та ҡуям, апай, - тине һеңлеһе Йәмиләгә хушлашҡанда.

-Йөй белдермәй... Әйтеүе генә аңһат...

Сәйҙә апайҙы үҙенә туған итеп, апһындар булып йәшәп китһә лә, тәүҙәрәк Йәмилә тартынып, уға сәйерһенеп ҡараны. Күнеленән Нәфисә еңгәнең ғаиләһенә оятһыҙ рәүештә килеп ҡыҫылыуын ғәфү итә алмай ыҙаланы. Әммә биш баланы үҙенеке кеүек тәрбиәләп, ҡайнағаһының да күнелен күреп, матур йәшәп киткәстәре, уларҙың ғаилә бәхетенә оронсоҡлап, иҫкәләрҙе иҫкә алманы. Килен, тип, алсаҡланыуын ихлас ҡабул итте.

Кешегә баһа йәшәй-йәшәй, өйрәнә-өйрәнә, күрә-күрә бирәләр. Йәмилә лә Сәйҙә апайҙың үгәй балаларҙан йәлләп, ҡыҙғанып, өҙөп ултырғанын, һаранланғанын, күнеленең тарлығын күрмәне. Шуғалыр ҙа ҡайнағаһының ғаиләһенә Сәйҙә апайҙың малайы менән ҡарт әсәһе лә һыйҙы. Бөтәһен дә аяҡҡа баҫтырҙылар, туйҙарын үткәрҙеләр. Тормоштары ыңғай барған ерҙән фажиғә бер-бер артлы килде. Сәйҙә апайҙың әсәһен ерләгәндән һуң, күп тормай, улы менән килене, ейәнсәре бер көндә өйҙәрендә янып үлделәр. Янғындың нимәнән сыҡҡанын да айырып әйтә алманылар, әллә төҙәк булмаған розетканан, әллә янып ятҡан усаҡтан. Йәмиләнең иренең үлеменә йыл тигәндә, ҡайнағаһы кинәт кенә үлеп ҡуйҙы. Ҡайғыларға ике йыл да үтмәне, Сәйҙә апайға "яман шеш" диагнозы ҡуйҙылар, уң яҡ түшен ҡырҡып ташланылар. Ул дауаханала саҡта йыш эргәһенә барҙы Йәмилә, һөйләшеп ултырҙы. Йәшәүҙән төңөлөүен һиҙҙермәй, "йүнәлеп китһәм", тигән ышанысы ҙур кеүек Сәйҙә апайҙың.

- Килен, арҡама массаж яһа әле, - тигән булды һуңғы килгәнендә. Кейемен күтәреп, арҡаһын һыйпаштырҙы. Ҡултыҡ аҫтынан арҡаһы шеш, тәне ҡара янып күгәргән. Йәмилә шикләнеүен һиҙҙермәй, өҫтөн ябып, аяҡтарын юрған эсенә төрҙө, йөҙөнә күҙ төшөрҙө. Йомарлам май шикелле, ап-аҡ ҡына булып, йәмле генә ята. "Ни йәнекәйе менән түҙә икән, меҫкенкәй", - тип өҙөлөп уйланды Йәмилә. "Дарыу көсө менән ята, күп ҡалмаған", - тине дауалаусы табиб.

Шул саҡта Йәмиләнең күнеленә яман уй ояланы ла ҡуйҙы. "Нәфисә еңгәнең өйөнә йөрөгәндә, ниҙәр кисерҙең?" тип һорағыһы килеп тик тора, йәмһеҙ уйҙарынан арына алмай ҙа ҡуя. Хөкөм итергә хаҡы юҡ икәнен дә аңлай. Бәндәләрҙең үлеме йәшәүенә оҡшағанын, йәшәүенә ҡарап тәҡдире килгәнен күреп тороу уны тәҡәтһеҙ итә.

Сәйҙә апайҙың мәйетен өйөнә алып ҡайтҡас, үгәй ҡыҙҙарының әсәләренең күкрәгенә ҡапланып: "Әсәй, әсәкәйем! Нинә ташлап киттең беҙҙе?" - тип тәгәрәп илағанын күреп, Йәмилә һиҫкәнде. "Сәйҙә апай, ғәфү ит мине, минең ауыһыҙ хөкөмөмдө ярлыҡа инде", - тип, быуынһыҙ булып ул да түгелеп иланы. Хөкөмдәр булырға хаҡы юҡлығын шунда төшөндө.

Күргәндәре-белгәндәренән фәһем алып, кисерештәренә һығымта яһай алмай ыҙалана ҡай саҡта. Әҙәмдең хаҡ яҙмышы, булмышы шулайҙыр инде. Ошо ерҙә Нәфисә еңгәнен: "Сәйҙәнең улы, килене, ейәнсәре - бер юлы үлгәс, Шағбан да ерләшергә барған, тинеләр. Улын тыуғанына ҡабул итмәгәс, ерләшергә нимә уйлап барҙы икән, тип гел уйлайым", - тигән һүҙҙәре иҫенә төштө. Яуап табып булһа икән.

Нәфисә еңгәнең өйҙәрендә булып китеүе Йәмилә йөрәгендәге күптән һыҙлап торған яраһын бөтөштергәндәй, күнелендәге тынысһыҙ уйҙарын бөтөйткәндәй итте. Уҡыусыһы Айҙарҙы күҙ алдына баҫтырыу менән бөтә булмышы яңырҙы ҡарт уҡытыусының.

**Зөһрә УСМАНОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Асҡар ауылы.**

ЗАУЫҠ

# КҮҢЕЛДЕ КҮККӘ СӨЙӨРГӘ

## бер һүҙең етә...



### Таналыҡай буйы

Таналыҡай буйы ҡуйы таллыҡ,
Яр буйында һомғол ҡамыштар.
Ярҙарына баҫып, бер йырлаһам,
Таралмаҫмы икән һағыштар?

Әнәрҙәрҙә үҙәктәрҙе өҙә
Саҡ һәм Суҡтың зарлы тауышы.
Моңло ҡошҡайҙарҙың
һағышынан
Бойоҡ кеүек йылға ағышы.

Яңғыҙ баштарына ауырҙыр шул,
Ана, кәкүк нисек моңая?
Ай ҙа күктән һары нурын һибә,
Яңғыҙлыҡтан микән һарғая?

Ай янына ҡалҡыр таң Сулпаны,
Саҡ менән Суҡ бер саҡ күрешер.
Кәкүк кенә яңғыҙ моңайыр тик,
Кәкүктәрҙә - бала күҙ йәше.

### Ҡайттығыҙмы ни?

Ҡайттығыҙҙамы ни,
сыйырсыҡтар?
Әле ҡарҙар иреп бөтмәгән,
Ҡоторонып март бураны уйнай,
Таналыҡта боҙ ҙа китмәгән.

Яҙ етеүен көтөп ала алмай,
Сит ерҙәрҙә зарыҡтығыҙмы?
Себешегеҙ тәүләп ҡанат ҡаҡҡан
Оягыҙҙы һағындығыҙмы?

Эй, һайраша, ҡошҡайҙарым,
күрсе,
Оябыҙға ҡайттыҡ, тиҙәрме?
Төбәп ҡайтыр йортоң булыу үҙе
Оло бәхет бит ул, тиҙәрме?

### Илһам ҡошо

Илһам ҡошо бына килеп ҡунды
Ҡапҡаһына тыныс күнелдең.
Һайрап ҡына торһон әле гел,
тип,
Тотоп алырға мин үрелдем.

Осто-китте ҡанаттарын елпеп,
Төшөп ҡалды тик бер ҡауырһын.
Шул ҡауырһын тыңғы
бирмәй минә,
Нисек гәмһеҙ булып ҡалырһың?

Ҡулыма алам ҡаурый ҡәләмемде,
Ойоған уй-хистәрҙе уятып.
Күнел төпкөлөндә бикле яткан
Тәрән тойғоларҙы ҡуҙғатып.

Илһам ҡошо - күнелем
ҡапҡаһына
Һирәк ҡуныр таңһыҡ
ҡошҡынам.
Һайра әле, һайра, илһам ҡошом,
Һинһеҙ күнелкәйем буш ҡына.

### Йәшел яулыҡ

Әсәкәйем төҫө - йәшел яулыҡ,
Ҡомартҡыһы итеп һаҡлайым.
Шул яулыҡтан затлы һәм ҡәҙерле
Башҡа нимә бар һуң, тапмайым?

Әсәкәйем төҫө - йәшел яулыҡ,
Яулыҡ ҡына түгел, аманат.
Һинең кеүек була алмам, ләкин
Исеменә төшмәҫ яманат.

Ғүмер тигән һикәлтәле юлдың
Етеп барам инде аҡшамына.
Ашығамын аят уҡытырға,
Йәшел яулыҡ бәйләп башыма.

### Шулай буласаҡ

Шулай булған, шулай буласаҡ -
Ҡыштар үткәс, яҙҙар етәсәк,
Таң атасаҡ, елдәр иҫәсәк,
Йыл артынан йылдар үтәсәк.

Шулай булған, шулай буласаҡ -
Йәйен гөлдәр сәскә атасаҡ,
Ҡышын бурап ҡарҙар яуасаҡ,
Ерҙә тормош дауам итәсәк.

Шулай булған, шулай буласаҡ,
Барыһы элеккесә ҡаласаҡ,
Бары һин булмаҫһың,
мин булмам,
Был донъя беҙҙән дә ҡаласаҡ.

### Мөхәббәт

Нимә һуң ул мөхәббәт,
Һөйөшөү уйынымы?
Әллә башың юғалтырлыҡ
Тойғолар ҡойономо?

Күҙҙәрҙе күҙҙәргә төбәп,
Һөйәм һине, тиеүме?
Әллә һөйгән йәрең менән
Утҡа-һыуға инеүме?

Нимә һуң ул мөхәббәт?
Мин аңлата алмайым.
Тик шуны беләм, йәнем,
Һинһеҙ йәшәй алмайым.

### Бер һүҙең етә

Күнелде күккә сөйөргә
Бер һүҙең етә,
Тигеҙ ерҙә йығылырға
Бер һүҙең етә.

Илһам ҡошом һайратырға
Бер һүҙең етә,
Ҡояшымды һүндерергә
Бер һүҙең етә.

Күнелдә йыр тыуҙырырлыҡ
Әйт әле бер һүҙ.
Тел осондағы үпкә һүҙен
Тыйып торсо, түҙ.

Йылмайып өндәшкән һүҙең
Йыр булып тыуыр.
Барлыҡ хәсрәт-һағышыңды
Күнелдән ҡыуыр.

**Фәрigә КҮСӘКОВА.**
**Хәйбулла районы,**
**Таштуғай ауылы.**

*✓ Иртәнсәк уянғас та контраст душ инегеҙ, ятраҡан көйөгөҙ аҫтында бер-ике күнегеү эшләп алығыҙ. Сағыуыраҡ кейемдәр һайлағыҙ. Эшегеҙ йыраҡ түгел икән, унда йәйәү барығыҙ.*



ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# САБЫЙЫҢ ҺАУ БУЛҺЫН, ТИҺӘҢ...

## теш табибына бар

**Һеҙ әсә булырға йыйынаһығыҙ. Тимәк, тыуасаҡ сабыйығыҙға зыян килтермәҫ өсөн алкоголле эсемлектәр эсеү, тәмәке тартыу, ҡайһы бер дарыу препараттары ҡабул итеүҙән баш тартыу менән бер рәттән, тештәрегеҙҙең сәләмәтлеген тикшереп торорға ла бурыслыһығыҙ.**

Туғыҙ ай буйына ҡарындағы бала үҙенә кәрәкле матдәләрҙе, иң тәүҙә микроэлементтар һәм витаминдарҙы, ҡандан ала. Бынан тештәр һәм теш ҡаҙнаһы зыян күрә.

Ауырлы икәнегеҙҙе белгәс тә, мотлаҡ теш табибына күренегеҙ. Сабыйығыҙ тыуғансы боҙоҡ тештәрҙе дауалап бөтөрөргә кәрәк, сөнки кариес ваҡытында унда микроорганизмдар күпләп үрсей. Был инфекцияның ҡанға әләгеүе һәм буласаҡ әсә һәм сабыйҙың эҙләгөүенә килтереүе ихтимал.

Беренсе тапҡыр йөклөлөктөң 6-9 аҙнаһында, икенсе тапҡыр 16-18 аҙнаһында, өсөнсө тапҡыр 26-28 аҙнаһында һәм бала тыуыу алдынан, яҡынса 36-38 аҙнала теш табибына барып, тештәрҙең торошон тикшертеү мотлаҡ.

Ауырлы икәнегеҙҙе теш табибына әйтергә онотмағыҙ, ул сабыйға зыян килтермәслек дауалау алымдарын ҡулланыр. Тештәрҙе ямау материалын, ғәҙәттә, теш табибы үҙе һайлай. Составында фтор булған ямау материалынан баш тартырға кәрәкмәй, уны ҡатырыу өсөн ҡулланылған махсус лампа ла тыуасаҡ сабыйығыҙға зыян килтермәйәсәк.

Йөклөлөктөң 14 аҙнаһына тиклем теш һурҙыртыуҙы кисектереп торорғоҙ, сөнки был ваҡытта плацентар барьер формалаша. Бала тыуыу мәле килеп еткәс, теш һурҙыртыу инфекция сығанағына әүерелеүе бар.

Ауырлы саҡта тештәргә рентген тикшереүе эшләмәү хәйерлерәк. Бик тә кәрәк икән, компьютер визиографияһы ла ярап тора. Был осраҡта нурланыу күләме аҙыраҡ буласаҡ.

Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлы саҡта тештәренең һиҙгерлеге арта. Был мәлдә "sensitive" билдәһе менән һатылған махсус теш пасталары ҡулланыу яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Теш таҙартҡан саҡта теш щеткаһында ҡан эҙҙәре булһа, был ҡаҙнаның лайлалы тиресәһе елһенеүе - гингивиттың тәүге билдәһе. Бынан ҡурҡырға кәрәкмәй, ауырлы ҡатындың теш ҡаҙнаһы ҡанауы гормональ сәбәптәр арҡаһында була һәм ул бала тапҡандан һуң юҡҡа сыға, шулай ҙа табипҡа күренергә лә онотмағыҙ. Ҡайһы бер осраҡта теш ҡуныған һәм ташын таҙартыу ҙа был проблеманы хәл итә. Гингивиттың тәүге билдәрен дауалау пародонтитты булдырмай.

Әгәр ҙә аяҡтарығыҙ тартыша башлаһа, был турала гинекологты ғына түгел, ә теш табибын да иҫкәртергә онотмағыҙ. Был организмда кальций дефициты менән бәйле булыуы ихтимал. Уны ваҡытында дауаламаһаң, тештәр боҙола башлай, сөнки үҫеүсе яралғы үҙенә кәрәкле күләмдәге кальцийҙы әсәнең һөйәктәренән ала башлаясаҡ. Туҡланыуға иғтибар бүлегеҙ, һөт аҙыҡтары (һөт, ҡатыҡ, йогурт, эремсек, сыр) кальций сығанағы һанала. Шулай уҡ баланың тештәре һәм теш ҡаҙнаһы дөрөҫ формалашһын өсөн А һәм D витаминдары ла кәрәк, улар балыҡ майында, йомортҡаның һарыһында, һөт аҙыҡтарында, кишерҙә, абрикоста, помидорҙа күп.

Тештәрҙе 2-3 минут буйы таҙартырға кәрәк. Махсус шыйыҡсалар менән ашағандан һуң ауыҙығыҙҙы сайҡатып ҡуйығыҙ. Теш щеткаһын 3 айға бер тапҡыр алыштырып торорғоҙ. Яңы теш щеткаһының ҡылдары уртаса ҡатылыҡта булырға тейеш.

Йөклөлөктөң беренсе өс айында токсикоз булһа, теш табибына был турала ла әйтегеҙ. Токсикоз ваҡытында ауыҙ ҡыуышлығының кислота-һелте балансы боҙола, ул үҙ сиратында микрофлораның үрсеүенә һәм тештәрҙең эмале боҙолоуына килтерә. Табип теш эмален нисек һаҡларға кәрәклеген өйрәтәсәк.

**Венера БУРАНШИНА,**
**теш табибы.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

**Был йөмөро емештең исеме латин телендәге "гранатус" һүҙенән килеп сыҡҡан, һәм ул "бөртөктәр" тигәнде аңлата. Гранаттың ҡаты ҡабығы аҫтында урынлашҡан һутлы рубин бөртөктәре үтә күренмәле, гүйә, эстән нурланған ялтырауыҡ ҡиммәтле таштар һибелмәһе. Ҡыҙыл төҫтәге минералға - ҡиммәтле гранат ташына исем биреүгә нәҡ ошо емеш бөртөктәре сәбәпсе була ла инде.**



# МӨҒЖИЗӘЛЕ ГРАНАТ БӨРТӨКТӘРЕ...

## ашҡаҙанға ла, баш ауыртыуына ла килешә

Гранат - кешелек ҡулланған тәүге емештәрҙең береһе. Үҫемлектең тыуған ере тип Персия иҫәпләнә. Әммә быны иҫбатлаған аныҡ ҡына дәлилдәр юҡ. Шуныһы бәхәсһеҙ, гранат - Азия емеше. Боронғо дәүерҙәрҙә үк ул Урта Диңгеҙ, Һиндостан һәм Мысырҙа тарала. Боронғо Мысырҙа һәм Вавилонда гранаттың мөғжизәле үҙенсәлеккә эйә икәнлеген белгәндәр. Вавилондар, яу алдынан гранат бөртөктәрен сәйнәгән кешене дошманы шәйләмәйәсәк, тип иҫәпләгән. Ә боронғо Мысыр фирғәүендәрен ерләгәндә кире әйләнеп ҡайтыу мөмкинлегенә өмөт билдәһе итеп эргәләренә гранат емештәре һалғандар. Шәреҡтә элекке заманда уҡ гранатты йөҙөм һәм инжир менән бер рәттән баһалағандар. Ҡөрьәндә гранат өс тапҡыр телгә алына ("әл-Әнғәм" сүрәһе, 6/99; "әл-Әнғәм" сүрәһе, 6/141; "әр-Рахман", 55/68) - икеүһендә Аллаһы Тәғәләнең бар нәмәне барлыҡҡа килтереүе тураһында миҫал килтерелә, һәм бер тапҡыр уның Йәннәт баҡсаларында үҫеүсе емеш икәнлеге әй-

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# МИҘГЕЛ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ...

## йәшәргә ҡамаусаламаһын

**Миҙгелдәр алышыныуы организмға төрлөсә тәьҫир итә. Күҙ көндөң ҡыҫҡарыуы, әсе ел йә ямғырҙар ваҡытында һалҡын тейеүе, кәйеф булмауы урынлы ла кеүек, ә яҙ, бар тәбиғәт йоҡоһонан уянғанда, ни өсөн беҙ йышыраҡ ауырыйбыҙ һуң?**

### Аһ, был биоритмдар!

Беҙҙең бөтә тормошобоҙ тәүлек һәм миҙгел биоритмдарына бәйләнгән. Биоритмдарға Ер йөҙөндәге бар тере йәндәр ҙә буйһона, шуға ла ваҡыты-ваҡыты менән һаулыҡ торошо, интеллектуаль мөмкинлектәр, кәйеф үҙгәреп тора. Бында барыһына ла ҡандағы гормондар йыйылмаһы ғәйепле. Һуңғы йылдарҙа хронобиологтар миҙгел гормональ циклдарҙы өйрәнеү менән мәшғүл, улар, мәсәлән, баш мейеһендә биологик сәғәттәрҙең нормаль эшен тәьмин итеүсе үҙәк барлығын асыҡлаған.

Ҡыш һәм йәй - сағыштырмаса тотороҡло осор. Ә бына көҙ һәм яҙ организм икенсе төрлө эшләй башлай: яҙ - матдәләр алышыныуы шәбәйә, күҙәнәктәр әүҙем үҫешә, шул уҡ ваҡытта эске ағзалар эше өйрәнелгән тәртиптән ситкә сыға. Һөҙөмтәлә - төрлө сирҙәр, бигерәк тә гастрит һәм сей яралар ҡиҫкенләшә.

Яҙ аш һеңдереү системаһы әүҙемерәк эшләй, ә һаклаусы ферменттар аҙыраҡ бүленә. Етмәһә, кеше был осорҙа йыш борсола икән, ул үҙен икеләтә хәүефкә дусар итә. Депрессия һәм насар кәйефте хронобиологтар шулай уҡ миҙгелгә бәйле биологик сәғәттәрҙең боҙолоуы менән бәйләй.

### Рәсми сығанаҡтарҙан

Рәсми медицина яҙғы проблемаларҙы биоритмдарға япһарырға ашыҡмай. "Ысынлап та, яҙ күп ауырыуҙар ҡиҫкенләшә, әммә быға аңлатма табырға була", - ти улар.

1. Ресурстар етешмәүе. Оҙон ҡыш буйына организмда "ныҡлыҡ запастары" тотонолоп бөтә, ә уларҙы әлегә бер нәмә менән дә тулыландырыу мөмкин түгел. Хәлһеҙлек һәм иммунитеттың көсһөҙләнеүе ошонан.

2.Гиподинамия. Беҙ бер нисә ай буйына бөтөнләй тиерлек ҡыбырламай, батареялар менән йылытылған бүлмәләрҙә ултырҙыҡ. Һөҙөмтәлә - апатия, һүлпәнлек, мускулдар һәм быуындар һыҙлауы.

3.Ҡояш радиацияһы. Яҙ ул әүҙемләшә, уның менән бергә беҙҙең эмоциональ ярһыусанлыҡ та үҫә.

4.Атмосфера баҫымының ҡиҫкен үҙгәреүе. Баш ауыртыуы, үҙенде насар тойоу, гипотония һәм гипертония ошоноң менән бәйле.

5.Яҙғы һауа торошоноң үҙгәреп тороуы. Урамда йә ҡапыл йылыта, йә кире һыуыта. Ә бына йылытыу менән барыһы ла ҡышҡы кейемдәрен сисергә ашыға, шуға ла һалҡын тейҙереп ауырыусылар күбәйә.

6.Авитаминоз - ул яҙҙың юлдашы икәнен онотorға ярамай.

### Һаумы, һағыш!

Күбебеҙ яҙ артыҡ борсолоусан булып китә, күңелдә әллә ниндәй һағыш биләп ала, алда - билдәһеҙлек... Эш нимәлә һуң?

Әлбиттә, организмда барған үҙгәрештәр психикаға ла йоғонто яһамай ҡалмай. Ҡыш мейенең информацияны ҡабул итә торған өлөшө әүҙемләшә, ә ҡарар ҡабул итеү әкренәйә. Яҙ - тап киреһенсә. Шуға ла яҙ эшмәкәрлек һиҙелерлек түбәнәйә, йоҡо килә, бар нәмәгә лә битараф була башлайһың.

Миҙгел депрессияһы 20-30 йәштә башлана, ирҙәргә ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙҙар уға 2-3 тапҡыр йышыраҡ бирелә. Барыһына ла көндөҙгө яҡтылыҡтың үҙгәреп тороуы сәбәпсе. Ҡояш яҡтыһы беҙҙең кәйефкә, һаулыҡҡа тәьҫир итә: ул күҙҙең селтәрле ҡабығынан гипоталамусҡа барған нервы импульстарын уята. Ә гипоталамус, үҙ сиратында, кәйефте, йоҡоно, аппетитты һәм гормондар кимәлен көйләүсе булып тора. Тимәк, ҡояш нурының етмәүе йәки кәрәгенән артыҡ булыуы психологик проблемаларға килтерә, тик был күңелһеҙлек яҡтылыҡ менән бәйле үҙгәрештәр ҡапыл булһа һәм организм уларға әҙерләнеп өлгөрмәһә генә була.

Ҡайһы бер белгестәр яҙғы проблемаларҙың барыһын да характер үҙенсәлектәренә бәйле, тип иҫәпләй. Оптимист тышта ҡар яуғанда ғына түгел, таш яуғанда ла "яҡтылыҡ күрә", пессимисҡа ҡояш та ҡамасаулауы ихтимал. Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда хис-тойғоға тиҙерәк бирелә, шуға ла яҙ уларҙың кәйефе үҙгәреп тороусан була.

Миҙгел депрессиялары, ҡағиҙә буларак, оҙаҡҡа һуҙылмай. Әгәр бер йәки ике аҙна һеҙҙе күңелһеҙ уйҙар борсой икән, быға артыҡ иғтибар бирмәгеҙ. Тиҙҙән тормош тағы ла икенсе - сағыуыраҡ төҫтәр менән балҡыясаҡ.

**Әйткәндәй...**

**Иртәнсәк уянғас та контраст душ инегеҙ, ятраҡан көйөгөҙ аҫтында бер-ике күнегеү эшләп алығыҙ. Сағыуыраҡ кейемдәр һайлағыҙ. Эшегеҙ йыраҡ түгел икән, унда йәйәү барығыҙ. Иртәнге саф һауа күңел көрлөгө, дәрт, күтәренке кәйеф өҫтәйәсәк. Эш көнө дауамында һәр сәғәт һайын бәләкәй генә тәнәфес яһап алығыҙ. Хеҙмәттәшегеҙ менән сәй эсеп алырға, һөйләшергә, коридор буйлап йөрөп алырға була. Татлы аҙыҡ ашағығыҙ килә икән, ашағыҙ. Яҡшы кәйефте ҡайтарыу өсөн бер банан йәки аҙ ғына шоколад та етә, сөнки улар составында тәбиғи антидепрессант - триптофан бар. Бер нисә солярий сеансы алығыҙ - кәйеф тә күтәреләсәк, тирегеҙҙең төҫө лә яҡшырасаҡ. В төркөмө витаминдары нервылар системаһы эшен яйға һала, ярһыусанлыҡты баҫа, тире һәм сәс торошон яҡшырта. Күберәк ит, сыр, эремсек, шыттырылған бойҙай, укроп, сельдерей, петрушка ашағыҙ. Яҙ диетаға ултырмағыҙ.**

**Әлморон, ҡара ҡарағат, һырғанаҡ, цитрус емештәре, тоҙло кәбеҫтә организмды С витаминына байытасаҡ.**

**Мунсаға йышыраҡ йөрөгөҙ, үлән сәйҙәре эсегеҙ.**

телә. Мәсәлән, "әл-Әнғәм" сүрәһендә: "Ул - Күктән һыу төшөрҙө һәм һыу арҡаһында Беҙ төрлө нәмәләрҙе үстерҙек; Беҙ шул һыуҙарҙан үсемлектәр үстерҙек, уларҙан теҙелеп ултырған орлоҡтар сығарасаҡбыҙ; һәм хөрмә ағасынан емешле тәлгәштәр; һәм йөҙөм ағасынан баҡсалар сығарабыҙ; һәм зәйтүнде һәм анарҙы - оҡшаш һәм оҡшаш түгелдәрен. Емеш биргән саҡта быларҙың емештәренә һәм уларҙың өлгөрөп бешеүҙәренә ҡарағыҙ!"

Изге Китапта гранат юҡҡа ғына телгә алынмай. Бик үк бейек булмаған был ботаҡлы ағасты тәрбиәләүҙә әллә ни иғтибар кәрәкмәй, ул тупраҡҡа талымһыҙ, елгә сыҙам, оҙайлы эҫе йәйгә лә, ҡышҡы 9-12 градус һалҡындарға ла бирешмәй һәм йәшел япраҡтары араһында алһыуланып күренгән сәскәләре, артабан сөм-ҡыҙыл төҫтәге фонарға оҡшаш емештәре менән ҡыуандырып, йыл һайын уңыш бирә.

Гранаттың һутлы бөртөктәре тәмле лә, шифалы ла. Уны медицинала беҙҙең эраға тиклем үк ҡулланғандар. Гиппократ ашҡаҙан ауыртҡанда - гранаттың һутын, ә эс киткәндә - ҡабығын ҡайнатып эсергә, шунын менән тән яраларын да йыуырға тәҡдим иткән. Ғәрәптәр элек-электән гранат менән ашҡаҙан-эсәк юлдарын һәм баш ауырыуҙарын дауалаған.

Бөгөн дә был үсемлектең төрлө өлөшө күп ауырыуҙарға шифа булып тора.

Бер гранат емеше ашаған кеше үҙенең бер тәүлеккә тейешле С витаминына булған ихтыяжының 40 процентын ҡәнәғәтләндерә. Гранат емештәре тимергә ифрат бай, шуға ла табиптар уны аҙ ҡанлылыҡ менән яфаланыусыларға тәҡдим итә. Шулай уҡ был емештә ҡан яһауҙа ҡатнашыусы эритроциттар һәм лейкоциттарҙың барлыҡҡа килеүен әүҙемләштереүсе фолий кислотаһы ла бар. Гранат - йөклө һәм бала имеҙеүсе ҡатындар өсөн бик мөһим аҙыҡ, сөнки фолий кислотаһы баланың нормаль үсешенә булышлыҡ итә.

Гранаттың әскелтемтәмле һуты аппетитты аса, ашҡаҙандың эшкәртеү һәм аҙыҡты үҙләштереү һәләтен көйләй, шуға ла был емеште аш алдынан ҡулланалар. Гранат десерт өсөн дә бик ҡулайлы емеш.

Йүткереү, һалҡын тейеү, тапма тотоу осраҡтарында ла гранат емештәрен ҡулланыу тәҡдим ителә. Гранат һуты тапма биҙгәге мәлендә сарсауҙы баҫа һәм бер үк ваҡытта температура төшөүгә булышлыҡ итә.

Халыҡ медицинаһында татлы гранат һутын бөйөр ауырыуҙары осрағында, әскелтемен - бөйөрҙә һәм үт ҡыуығында таш булғанда файҙаланалар.

Гранаттың емеше лә, ҡабығы ла танин тигән үҙенсәлекле матдәгә бай. Танин микробтарға, ялҡынһыныуға ҡаршы торосанлыҡты арттыра, тән яраланған, бешкән осраҡта тиҙ уңалтыу һәләтенә эйә. Шуға ла ул теш ҡаҙнаһы зарарланғанда, тамаҡ шешкәндә, шеш эренләгәндә бик файҙалы.

Гранат һуты һәм ҡабығын ҡайнатып алған һыу - дизентерия ауырыуҙарына ҡаршы алыштырғыһыҙ дауа, косметологияла тән тиреһе тартылыуы өсөн ҡулайлы сара булараҡ та әһәмиәтле.

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ НИГЕҘЕ

## Ысын атай-әсәй булыр өсөн, ысын кеше булырға кәрәк

- Һуңғы кәңәш ошолай яңғырай: үҙенә аҙналыҡ отпуск ойоштор, - тип һүҙен дауам итте ағайым.

- Былдай отпусктар хәҙерге заман эшлекләләр донъяһында популяр булып китте, бугай.

- Эйе, әммә мин һиңә был ялды үткәреүҙең бүтәнсәрәк, һөҙөмтәлерәк ысулын тәҡдим итмәксемен. Элекке заманда аҙнаның етенсе көнө шаббат тип аталған. Был көндө, йола булараҡ, ғаилә менән бергә үҙенең шәхси тормошона арнап уҙғарғандар. Шаббатта кешеләр көсөргәнешле эш аҙнаһынан һуң ял итә һәм бер көн булһа ла тормошто бар тулылығында тойоп үткәрә алған. Үкенескә ҡаршы, заман тиҙлеге арттан һайын, был матур традиция онотолған. Уның менән бергә кешеләр был көн биргән мөмкинлектәрҙе лә юғалтҡан. Мин һине был йоланы үҙеңдең тормошоңда яңынан ҡайтарырға саҡырам. Аҙнаһына алты-ете сәғәтте бығә тиклем ваҡыт етмәгән ҡыҙыҡһыныуҙарыңа бағышла. Был аҙнаның һуңғы көндәренең береһе, йә булмаһа, үҙеңә уңайлы булған берәй көн булыуы мөмкин. Әйтәйек, һин шишәмбе йәки кесаҙнаны шаббат, тип билдәләнең икән, ти. Тормошоңдоң бер генә аҙнаһы ла үҙенә аҙ ғына булһа ла һөйөү бүләк итә алырҙай ошо байрам көнһөҙ үтмәһен.

- Миндә шундуҡ ике һорау тыуҙы. Беренсеһе - был көндә мин яңғыҙ үткәрергә тейешменме, һәм икенсеһе - уны мин нимәгә бағышларға тейеш?

- Әлбиттә, был көндә һин яңғыҙ үткәрергә тейешһең. Был - һинең көн, һин уны уйланып үткәрә алаһың, йә булмаһа, ысынбарлыҡтағы йәшәйешкә бағышлай алаһың. Был урманда яңғыҙ йөрөп килеү ваҡыты. Был битеңдә елдең наҙлы һулышын тойоу мөмкинлеге. Был, ниһайәт, туктап, бер ҡайҙа ла ашыҡмайынса, урамдағы музыканттың



уйнауын тыңлай алыу мөмкинлеге. Был көндә һин китап магазины көштәләре араһында ҡаҙына алаһың. Буш паркта ялан аяҡ бейеү башҡарып өйөрөлә алаһын. Был ғүмереңдең ахырынаса һәр аҙна һайын тулы тормош менән йәшәй алыу мөмкинлеге.

- Тимәк, был аҙна һайын үҙ-үҙемә бүләк иткән отпуск булып сыға түгелме?

- Тап шулай. Был һинең аҙна буйы һөҙөмтәле хеҙмәтең өсөн бүләк. Ошо бүләк арҡылы һин үҙеңдә бәхетле, сәләмәт, энергиялы, ирекле һәм шаян итеп тоясаҡһың. Был файҙалы итеп ваҡыт үткәреү өсөн бик яҡшы ысул. Был үҙеңде тағы ла яҡшыраҡ әсәй, бизнес-леди һәм ябай ҡатын булырға ярҙам итеүсе сығанаҡ булып тора.

- Беләһеңме, былдай отпуск минең өсөн ысын могжизәгә тиң. Ниһайәт, был тормошта минең өсөн ниндәй ҙә булһа йыуаныс табыласаҡ. Беренсе отпускымды бөгөн үк алырмын, тип уйлайым. Тәүҙә мин массаж эшләтәм. Унан һуң берәй тәбиғәт ҡосағына барып, үҙемдең журналымды тултыра башлаясаҡмын. Был мөғжизәле иртәне күптән түгел йылға буйында асылған яңы ресторанда йәшелсәнән торған иртәнге аш менән тамамлаясаҡмын. Әйт әле, был буш көнөмдә мин тағы ла нимәләр эшләргә тейешмен?

- Минеңсә, һин былай ҙа барыһын да аңланың. Был көндә хәрәкәтләндерә торған уйындарға, бейеүҙәргә, уйланыуҙарға, рухи аҙыҡ туплауға ҡулланып һәм был тормоштоң мөғжизәле мәлдәренә ҡыуанып үткәр. Шулай уҡ һин үҙеңдә рәхмәтле булыу тойғоһон үстерә алаһың. Бер ни тиклем ваҡытыңды журналыңа тормошоңдағы фатиха алған мәлдәреңде яҙып сығырға бағышла. Шуны онотма: нимәгә иғтибарыңды йүнәлтәһең, шул һинең алдыңда әһәмиәт алыуға һәләтле, ә бөгөн һинең ниндәй уйҙар менән йәшәүең артабанғы яҙмышыңды билдәләй. Тормоштағы бар яҡшылыҡҡа иғтибарлыраҡ күҙ һалыуың да етә, яҡшылыҡ үҙенән-үҙе артасаҡ. Тормоштағы ғазаптар - ул бары тик был донъя ысынбарлыҡта ниндәй бар һәм беҙ уны нисек күрергә теләүебеҙ араһындағы айырма ғына.

Был тормоштағы һәр яҡшы мәлдәргә рәхмәтле булырға һәм шул уҡ ваҡытта бүтәндәр яҙмышына көнләшеп ҡарамаҫҡа өйрән. Шунан рухи ҡәнәғәтләнеү аласаҡһың. Үҙеңдә ысын күңелдән рәхмәтле булыу һәм яҡшыға өмөт тойғоһон һүндермәҫкә тырыш. Хыялың буйетмәҫлек юғары булһын, әммә бер ваҡытта ла ерҙә баҫып тороуыңды онотма. Ниндәй юл һайлауың түгел, ә уның ҡайҙа алып килеүен иҫеңдә тот. Быларҙың барыһын да ысынлап аңлаған, ғаләмдәге бар нигмәттәр һинең өҫтөңә муллыҡ булып ишелеп төшәсәк. Миңә Цицерондың ошо һүҙҙәре бигерәк тә ныҡ оҡшай: "Рәхмәтле булыу - бөйөк изгелек кенә түгел, ә ҡалған бөтә нәмәнең әсәһе лә".

**Робин ШАРМА.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Эште башлар алдынан уның тамамланыу ваҡытын билдәлә

Тамамланыу - ул ҡырағай аттарҙы өйөргә туплауға тиң. Ул һинең идеяларыңды алда өлгәшәсәк маҡсаттар рәүешендә формалаштырырға ярҙам итеүсе әлегә ят тойолған тәьҫораттар, уйҙар һәм аныҡ сикле тойғолар менән уратып алынған. Күп кешеләр ниндәй ҙә булһа берәй проектка уның аҙағын, тамамланыу нөктәһен күрмәйенсә тотоноп китә алмай. Эштең тамамланыу срогы билдәләнмәгән маҡсат - ул бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаясаҡ маҡсат. Ә тамамланмаған проекттар үҙенә ҡарата ышанысты кәметә. Билдәләнгән срок алдыңа алған эште ҡасан бөтөрөргә тейешлегеңде белдереп тора. Һуңғы срокты билдәләмәһәң, буталсыҡ уйҙар һәм һөҙөмтәһеҙ эшмәкәрлек донъяһына сумаһың. Эште тамамлау срогын дөрөҫ планлаштырыу бик мөһим. Был һиңә маҡсатыңды тоҫмаллауға ярҙам итә, һәм ваҡытты көйгә һалырға, һәләтеңде асырға, ресурстарҙы дөрөҫ файҙаланырға булышлыҡ итә.

Һуңғы срок тигән сикләү аша энергияңды үҙең өсөн әһәмиәтлерәк булған шөғөлдәргә йүнәлтәһең. Бер ҡалаҡ бал күлгә түгел, бер сынаяҡ сәйгә тәм бирә, шуның кеүек беҙҙең тырышлыҡтарыбыҙ ҙа мөмкинлектәребеҙгә тап килерлек йүнәлештә булырға тейеш. Әгәр ҙә был йәйҙә дәрестәрҙән азат булғың килә икән, тимәк, алдағы аҙнала тикшереү эштәре һәм уны яҙма рәүештә әҙерләү менән мәшғүл булырға тейешлегеңде билдәлә. Бүтән төрлө шөғөлдәргә иғтибарҙы йүнәлтеү һине талымһыҙландырыр һәм маҡсатыңдың аныҡ һыҙаттарын тоноҡландырыр ине. Әммә бер аҙнанан эште тамамлауҙың һуңғы срогы етеүенән һәм мөһим эште атҡарып сығыуҙан сикһеҙ ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәһең һәм һуңынан рәхәтләнеп киләһе проектка тотона алаһың.

Ваҡыт менән идара итеү буйынса эксперттар әйтеүенсә, үҙең һайлаған срок - иң яҡшыһы. Үҙеңә уңайлы булған һуңғы срокты билдәләп, был ваҡытты һөҙөмтәле файҙаланасағыңды аңлаясаҡһың. Ә инде был срокты бүтәндәр билдәләй икән, һин аңһыҙ рәүештә уларға ҡаршылыҡ күрһәтәсәкһең һәм ризаһыҙлыҡ кисерәһең. Был осраҡта ла һин үҙең һайларға тейешһең. Әгәр ҡуйылған заданиены бөтә көсөңдә һалып үтәргә тырышып, проблеманы хәл итәһең икән, был тырышлығың үҙ һөҙөмтәһен бирә - һин сикһеҙ ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәсәкһең.

Тормошта нимәгә өлгәшергә теләр инең? Был донъяла нисек итеп айырылып торорға теләр инең? Амбицияңдың ни тиклем ҙур йәки бәләкәй булыуы мөһим түгел - бөгөндән үк алдыңа маҡсатыңа ярашлы бурыстар ҡуя башла һәм уларҙың баш-ҡарылыу ваҡытын билдәлә. Шуны иҫтә тот: һуңғы срок ҡуя белеү, тимәк, сикһеҙ уңышҡа өлгәшеү.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ТАШТАРҘАН...

## мөғжизә тыуҙыралар бында

**Мин Сибай ҡалаһының политехник колледжында инглиз теле уҡытыусыһы булып эшләйем. "Киске Өфө" гәзитендәге "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсын ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам. Ошоға оҡшаш конкурсты илһөйәр студенттар менән беҙ ҙә башлап ебәргәйнек, тик ул үҙебеҙҙең яҡтың тәбиғәт объекттарына бағышланып, "Урал аръяғының ете мөғжизәһе" тип аталғайны.**

Башҡортостанда бөгөнгө көндә рәсми рәүештә билдәләнгән 82 тәбиғәт һәйкәле бар, уларҙың 24-е - Урал аръяғында. Баймаҡ районында, Ирәндектең көнбайыш һыртында урынлашҡан Талҡаҫ күлен, көнсығыш һыртындағы Яманташ тауындағы Ғәҙелша шарлауығын, Учалы районының Ауышкүл күле янындағы Әүлиә тауын, кеше ҡулдары төҙөгән мөғжизә - тәрәнлеге 500 метрға, диаметры 2 саҡрымға еткән Сибай карьерын, Сибай ҡалаһынан 60 саҡрым йыраҡлыҡта ятҡан Арҡайым ҡаласығын, Бөрйән районында урынлашҡан Шүлгәнташ мәмерйәһен студенттар Урал аръяғы мөғжизәһе исеменә лайыҡ тип тапты. Ә етенсе мөғжизә исеменә беҙ сығарылыш студенттарының таштан яһаған эштәрен тәҡдим иттек. Улар барыһы ла, нигеҙҙә, йәшмәнән эшләнгән.

### "Балыҡсы айыу" композицияһы



Ғатауллина Регина эше. 13 сантиметр бейеклегендәге балыҡсы айыу күп итеп балыҡ тотоуына шатланып йылмая (тел - джамбуль халцедоны, ауыҙ ҡыуышлығы - кремний). Айыу үҙе йәшмәнән, ул яр буйында - эшкәртелмәгән йәшмәлә баҫып тора. Уның янында балыҡтар һәм ямғыр селәүсендәре (джамбуль халцедоны) ята, ҡулындағы ҡармаҡ - ташҡа әйләнгән ағастан, ә ҡармаҡ ҡалҡыуысы кремний (аҡ өлөшө) һәм йәшмәнән (ҡыҙыл өлөшө) эшләнгән.

### "Татлы Башҡортостан" композицияһы



Таҡтаева Гөлнур диаметры 12 сантиметрлыҡ тәрилкәгә Башҡортостан картаһы формаһында "кәрәҙле бал" һалған: кәрәҙ һәм бал һары һәм ҡара йәшмәнән, тәбиғи зурлыҡтағы бал ҡорттары ҡара йәшмәнән, уларҙың ҡанаттары тау гәлсәренән, аяҡтары көмөш ептәрҙән, уларға алтын ялатылған, күҙҙәре шаранбай йәшмәһенән. Өфө һәм Сибай ҡалалары йәшел аҡыҡтан.

### "Гөлләмә" панноһы



Был ялан сәскәләре гөлләмәһенең авторы Кристина Ҡотлоева. Бында бөтә нәмә лә таштан яһалған: фон - йәшмәнән, ваза - юлбарыҫ күҙенән, ҡынғырауҙар - чароиттан, күк сәскә - лазуриттан.

**Рәмилә ЗЫЯҠАЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## ХОККЕЙ

# ЮЛАЕВСЫЛАРҘЫҢ...

## баш тренеры кем?

**Хоккей буйынса донъя беренселеге башланыр алдынан Рәсәй йыйылма командаһының баш тренеры Вячеслав Аркадьевич Быков ЦСКА-нан "Салауат Юлаев" командаһына күсеүе тураһында белдерҙе. Рәсми рәүештә рәҫланған информацияға ҡарағанда, уға йылына өс миллион долларға контракт тәҡдим ителгән.**

Хәҙер хоккей буйынса донъя чемпионаты башланды ла инде. Унда төрлө һынауҙар илләгенән үткән иң көслө 16 йыйылма команда көс һынаша.

Тәүге уйындар дүрт төркөмгә бүлеп үткәрелә. Рәсәй командаһы икенсе төркөмдә Германия, Щвейцария һәм Франция хоккейсылары менән уйнаясаҡ.

Рәсәй йыйылма командаһында 6 юлаевсы уйнай. Бүтән клубтарҙан йыйылма командаға берәр-икешәр (быйылғы чемпион "Аҡбарыҫ"тан ғына өсәү) уйынсы булыуы, юлаевсыларға ышаныслы ни хәтлем ҙур булыуын күрһәтә. Һаҡсы Олег Твардовскийҙың вице-капитан итеп ҡуйылыуы быны йәнә бер тапҡыр раҫлай.

Донъя беренселегенең Плей-офф серияһы 6-10 майҙа үтәсәк. 6-7 майҙа сирек финал, 8 майҙа ярым финал, 10 майҙа финал. Бары тик шул көндә генә ҡайһы ил командаһының чемпион булыуы, алтын миҙал алыуы асыҡланасаҡ.

Әле Рәсәй командаһы ғәмәлдәге донъя чемпионы сифатында уйнай. Был юғары һәм почетлы титулды үҙенә һаҡлап ҡалыуы, әлбиттә, Рәсәй хоккейсыларына еңел булмаҫ. Шул уҡ ваҡытта йыйылма командаһың һәм "Салауат Юлаев"тың баш тренеры Вячеслав Быков етәкселегендә улар йәнә алтын миҙал яулап алыу өсөн көстәрен йәлләмәйәсәк, бар оҫталыҡтарын һалып уйнаясаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ҺӘҮӘҪКӘР ТЕАТРҘАР...

## ярышҡа сыға

**Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге Ғафури районы хакимиәте менән берлектә Беренсе Төбәк-ара "Алтын тирмә" милли театрҙар фестивален үткәрә.**

Фестиваль һәүәҫкәр театр сәнғәтен пропагандалау һәм уны артабан үҫтереү маҡсатында уҙғарыла. Фестивалдең тәүге һайлап алыу туры 2009 йылдың февраль-май айҙарында раҫланған график буйынса төбәктәрҙә үтһә, икенсе туры 13-16 майҙа Ғафури районының Красноусол шифаханаһында, район мәҙәниәт йортонда һәм Үтәк ауылында уҙа. Фестивалдең йомғаҡлау турында Башҡортостан Республикаһының, Силәбе һәм Ырымбур өлкәһенең, Татарстан, Марий Эл республикаларының театр коллективтары ҡатнаша. Конкурсанттарға Гран-при, беренсе, икенсе, өсөнсө дәрәжә лауреат исемдәре бирелә, шулай уҡ режиссерҙар, рәссамдар, актерҙар, тауыш операторҙары махсус дипломдар, дәртләндереү призлары менән бүләкләнәсәк.

**Белешмәләр өсөн 450071, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72-се һанлы йорт адресы буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенә мөрәжәғәт итергә. Телефондар: (347) 272-53-25, 8-927-320-64-42 - Ҡалмырҙина Тәнзилә Сәғит ҡыҙы.**

**Ойошторою комитеты.**

## ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ШУНДАЙ АСЫШТАР...

✦1600 йылда милли гимн сыға башлай. Был идеяны швейцарҙар уйлап сығара. "Аллаһым, батшабыҙҙы һаҡла" -1740 йылда, ә "Марсельеза" 1792 йылда яҙыла.

✦1607 йылда беренсе көй яҙыла. Монтеверди биш нотала "Орфей" тип аталған беренсе операһын яҙа.

✦1653 йылда Парижда почта йәшниге уйлап сығарыла.

✦1779 йылда инглиз Абрахам Дэрби тарафынан суйындан беренсе металл күпер эшләнә, ул Северн йылғаһының ярҙарын тоташтырып тора.

✦1783 йылда һауа шары уйлап сығарыла. Уның беренсе пассажирҙары әтәс, һарыҡ һәм өйрәк була.

✦1797 йылда парашют уйлап табыла. Парижда 27 йәшлек Андре Гарнеран беренсе булып бер ниндәй ҡурҡыуһыҙ уның менән һикерә.

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Февраль башынан 31 мартҡа тиклем 2009 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Хаҡтар - элеккесә, ярты йылға 294 һум 84 тин. Ә кемдәр быйылғы йылдың тәүге яртыһына яҙылмай ҡалған, улар 17 апрелгә тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе майҙан алдыра башлаясаҡ. Индексыбыҙ - 50665. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә еңеүҙәр яулайыҡ!***

Ф. СП-1

АБОНЕМЕНТ на газету Киске Өфө

(индекс издания) 50665

Количество комплектов

на 2009 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | X | X | X | X | X | X |

Куда (почтовый индекс)

Кому

Ф. СП-1

ДОСТАВОЧНАЯ КАРТОЧКА

ПВ место Литер

газету (индекс издания) 50665

Киске Өфө

| Каталожная цена | | Подписная цена | Количество комплектов |
|---|---|---|---|
| Местная цена | | 294.84 | |

на 2009 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | X | X | X | X | X | X |

Куда (почтовый индекс)

Кому

*Күңелһеҙ кешеләрҙе тыңлап, өмөтһөҙ әҙәмдәрҙе төҙәтергә тырышып, алтын ваҡытыңды әрәм итмә. Был - ауырыу маҡсаттар һәм алдатҡыс ынтылыштар.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЙӘШТӘР ТЕЛЕНДӘГЕ МӘҘӘК ҺҮҘ ҘӘ...

## киләсәккә өмөт тыуҙыра


“XX Централ”

**Баш ҡалабыҙҙа бишенсе тапҡыр "Шаян-уйын" Республика йәштәр һәм көлкө фестивалы үтте. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған йәштәр тапҡырлыҡта һәм шаянлыҡта көс һынашты. Быштыр "Шаян уйын"да йөмғеһе егерме ике команда ҡатнашһа, быйыл иһә иң көслө ун бер команда көс һынашты. Бәйге башлыса студенттар, йәштәр командалары араһында барҙы, әммә унда өс мәктәп командаһы - М. Кәрим исемендәге 158-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының "Кендектәр" һәм Сибай башҡорт гимназия-интернатының "Кендек" командаһы ла ҡатнашты.**

БР Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы, "Йәшлек" һәм "Өмет" республика йәштәр гәзиттәре, Башҡорт йәштәре иттифаҡы, "Азатлыҡ" татар йәштәр берлеге ойошторған был күнелле сараның әһәмиәте, һис һүҙһеҙ, бар. Йәштәр араһында берҙәмлек булдырыуға көс һалына, дуҫлыҡ күпере нығытыла. Ә шулай ҙа ошондай мөһим сараны Александр Масляковтың КВН-ы кимәленә күтәреү тураһында ла уйларға кәрәк беҙгә. Кемдәр генә сығыш яһамай ул бар халыҡ яратып тамаша ҡылған Мәскәү КВН-ында, ә Башҡортостандан бер генә команда ла унда ҡатнашыу хоҡуғына эйә була алғаны юҡ әле.

Шуға ла "Шаян уйын"да ла, "Шаяниум" һәм башҡа ошондай юмор сараларында ла ҡабатлана килгән бер нисә етешһеҙлеккә күрһәтеп үтке килә. Бына, мәҫәлән, "Шаян-уйын"дың бер маҡсаты - башҡорт һәм татар телен пропагандалау ине. Тәүҙән үк шуны әйтке килә: бөтә командалар ҙа был маҡсатҡа етди ҡарамаған, күптәрҙең рус телен ҡыҫтырып һөйләүҙе сәхнәлә лә нормаға әйләндерергә матаҡшыуы ҡәйефте ҡырҙы. Етмәһә, бар сығыштар ҙа тиерлек сит ил йә рус музыкаһы озатыуында бара. Был тәңгәлдә конкурстан тыш сығыш яһаһалар ҙа Силәбе өлкәһенән килгән "Төньяҡ амурҙары" командаһын өлгө итеп ҡуйырға булыр ине. Улар милли үҙенсәлек, башҡорт милли кейемендә булыуы һәм саф башҡортса сығышы менән барыһынан да айырылып торҙо.

Юмор темаһының тарлығы ла йылдан-йыл үҙен һиҙҙерә. Башҡорт командалары араһында эстрада йырсыларын - Наил Сырлыбаев, MC Фил, Анжелика, Илгиз Абдрахманов һәм Радик Юлъяҡшин кеүек йырсыларҙы эләкләү гәҙәткә ингән. Берәүҙәргә был, бәлки, ҡыҙыҡтыр, әммә ул йырсыларҙың ижады менән таныш булмағандарға быныҥ бер ҡыҙығы ла юҡ. Мәҫәлән, яныңда ултырған бер ҡыҙ тамаша буйы Наил Сырлыбаевтың кем булыуы хаҡында һорап сыҡты. Бер ҡалыпҡа һалынған артистар хаҡындағы тоҙһоҙ юморҙар урынына йәмғиәтебеҙҙәге төрлө күренештәргә, сәйәси проблемаларға, етешһеҙлектәргә ҡағылған мәҙәктәрҙе сәхнәләштереү урынлыраҡ булыр ине.

Йәштәр һәм балалар ауыҙынан "билдән түбән" мәҙәктәр ишетеү бигерәк йәмһеҙ күренеш. Бындай сығыштар башлыса Камеди клаб, урыҫ КВН-ына эйәреп эшләнә. Үҙ милләтебеҙгә хас юморҙар ҙа тулып ята ла бит тормошобоҙҙа. Йәштәр уларҙы тыңларға өйрәнмәгән әле. Әлбиттә, командалар сығыштары араһында халыҡсан юморҙар ҙа ишетелеп ҡалды. Был йәһәттән "Горняк дозор" һәм "Бурзой" командалары маҡтауға лайыҡ.

Ә былай... Барыһы ла ул тиклем насар түгел. Иң мөһиме, йәштәр һәм балалар үҙ туған телендә шаярта белә, мәҙәк һүҙ һөйләй. Тимәк, киләсәккә өмөт бар. Бигерәк тә Өфө балаларының, мәҫәлән, Фатима Мостафина исемендәге Өфө ҡала башҡорт гимназияһының "XX Централ" командаһы балаларының саф башҡорт теле һоҡландырҙы. Улар бар яҡтан оҫтарып бөткән, башҡа командаларҙағы ағай-апайҙарын да уҙҙырып ебәрҙеләр. Хореографиә ла юғары кимәлдә, тауыш та яҡшы ҡуйылған. Сығыштарының йөкмәткеһендә лә илебеҙҙәге сәйәси һәм социаль хәлдәргә ишара бар. Шуға ла улар лайыҡлы рәүештә "Шаян уйын" кубогын һәм гранпри бүләген яуланы. Ә команда ағзаһы Йәмилә Ғәйетбаева "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ" бүләгенә лайыҡ булды.

Беренсе урын Учалынан "Горняк дозор" һәм Саҡмағоштан "Зур борынпар" командаларына, икенсе урын Өфөнән "Кендектәр"гә, өсөнсө урын иһә Мәләүездән "Ипотека" һәм "Философия" командаларына бирелде. "Ипотека"ға - "Йыл асышы", Бөрйәндән "Бурзой"ҙарға -"Үҙенсәлекле юмор", Стәрлетамаҡтан килгән командаға "Өмөт" номинацияһы бүләктәре тапшырылды. Жюри ағзалары "Горняк дозор" командаһы ағзаһы Фидан Ҡолмөхәмәтовты "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында баһаланы.

**Зөһрә ҠУНАФИНА.**


“Горняк дозор”

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**ҺОРАУ: Быйылғы сара ниндәй ягы менән тамашасыларҙың һәм ҡатнашыусыларҙың иҫендә ҡалыр?**

**Радик НУРУЛЛИН:** Быйылғы бәйгелә кейемдәргә иғтибар итә башлауҙары ҡыуандырҙы. Стәрлетамаҡтан "Страйк" һәм Сибайҙан "Кендек" командалары сағыу, матур костюмдары менән айырылып торҙо.

**Алина ҒИНИӘТУЛЛИНА, "XX Централ" командаһы ағзаһы:** Ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырҙыҡ: үҙебеҙҙең нимәгә һәләтле булыуыбыҙҙы иҫбат иттек. Был уйын, ғәҙеллек ҡасан да булһа тантана итә, тигәнгә инаныу сараһы булып иҫебеҙҙә ҡаласаҡ.

**Айгөл ИСМӘҒИЛЕВА:** Сәхнәнән һүгенеү һүҙҙәре, "билдән түбән" мәҙәктәр ишетеп, күңелем ҡырылды. Тамашасы хөкөмөнә сығарыр алдынан ойоштороусылар уларҙы иләргә тейеш түгелме икән ни?

**Тимур САФИУЛЛИН, Силәбе башҡорт йәштәре иттифаҡы рәйесе:** Беҙ "Шаян уйын"да ҡунаҡ булараҡ ҡына сығыш яһаныҡ. Сәхнәләге сығыштарға ҡарап, һоҡланып ултырҙыҡ. Башҡорт рухы менән һуғарылған сығыштар ҙа булды. Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә яңғыраған мәҙәктәр бик күңелгә үтеп инде. Сит тел һүҙҙәрен ҡулланмайынса, саф башҡортса ғына сығыш яһау яғында мин. Ошо етешһеҙлектән дә арынһа ҡатнашыусылар, яҡшы буласаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙәренә эйәреп, доньяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АХМАҠТАР...

## ашау һәм эсеү өсөн йәшәй

Властка ынтылыу ҡурҡыуҙан килә. Кешеләрҙән ҡурҡмағандар улар өҫтөнән идара итергә ынтылмай.

**( Б. Рассел).**

Нимә ул еңелеү? Ул - мәктәп, ул - тағы ла камилыраҡ бер үргә тәүге аҙым.

**(У. Филлипс).**

Ахмаҡтар ашау һәм эсеү өсөн йәшәй, йүнле кешеләр йәшәү өсөн ашай һәм эсә.

**(Сократ).**

Күңелһеҙ кешеләрҙе тыңлап, өмөтһөҙ әҙәмдәрҙе төҙәтергә тырышып, алтын ваҡытыңды әрәм итмә. Был - ауырыу маҡсаттар һәм алдатҡыс ынтылыштар.

**(Уайльд).**

Ике кәмәгә баҫып торма - һыуға осорһоң.

**(Бенг).**

Тормош тәжрибәһе - ул эшләнгән хаталарың күләменең сифатҡа күсеүе.

**(Б. Крутиер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт еәйне менән урам буйлап килә. Бына улар бер өй тапҡырына етә. Өй янында бер малай ҡойма йүнәтеп йөрөй. Уйнарға сығыр алдынан ошо эште башҡарыуҙы атаһы ҡушҡан икән. Малай бер ҙә эш рәте белмәй, йә сүкешен яңылыш тота, йә таҡтаһы төшөп китә, йә ҡаҙауы тынлашмай. Бына бер мәл ул яңылыш сүкеше менән ҡулына һуға. Ауыртыныуҙан әрнеп ҡысҡырып ебәрә малай һәм сүкешен ергә бәрә. Үҙе яклау йә ярҙам эҙләгәндәй, уйнап йөрөгән иптәштәренә күҙ һала. Был хәлде күҙәтеп килеүсе бабайҙың ейәне тиҙ генә әлеге малайға ярҙамға ташлана, сүкешен алып, ҡойма таҡтаһын ҡағып та ҡуя. Ләкин олатаһы уға эшләп бөтөргә бирмәй, ул ҡаҡҡан ҡойманы янынан ақтарып сығара. "Ниңә улай итәһең, олатай? - ти ейәне аптырап. - Һин бит мине һәр саҡ кешеләргә ярҙам итергә өйрәттең..." "Мин һине изгелеккә өйрәттем, ә ике йөҙлөлөккә түгел, - ти олатай. - Малай өсөн эш эшләп, һин уны ҡойма йүнәтергә өйрәнеүҙән азат итеп кенә ҡалманың. Ул бит һәр эштә түҙем булырға кәрәк икәнен дә үҙләштереп өлгөрмәне. Һин үҙеңдең "изге" эшең менән был малайҙың тормошон боҙа яҙҙың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

**E-mail: kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6173
Заказ 1636